ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30-6 сентябрь - октябрь (һарысай - ҡарасай) 2017

№39 (769)

15 йыл

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 5 октябрҙән 15 октябргә тиклем гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзаныраҡҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында В0665 индекслы "Киске Өфө"гә 508 һум 92 тин менән яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә лә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең 15 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тағы ла тел тураһында** 5

**Депутатлыҡ вазифаһы...** "Милләт әсәһе" тигән вазифаға ҡамасауламай 8-9

**Уңышлы тупраҡта тамырланып...** уның өсөн йәм, беҙәк булырға тырышыуыбыҙ 10-11

**Иң бәхетле миҙгелем,** йәки Етмеште ҡыуып барған тиҫтерҙәремә әйтер һүҙем 12-13

**ТВ-программа** 14









БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ



# АҪАБА ХАЛЫҠҠА ИХТИРАМ...

## уның телен өйрәнеүҙә лә сағыла



***Ольга ПАНЧИХИНА, Башҡортостан Республикаһының Йәмәғәт палатаһы рәйесе:*** Тәү сиратта үҙең йәшәгән ерҙе, аҫаба халыҡты һәм уның мәҙәниәтен, телен ихтирам итергә кәрәк, тигәнгә күптән инанғанмын. Әлбиттә, Рәсәй Федерацияһында бихисап төрлө милләт вәкилдәре йәшәй, Башҡортостан Республикаһында ғына улар йөҙҙән ашыу. Әммә нәҡ Башҡортостанда йәшәүселәргә генә башҡорт телен өйрәнергә уникаль мөмкинлек бирелгән.

Заманында мәктәптәрҙә "Башҡортостан мәҙәниәте", "Башҡортостан тарихы" предметтарын да уҡыталар ине, әсәйем оҙаҡ йылдар география уҡытыусыһы булып эшләне һәм балаларға "Башҡортостан географияһы" предметы буйынса дәрестәр бирҙе. Был предметтарҙың барыһы ла кәрәк, сөнки беҙ донъя буйлап сәйәхәт итәбеҙ, ә йыш ҡына үҙ төбәгебеҙҙә ниндәй тәбиғәт ҡомартҡылары, хозур урындар булыуын, уларға бәйле ниндәй тарих һаҡланыуын, ошо төбәктән донъя кимәлендә билдәле ниндәй арҙаҡлы шәхестәр сығыуын да белмәйбеҙ.

**Мин, әсә булараҡ, бер ваҡытта ла ҡыҙҙарымдың башҡорт телен өйрәнеүенә ҡаршы килгәнем булманы, урыҫ милләтле булһаҡ та, улар мәктәптә башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнде. Балалар телде генә түгел, башҡорт халҡының мәҙәниәте, тарихы, йолалары менән яҡындан таныша алды. Сөнки башҡорт телен тәрәнәйтеп өйрәнеү өсөн хатта дәүләт теле булараҡ аҙнаһына ике сәғәт уҡытыу ҙа етмәй. Шулай ҙа ҡыҙҙарымдың башҡорт теле буйынса үткәрелгән олимпиадала ҡатнашып китеүе тәүҙә минең өсөн көтөлмәгән хәл булды.** Был, һис шикһеҙ, уларҙың уҡытыусыларының хеҙмәт ҡаҙанышы. Тәүҙә өлкән ҡыҙым башҡорт теле буйынса үткәрелгән олимпиадала район кимәлендә икенсе урын яуланы, һуңынан бәләкәсе Өфө ҡалаһы кимәлендәге олимпиадала беренсе урын яулап, республика кимәлендә лә төп еңеүсе тип танылғас, ғорурлығымдың сиге булманы. Бәләкәс ҡыҙым һуңынан Рәсәй Федерацияһы республикалары дәүләт телдәре буйынса мәктәп уҡыусылары һәм студенттарҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһында ҡатнашып, финалға үтте. Был ярыштан ҡайтҡас, ҡыҙым: "Әсәй, унда бөтәһе лә үҙ туған телен белеү кимәлен күрһәтергә барған, минең кеүек республиканың икенсе дәүләт телен белгән башҡа милләт кешеләре булманы", - тип тулҡынланып һөйләне.

Быны мин ни өсөн һөйләйем? Сөнки ата-әсәләр бөгөн балалары өсөн ниндәй телде уҡытыуҙы хәл иткән саҡта ошо миҫалды ла күрергә, белергә тейеш. Башҡортостанда күп милләттәр йәшәй, беребеҙ ҙә бынан ситкә күсеп китергә йыйынмай һәм аҫаба халыҡҡа, уның рухи ҡиммәттәренә, теленә ҡарата ихтирам күрһәтергә бурыслы. Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына ярашлы, республика граждандары ике дәүләт телен дә яҡшы өйрәнергә, башҡа халыҡтарҙың туған телдәрен ихтирам итергә, үҙ-ара татыу һәм аңлашып йәшәргә тейеш. Балалар үҫә, улар ғүмер буйы атаәсә хәстәренә мохтаж булмаясаҡ, бер ваҡыт хатта тыуған йортон ташлап, ситкә уҡырға, эшләргә сығып китәсәк. Өҫтәп тағы ла икенсе тел белеү бер ҡасан да ҡамасауламай. Башҡорт телен белгән кеше бик күп милләттәр, бигерәк тә 30-ҙан ашыу төрки телле милләттәр менән аңлаша ала. Һәр хәлдә, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен аҙнаһына ике сәғәт уҡыу ошо республикала донъя көткән төрлө милләт кешеләренә тормошта кәрәк буласаҡ, тип һанайым.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Картлыҡ көндәрен хәстәрләү бурысына нисек ҡарайһығыҙ?

***Рәмил БАЙМУЛЛИН, хаҡлы ялдағы табип:*** Ҡартлыҡ - ғүмере бар һәр кемгә лә килә торған ҡотолғоһоҙ осор ул. Бер яҡтан, ошо көнгә еткәнсе йәшәү - үҙе бер бәхет булһа, икенсе яҡтан, кешенең ғүмер байышы уны ошо юҫыҡта һағышлы уйҙарға һалыуы ла тәбиғи. Ғәҙәттә, кеше ҡартлыҡ яҡынлашыуын 50-55 йәштәрҙән айырыуса нығыраҡ тоя башлай. Ә инде пенсияға сыҡҡас, күптәр депрессияға, ауыр кисерештәргә бирелә. Йөрәк, нервылар системаһы ҡуҙғый, йоҡоһоҙлоҡ интектерә, буштан ғына ла ҡан баҫымы күтәрелеүсәнгә әйләнә, быуындар һыҙлай башлай. Олоғая килә, кешенең гормондар системаһы ла һүнә төшә, шунлыҡтан, хис-тойғо өлкәһе, аң кимәле лә үҙгәрештәргә дусар була бара. Тормош юлдашын юғалтып, яңғыҙ ҡартайырға тура килгәндәргә айырыуса ҡыйын була бара.

**(Дауамы 2-се биттә).**



Баймаҡ ағинәйҙәре.

12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Картлыҡ көндәрен хәстәрләү бурысына нисек ҡарайһығыҙ?

(Башы 1-се биттә).

Бына ошондай үҙгәрештәрҙе мөмкин тиклем еңелерәк үткәреү өсөн йәштән сәләмәт тормош рәүешенә ғәҙәтләнергә кәрәк. Эсеү-тартыуҙан азат булыуҙы ғына аңлатмай әле был, шул уҡ ваҡытта физик әүҙемлек, дөрөҫ туҡланыу, һәр нәмәгә ҡарата ыңғай мөнәсәбәт һәм фекерләү булдырырға тырышыуҙы ла күҙҙә тотам был йәһәттән. Ғаиләлә татыулыҡ, тыныс шарттарға ғәҙәтләнеүҙең дә әһәмиәте ҙур. Тормош юлдашын юғалтып, яңғыҙ ҡартайырға тура килгәндәргә икеләтә ауыр буласағын да оноторға ярамайҙыр. Йәшерәк сағында кеше эш, тормош мәшәҡәттәренә бирелеп, һаулығын ҡайғыртып еткермәй. Шуны иҫтә тотһаҡ ине: теге йәки был сирҙе ваҡытында, ул хроник стадияға әүерелмәҫ элек үк дауаларға кәрәк, юғиһә, ул, кеше олоғайып, иммунитет кәсһеҙләнә башлаған та үҙе хаҡында белдерә башлаясаҡ әле. Юмор оҫтаһы Евгений Петросян шулай шаярта бит: "Пенсияға сыҡҡас, ике дуҫ таптым үҙемә: Альцгеймер менән Паркинсон исемле". Ҡыҙыҡ, әлбиттә, ләкин һис тә көлкө түгел: оло йәштәгеләр араһында йыш осрай торған иң мәкерле, ауыр сир улар. Бынан тыш, өлкән йәштәгеләр гипертония, атеросклероз, остеопороз кеүек сирҙәргә дусар булыусан. Ундай хәлдәргә тарымаҫ өсөн һаулыҡҡа ныҡ иғтибарлы булыу мотлаҡ. Быndай ауырыуҙарға, нигеҙҙә, эсеү-тартыу, дөрөҫ туҡланмау арҡаһында ҡан тамырҙарына холестерин ултырыу, аҙ хәрәкәтләнеү, кәүҙәнең артыҡ ауырлығы сәбәпсе була. Аҡыл камиллығы түбәнәймәһен өсөн мейе әүҙемлеген һаҡларға, быныҡ өсөн иһә көн режимын теүәл үтәү, физик әүҙемлек, саф һауала йөрөү, дөрөҫ туҡланыу (йәшелсәемеш, һөт ризыҡтары, балыҡ, диңгеҙ ризыҡтары, зәйтүн майына өҫтөнлөк биреү), даими рәүештә хәтерҙе күнектереү кеүек иҫкәртеү саралырын иҫтә тоторға һәм уларҙы үтәргә тырышырға тура киләсәк. Ауыл йәшәүсе өлкәндәргә хаҡлы ялға сыҡҡас та эшһеҙлек янамай: хужалыҡ, баҡса, малтыуар, ҡош-ҡорт менән булып, улар ҡартайырға ла ваҡыт тапмай - был һәйбәт. Ә бына ҡала кешеһенә был яҡтан ҡыйынға тура килә (әгәр баҡсаһы ла булмаһа). Шуға күрә, ваҡыты бар пенсионер үҙ ҡыҙыҡһыныуы, һәләте йәһәтенән ниндәй ҙә булһа берәй шөғөл тапһын ине: ҡул эштәре (айырыуса бәйләм бәйләүҙең бармаҡтарға ғына түгел, мейе эшмәкәрлегенә лә файҙаһы бар), ағастан төрлө изделиелар яһау, шахмат-шашка уйнау, башватҡыстар сисеү, компьютерҙа эшләргә өйрәнеү, Ҡөрьән сүрәләре йә шиғырҙар ятлау, сәйәхәткә сығыу һәм башҡа шуның кеүек күнекмәләрҙең өлкәндәр сәләмәтлегенә ыңғай йоғонтоho бик ҙур. Һәм тағы ла шуны иҫтә тотоғоҙ: ҡартлыҡ - ул бер ҙә генә һүнеү түгел әле, сөнки бөтәһе лә кешенең ошо осоронда үҙ-үҙен тотошона бәйле, бөтәһе лә һеҙҙең ҡулда һәм ихтыярҙа - үҙегеҙ өсөн дә йәшәп ҡалырға форсат тыуа, тимәк. Шунан файҙаланып ҡалырға ашығығыҙ!

*Сәүиә ДӘҮЛӘТБАЕВА, хеҙмәт ветераны:* Ҡартлыҡ көндәрен хәстәрләү һәр кемдең бурысы, ул быуындан-быуынға күсеп килгән йола, нисек был хаҡта онотмаҡ кәрәк. Үҙебеҙҙең әсәй-өләсәйҙәр һандығының төбөндә ята торғайны бит хәйерләктәренә тиклем бөтөн кәрәк-ярағы. Беҙгә лә һеңеп ҡалған инде ундай ғәҙәт-йолалар. Ҡыҙым шулай мин үлемтеккә тип йыйған әйберҙәрҙе күреп ҡалғас, күҙҙәренә йәш алып, минең менән ризалашмай маташҡайны ла, иплән кенә яныма ултыртып алып, аңлаттым уға. Ниндәй генә лә хәлдәрҙә лә ун көнлөк запасың булһын ул, тиғән аҡыл бар бит халыҡ телендә. Унан һуң, мираҫыңды кемгә ҡалдырыуҙы ла алдан хәстәрләр кәрәк. Бөтөн милкемде: фатирҙы ла, дачаны ла, Себер яҡтарында бер нисә йыл эшләгән саҡта йыйған аҙ ғына хәләл аҡсамды ла ошо берҙән-бер балам исеменә күсертеп ҡуйҙым: донъя хәлен кем белә - аҙаҡ аптыранып, ыҙалап йөрөмәһен. Балалар йәл булып китә: ҡатмарлыраҡ замандар килде бит уларға. Ни эше, ни аҡсаһы, тигәндәй... Беҙҙең быуынға, исмаһам, ҡайҙа барып юлыҡһаң да эш менән проблема булманы. Ата-әсәләребеҙгә лә беҙҙең өсөн борсолорға тура килмәне, ҡайҙа теләһәк, шунда ҡолас ташлап, йүгереп йөрөп эшләнек. Ә бына үҙебеҙгә балаларҙың киләсәген хәстәрләмәй булмай. Әйтеүемсә, заманы башҡа хәҙер. Быныһы инде матди хәл-әхүәл хаҡында булды, ғәйеп итмәҫһегеҙ.

Баланды йүнле кеше итеп тәрбиәләү - шулай уҡ ҡартлыҡ көнөң хаҡында хәстәрлек бит, уйлап ҡарағанда. Шөкөр, был



Өфө ағинәйҙәре.

яҡтан да зарланырға урын юҡ, ҡыҙым минең өсөн өҙөлөп тора, инде үҙе һымаҡ аҡыллы ғына кейәү тап була күрһен, тип теләйем. Тормош ҡиммәте - ул бит аҡсала ла, милектә лә түгел, татыу, тулы ғаиләлә. Иртә яңғыҙ ҡалып, ҡыҙымды үҙем тәрбиәләп үҫтерҙем, инде уның үҙенә ғаилә бәхете теләйем: ишле булып, бер-беренә наҙлы булып, үҙ балаларын үҙҙәре үҫтерһендәр. Үҙемде әле бик өлкәндән иҫәпләмәһәм дә, миңә инде киләсәк көндәремдә нисек тә уға ауырлыҡ һалмаҫҡа, ә быныҡ өсөн сәләмәтлекте ҡайғыртып йәшәргә кәрәк буласаҡ. Ҡартлыҡ көндәребеҙҙең сыуаҡ, тыныс булыуы күп йәһәттән үҙебеҙгә бәйле икәнен онотмайыҡ: насар ғәҙәттәрҙе ташлап, үҙебеҙҙе ыңғайға көйләп, һәр сәғәтебеҙҙең ҡәҙерен белеп йәшәйек.

*Мәүлиҙә БАСИРОВА, эшләп йөрөүсе пенсионер:* Заманында Бөрө медучилищеһын тамамлап, фармацевт һөнәренә эйә булдым һәм ғүмерем буйы баш ҡалабыҙ аптекаларында эшләп, хаҡлы ялға сыҡтым. Хәҙер йәштәр бик күп килде, ләкин улар янына тәжрибәле кеше лә кәрәк, тип, аптека идаралығынан тәҡдим булғас, бер аҙ эшләп ҡарарға булдым. Дарыу препараттары менән эш итеү бик етди мәсьәлә, бында яңылышыу, онотоу кеүек хилафлыҡтар ғәфү иткеһеҙ күңелһеҙлектәргә килтереүе бар. Тап ана шундай бер хәлдән һуң эшләп тороуымды һоранылыр ҙа инде. Бик ялға китке килһә лә, сменалап эшләү хәлдә еңеләштерҙе. Тик ҡайһы саҡ ҡырын-мырын ҡараш йә һүҙ ишеткеләп, күңел рәнйеп ҡуя, тик уға иғтибар итмәҫкә тырышам. Уйлап ҡараһаң, эштә барыбер онотолаһың, тормош ҡайнап тора бында - йәштәр менән бигерәк тә еңел эшләүе, уларҙан дәрт, позитив бөркөлә. Шуныһына шатмын. Өйҙә ултырған әхирәттәремдә лә ҡайҙа булһа ла берәй ергә ваҡытлыса эшкә урынлашырға өгөтләйем, юғиһә, донъя баҫып бара уларҙы: көҙүгә ауырланып киттеләр, тормошҡа ҡыҙыҡһыныуҙары ла һүнә төштө кеүек. Ҡартлыҡ - ул, ысынлап та, теләйһеңме, юҡмы, һинән һорап тормай шул. Кемдәрҙер был фактты ҡабул итергә теләмәй, шунлыҡтан, айырыуса артист халҡы бар аҡсаһын йәшәртеүсе процедураларға сарыф итә, хатта бысаҡ аҫтына ятыуҙан да ҡурҡмай: пластик операциялар, липосакция кеүек ғәләмәттәр менән булыша. Тик бына йәш күренеүҙән генә бит организм ҡартайыуынан туҡтамай. Иң мөһиме - оло йәштә лә һау-сәләмәт ҡалыу. Ғүмер буйы дарыуҙар менән эш итһәм дә, үҙем уларҙы ҡулланып барырға тырышмайым. Майһыҙ диета, үлән сәйҙәренә өҫтөнлөк бирәм. Эшкә йәйәү барам, йәйәү ҡайтам. Олоғайған көндө кеше көнлө булыуҙан да насары юҡтыр ул, шуға күрә, үҙ көнөңдө үҙең хәстәрләүҙе алдан уҡ башлау мотлаҡтыр. Алдан, тигәнемдә йәштән тип аңлай күрмәгеҙ тағы. Янып-йәшнәп торған дәртле мәлеңдә кем ошонан ҡартлығын уйлап, хәстәрләп ултыра инде! Ҡартлыҡ әллә ҡайҙа Ҡаф тауҙар артында, бик алыҫ булып тойолһа ла, уҡып бөтөп, эшләй, тормош артынан ҡыуып йәшәй генә башлаһаң, нисек килеп еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалаһың...Был турала йәштән ҡайғыртыу тигәнем, әлеге бер әйтемдәгесә, намыҫыңды йәштән һаҡла, тигәнгә тап килә түгелме икән? Ни бары әхлаҡ ҡанундарынан тайпылмай, дөрөҫ итеп, ваҡытында белемһөнәргә эйә булып, ғаилә ҡороп, балаларыңа матур тәрбиә биреп, сәләмәт тормош рәүеше менән йәшәү генә кәрәк, минеңсә. Быуының ныҡ ығынып, эшләй башлағас, әлбиттә, пенсия хәлдәрен дә иҫкә төшөрәләр: эш биреүсе тарафынан Пенсия фондына иғәнә күсерелеп бара һәм беҙҙең быуындың пенсия күләме күп йәһәттән шуға бәйле булды. Әле эшләп йөрөгән һәм киләһе быуындарға иһә, йүнле пенсия алам, тиһә, үҙҙәренә тырышырға, арттыра алһа, туланма фондҡа өҫтәп һала барырға кәрәк буласаҡ. Тормош хәлендә генә түгел, ҡартлығыңды ла ҡайғыртыу өсөн дә эш хаҡыңдың ағыу булыуы хәйерле инде. Хеҙмәт хаҡын конвертта алыусылар өсөн шуға ла уйланырға урын бар, минеңсә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓11 октябрҙә Башҡортостанда Республика көнө билдәләнә. "Башҡортостан Республикаһында байрам һәм иҫтәлекле көндәр тураһында"ғы законына ярашлы, был көн эшләмәгән байрам көнө тип иҫәпләнә. Быйыл Республика көнө шаршамбыға тура килә, ул ял көнө буласаҡ.

✓Владимир Путин 134 мең кешене әрмегә хеҙмәткә көҙгө саҡырыу тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Документта шулай уҡ "саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәт ваҡыты уҙған һалдаттарҙы, матростарҙы, сержанттарҙы һәм старшиналарҙы" хәрби хеҙмәттән бушатыу кәрәклеге билдәләнә. 2016 йылда көҙгө саҡырылышта Рәсәй әрмеһенә - 152 мең кеше, 2017 йылдың яҙында 142 мең кеше хеҙмәт итергә юлланды.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә Ҡытайҙың Аньхой провинцияһы менән хеҙмәттәшлек мәсьәләләрен тикшерҙеләр. Вице-премьер һәм ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Евгений Гурьев менән осрашыуҙа Аньхойҙан бизнес вәкилдәре ауыл хужалығы ҡалдыҡтарын ҡулланыу, бәшмәк үҫтереү, йылға һәм күл балығын үрсетеү буйынса тәжрибә уртаҡлашырға әҙер булыуын белдерҙе.

✓Алдағы йылдарҙа Башҡортостанда донъя кимәлендәге курорт комплексы төҙөләсәк. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәйҙең "Здравницы" журналына биргән интервьюһында ошо хаҡта хәбәр итте. Һүҙ әүҙем үҫешкән "Урал легендаһы" Башҡортостандың тау курорттары" туристик кластеры хаҡында бара. Ул Белорет һәм Әбйәлил райондарында "Морат", "Абҙаҡ", "Яҡтыкүл" кеүек курорттарҙы, "Ассы" шифаханаһын, "Ар ташы" ял базаһын берләштерә.

✓Башҡорт дәүләт университетының химия факультетының органик һәм биоорганик, физик химияһы һәм химик экологияһы кафедраһы хеҙмәткәрҙәре Рәсәй һәм халыҡ-ара йәш ғилми саралар ойоштороу проекттары конкурсында Рәсәй фундаменталь тикшеренеүҙәр фонды грантын отто. Профессорҙар Рифҡәт Тәлипов һәм Әхәт Мостафин етәкселегендә әҙерләнгән проекты 250 мең һум күләмендә Рәсәй фундаменталь тикшеренеүҙәр фонды ярҙамын алды.

✓Балалар баҡсаһына сират менән бәйле мәсьәләне ғәҙәти булмаған хәл итеү юлын Республика кардиология үҙәгендә таптылар. Бында дауалау учреждениеһы хеҙмәткәрҙәре өсөн балалар баҡсаһы астылар. Республика кардиология үҙәге етәкселеге уның ойоштороусыһы булып тора. "Кардио әсәй" мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың ҡыҫҡа ваҡыт булыу төркөмөнә йәш ярымдан ете йәшкәсә балалар йөрөй аласаҡ.

БЫЛ АЙҘА...

# ҠАРАСАЙҒА АЯҠ БАҪҠАНДА




**Йылдың унынсы айы - халыҡса әйткәндә, ҡарасай тыуа. Яланғас ботаҡтарҙан һуңғы япраҡтар ҡойола.Октябрҙә йылы тарафтарға иң һуңғыларҙан булып һыуыҡтан ҡурҡмай торған ҡоштар - ҡыр ҡаҙҙары, өйрәктәр осоп китә. Көн яҡтыһы һиҙелерлек ҡыҫҡара бара, ҡараңғы бик иртә төшә. Ергә ҡар ҡатламы ятҡанға тиклем ҡарасайҙа эңер мәле күҙгә төртһәң, күренмәҫлек була. Айҙың халыҡса атамаһы тап шуға бәйлелер ҙә, бәлки. "Ҡара көҙ" тип тә әйтәләр бит ошо мәлде. Уртаса һауа температураһы был айҙа 6-7 градус йылынан 3-4 - градусҡаса һыуыҡ тороуы ихтимал.**

...Тәбиғәт миҙгелдәре кешенең ғүмер ағышына оҡшаш. Ыуыҙ ғына сабый мәле - яҙы, йәшлеге - йәйе, оһолло йәше - көҙө, сал ҡартлығы ап-аҡ ҡышты хәтерләтә әҙәм балаһының. Шуғалыр ҙа, бәлки, көҙ уртаһы - октябрь айының Оло йәштәгеләр көнө (**1**) менән башланып китеүе тәбиғи ҡабул ителә. Тик шуныһы йәл: бер көнөң бер нигә лә торошло түгел бөгөн: "йәлп" итеп үтә лә китә ул. Ҡалған көндәрҙә ҡарттарыбыҙ үҙҙәре менән үҙҙәре япа-яңғыҙ тора ла ҡала. Дөрөҫ, күптәре яңғыҙ ҙа түгел уларҙың: балалары, ейәндәре хөрмәтендә яңғыҙлыҡтың ни икәнен дә белмәй йәшәгән бәхетлеләре лә, яҙмыш ярлыҡауына ташланған берәҙәге, етем-еҫере лә, ҡартлыҡ ҡыҫымына бирешмәҫкә ҡырталашып та, яңғыҙлыҡтан ҡасып та ек күремсеһе була-була эшләп йөрөгәндәре лә байтаҡ. Яныбыҙҙағы ҡарт-ҡоро, яңғыҙ-ярымға мәрхәмәтле булайыҡсы, зинһар. Бирһен Хоҙай, һәр кемебеҙгә лә ишек ҡағасаҡ әле ул көҙгө һағышлы көндәр - шуны онотмайыҡ.

Әйткәндәй, ошо датаға ҡағылышлы тағы бер кәлимә: Бөтөн донъя вегетариандар көнө лә ҡарттар көнөнә тап килә икән. Быны кинәйәһе шундалыр ки: ит ашамаған кеше сәләмәтерәк тә була, оҙаҡ та йәшәй, имеш, тигән ҡараш бар. Икенсе яҡтан, иттең файҙаһы бәхәсһеҙ, ул айырыуса йәш организм өсөн бик кәрәкле, ә ҡарттарға еңелсә туҡланыу, күберәк йәшелсә-емеш, һәр төрлө ярма ризыҡтары менән сикләнеү хәйерлерәк. Был йәштә артыҡ холестериндың кәрәге юҡ. Тибет йөҙйәшәрҙәренең, кеше ғүмерен манный бутҡаһынан башлап, шуның менән тамамлап ҡуя, тигән кинәйәһендә бер аҡыл барҙыр, күрәһең.

Шул да мәғлүм булһын: **1 октябрь** - Халыҡ-ара музыка көнө лә ул. Бөгөн тормошобоҙҙо, бигерәк тә эш урыныбыҙҙы электрон бәйләнештән башҡа күҙ алдына ла килтереү ҡыйын. Электрон почтаның тыуған көнө (**2**) хат яҙышыу кеүек эпистоляр жанрҙы юҡҡа сығарҙы, ләкин аралашыу электрон бәйләнеш рәүешенә күсте. Бөтөн донъя почта (**9**), Халыҡ-ара хат аҙналығы (**3-9**) көндәрендә хәҙер хат ташыусыға ауыр сумкаһын артмаҡлап, тирләп-бешеп өй беренсә йүгермәләргә кәрәкмәй инде күптән.

Был айҙа бик күп һөнәр эйәләре үҙ байрамдарын билдәләй. Мәҫәлән, Бөтә донъя архитектор (**2**), Халыҡ-ара табип (**2**), Социаль табип (**2**), Уҡытыусы (**5**), Енәйәт тикшереү хеҙмәткәрҙәре (**5**), Страховкалаусы (**5**), Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте эшсәндәре (**8**), Юл хужалығы, шулай уҡ Аҙыҡ-түлек сәнәғәте эшсәндәре (**15**), Халыҡ-ара авиадиспетчерҙар (**20**), Реклама хеҙмәткәрҙәре (**23**), Автомобиль һәм ҡала пассажирҙар транспорты эшсәндәре (**29**), Инженер-механик (**30**) көндәре көтә беҙҙе был айҙа. Ниндәй кимәлдә һәм нисегерәк билдәләнеүенә ҡарамаҫтан, уларҙың һәр береһе үҙенсә ниндәйҙер әһәмиәткә эйә һәм кәрәкле.

Ә шулай ҙа октябрҙә, ғөмүмән, халҡыбыҙ тормошонда иң мөһим булған тарихи дата - Башҡортостан Республикаһы көнө (**11**) билдәләнә. Быйыл Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларация ҡабул ителеүенә 27 йыл тула (1990). Яңы тарихыбыҙҙың тәүге ике тиҫтәһендә республикабыҙҙың иҡтисади һәм ижтимағи тормошонда тамырынан үҙгәрештәргә өлгәшелде, халҡыбыҙ рухи яңырыу кисерҙе, тормош кимәле күтәрелде. Туған телебеҙ, тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙҙе күҙ ҡараһылай һаҡлау, уны өйрәнеү һәм үҫтереү буйынса аныҡ эштәр башҡарылһа, бөгөн иһә, үҙаллылыҡ яулауыбыҙҙың өсөнсө тиҫтәһен ваҡлағанда йәмәғәтселек алдына республикабыҙҙың дәүләт телдәренең береһе тип законлаштырылған башҡорт теленең яҙмышын ҡурсалау мәсьәләһе килеп баҫты. Дөрөҫөн әйткәндә, тел яҙмышы айырым кешеләрҙең - үҙҙәре тыуып-үҫкән, көн иткән төйәктең дәүләт телен һанға һуҡмаған бер төркөмдөң ихтыярына ҡуйылды. Ашаған табағыңа төкөрөү ана шулай була икән ул... Был хәл күбеһенсә төбәк тарихы, мәҙәниәте хаҡында элементар төшөнсәгә эйә булмаған наҙандар арҡаһында килеп сыҡты. Республика көнө лә бит күптәрҙең сикләнгән аңында фәҡәт өҫтәмә ял көнө генә булараҡ ҡабул ителә башланы. Дөрөҫөн әйткәндә, был йәһәттән бер кем дә бер кемде лә тарих йә тел өйрәнеүгә ирекһеҙләргә йыйынмай. Мәсьәлә бары тик шунда ғына: һәр кем уға үҙ аҡылы һәм аңы кимәленән сығып ҡарай. Бар шундайҙар ҙа: быңдай хәлдәргә "ни хәл итәһең - заманы шундай" тип мөнәсәбәт белдерергә ғәҙәтләнгән. Эйе, тарих аҡылына, этика ҡанундарына нигеҙләнгән ҡағиҙәләр инҡар ителеп, стандарттар күҙ алдында емерелгән осорҙа йәшәйбеҙ, ләкин манҡортлоҡ кешелекте анархияға этәрергә тейеш түгел - быныһы ысынлап та аҡылһыҙлыҡтың үҙе булыр, юғиһә...

Стандарт, тигәндән, ул донъяға мөнәсәбәт йә фекерләү ҡеүәһенән бигерәк, кешенең йәшәү сифатына ҡағылышлы әһәмиәте менән мөһимерәк. Аҙыҡ-түлек йә тауар етештереү өлкәһен генә алайыҡ, мәҫәлән. Был юҫыҡта Дәүләт стандарттары бөтөнләй һанға һуғылмай хәҙер. Тауар йә ризыҡтың төп сифат күрһәткесе булған ГОСТ тигән дүрт хәрефте бик һирәк осратырға була. Бөгөнгө етештереүсе аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген түгел, ә үҙ кеҫәһен ҡайғырта һәм ниндәй сеймал арзан - шуға өҫтөнлөк бирә. Аҙыҡ-түлек составына теләһә ниндәй элек рөхсәт ителмәгән ингредиенттар, зарарлы һәр төрлө майҙар, консерванттар, тәмләткестәр һәм башҡа "химия" тонналап ҡушыла. Бөтөн донъя стандартлаштырыу (**14**) һәм Аҙыҡ-түлек сәнәғәте эшсәндәре (**15**) көндәре быңа шундай күңелһеҙ уйҙарға һала.

Фәҡирлекте бөтөрөү өсөн көрәш көнө лә (**17**) бар календарҙа. Планета халҡына бөгөн матди фәҡирлек бик үк янамайҙыр ҙа, уның ҡарауы, рухи фәҡирлек тигән нәмә ярайһы хәүефләндерә. Алдараҡ әйтелгән фекергә ялғап, шуны дауам итергә тағы бер форсат бар: аҫаба халыҡ еренә килеп ултырып, ашап-эсеп, ирәүәнләп ошо ерҙә көн итеп, шул уҡ ваҡытта урындағы төп халыҡтың рухи ҡиммәттәренә төкөрөп йәшәү - ана шул рухи фәҡирлектең асыҡ сағылышы түгелме ни? Был датаның атамаһын шуға ла "Рухи фәҡирлекте бөтөрөү өсөн көрәш көнө" тип үҙгәртеү дөрөҫөрәк булыр ине.

...Ҡара көҙҙөң дә рашҡылы, ҡырыҫ көндәре һанаулы. Ап-аҡ сафлыҡ бөркөп, ҡыш та килеп етер әле, тигән өмөт менән алдағы көндәребеҙҙе яҡшыға юрап, ошо урында нөктә ҡуйырға рөхсәт итегеҙ.

**Ҡарасайҙа тыуғандар:**

**1** - Иҡтисадсы, тарихсы, географ, Башҡортостан тарихын өйрәнеүсе, "Ырымбур өлкәһе топографияһы" хеҙмәтенең авторы **Петр Рычковтың** тыуыуына - 305 йыл (1712-1777).

**7** - Рәсәй Федерацияһы Президенты **Владимир Путинға** - 65 йәш (1952).

**15** - Дәүләт эшмәкәре, 1967-1990 йылдарҙа БАССР Юғары Советы Президиумы Рәйесе, I дәрәжә Ватан һуғышы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, Халыҡтар дуҫлығы, Ҡыҙыл Йондоҙ һәм "Почет билдәһе" ордендары кавалеры **Фәйзулла Солтановтың** тыуыуына - 95 йыл (1922-1992).

**17** - Скульптор, рәссам, БАССР-ҙың халыҡ рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты **Тамара Нечаеваның** тыуыуына - 95 йыл (1922-2003).

**20** - Дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 1917-1918 йылдарҙа Башҡорт өлкә Шураһы рәйесе **Шәриф Манатовтың** тыуыуына - 125 йыл (1892-1936).

**21** - Бейеүсе, балетмейстер, 1939-1970 йылдарҙа Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүе ансамблен ойоштороусы һәм уның художество етәксеһе, Салауат Юлаев исемендәге БАССР дәүләт премияһы лауреаты **Фәйзи Ғәскәровтың** тыуыуына - 105 йыл (1912 - 1984).

**20 октябрҙә** З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте ойошторолоуға 125 йыл тула.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ике башҡорт фильмы Истанбулда кинофестивалдә ҡатнаша. Ул - "Башҡортостан" киностудияһының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы костюмы" (режиссеры Таңсулпан Бураҡаева) һәм режиссер Кирстен Гайнеттың "Ете ҡыҙ театры". Беренсе таҫма менән кинофестивалдә картинаның директоры - сценарий яҙыусы һәм драматург Зөһрә Бураҡаева таныштырасаҡ. Бөтә донъя төрки донъяһы журналистары федерацияһы ойошторған "Төрки донъя" документаль кино фестивале 30 сентябрҙә Истанбулда үтә.

✓Башҡортостанда иген йыйыу 30 сентябргә тамамлана, тип хәбәр итте республика хөкүмәте президиумы ултырышында ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. Тулайым йыйым 3,3 миллион тоннанан да кәмерәк булмаҫҡа тейеш. Иген етештереүҙең артыуының төп резервы - ужым культураларын сәсеү майҙандарын киңәйтеү, тип иҫәпләйҙәр ведомствола. Улар яҙғы культуралар менән сағыштырғанда юғарыраҡ уңыш бирә.

✓"Рәсәй-Башҡортостан радиоһы"ның "Минең ауылым" тапшырыуы "Кавказ тауышы" бөтә Рәсәй радиофестивалендә еңеү яуланы. "Минең ауылым" тапшырыуының авторы һәм алып барыусыһы - Ғәлимйән Ибәтуллин. Тапшырыу быңа инде 10 йыл эфирға сыға. Былтыр "Рәсәй-Башҡортостан радиоһы"ның "Ҡояшлы ҡала" балалар редакцияһы тапшырыуҙарының береһе "Кавказ тауышы" лауреаты булғайны.

✓2017 йыл башынан Башҡортостанда 20 кеше ҡырағай үҫеүсе бәшмәк менән ағыуланған. Иң йыш ағыуланыу осраҡтары Өфөлә һәм Өфө районында теркәлгән, тигән мәғлүмәт еткерҙеләр Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор хеҙмәтендә. Бәшмәк менән ағыуланыуҙың төп билдәләре уларҙы ашағандан һуң 1,5-2 сәғәттән барлыҡҡа килеүе ихтимал. Ул иһә баш ауыртыу, күңел болғаныу, ҡоҫоу, тәүлегенә 10-15 тапҡырға ҡәҙәр эс китеү (диарея) менән ныҡ итеп эс ауыртыу.

✓HeadHunter рекрутинг компанияһы эксперттары һорау алыу үткәргәндән һуң эш биреүселәрҙең тәжрибәһе булмаған йәштәр менән аҙыраҡ ҡыҙыҡһына башлауҙарын асыҡлаған. 2015 йылда Рәсәй компанияларының 11 проценты тәжрибәһеҙ белгестәрҙе ҡабул итмәгән. Бөгөн уларҙың һаны 26 процент. Быңың төп сәбәптәренең береһе - тейешле тәжрибәһе булмаған кандидаттарҙың амбициялары һәм ҙур хеҙмәт хаҡына өмөт итеүе. Башҡортостанда эш биреүселәрҙең 38 проценты ғына тәжрибәһеҙ кандидаттарҙы эшкә алырға әҙер.

***✓ Башҡортостан биш йылда 700-ҙән ашыу ватандашын ҡабул итәсәк. Рәсәй Хөкүмәте сит илдә йәшәүсе ватандаштарыбыҙҙы үҙ ирке менән күсеүгә булышлыҡ итеү буйынса республика программаһын раҫланы.***



*ҠЫҪҠАСА*

# ТӨРЛӨ ВАҠИҒАЛАР...

✓ **Футбол буйынса донъя беренселеге трофейының ил буйлап сәфәре дауам итә.** Өфө - илдең FIFA донъя чемпионаты кубогын ҡаршы алған дүртенсе ҡалаһы. Баш ҡалабыҙҙа уны 1 октябргә тиклем барып ҡарарға мөмкин. Кубокты ҡаршы алыу тантанаһы Салауат Юлаев майҙанында ойошторолдо. "Был 6 килограмм 175 грамлыҡ саф алтын. Трофейға дәүләт башлыҡтары һәм еңеүселәр генә ҡағыла ала", - тип аңлатты кубоктың ил буйлап турын ойоштороусылар. "Ошо кубок янында торғанда ҙур тулҡынланыу кисерәһең, сөнки бер йылдан был трофей еңеүсе команданың капитаны ҡулында буласаҡ, - тине Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов тантана ваҡытында. - Беҙ үҙебеҙҙең команда өсөн янып-көйәбеҙ. Республикабыҙҙа футбол яйлап үҫешә. Беҙ "Өфө" клубының һөҙөмтәләрен күрәбеҙ". Легендар трофей менән фотоға төшөргә теләүселәрҙе "Мега" сауҙа үҙәгендәге махсус сатырҙа көтәләр.

✓ **"Рейтинг" Мәғлүмәт коммуникациялары үҙәге РФ Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты менән берлектә Рәсәй Федерацияһы төбәктәре баш ҡалалары башлыҡтарының һәм эре финанс-сәнәғәт үҙәктәренең эшмәкәрлеген баһалау буйынса яңы тикшереү үткәрҙе.** Тикшереү исемлегенә Рәсәйҙең 88 ҡалаһы башлығы инде. Рейтинг буйынса тәүге өс урынды Мәскәү мэры Сергей Собянин, Белгород мэры Константин Полежаев, Өфө мэры Ирек Ялалов яуланы.

✓ **Өфөлә йылытыу миҙгеле башланды.** Баш ҡала хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә хәбәр ителеүенсә, халыҡтың һорауы буйынса йылылыҡты нормативҡа ярашлы ваҡытынан алдараҡ биреү хаҡында ҡарар ҡабул ителде. Был шунда уҡ йылы буласаҡ тигәнде аңлатмай әле. Үҙәкләштерелгән йылытыу системаһы инерциялы булғанлыҡтан, батареялар тейешенсә йылынырға тейеш, тип асыҡлыҡ индерҙеләр баш ҡала хакимиәтендә. Ресурс менән тәьмин итеүсе компанияларҙың вәкилдәре, үҙ сиратында, балалар баҡсалары һәм мәктәптәргә йылылыҡ бирелгән, тип белдерҙе.

✓ **Өфөлә эшһеҙҙәргә үҙ бизнесын асыуға 58,8 мең һум аҡса алырға мөмкин.** Ҡаланың Совет районы хакимиәте хәбәр итеүенсә, аҡса алыу өсөн Халыҡ мәшғүллеге үҙәгендә иҫәпкә торорға, бизнес-план тәҡдим итергә һәм конкурс һайлауын үтергә кәрәк. Юридик берәмек асырға талап ителгәндә ойошма уставының проектын яҙыу шарт. Дәүләт иғәнәһен түләүгә, мисәт һәм штамп эшләүгә сығымдар кире ҡайтарыласаҡ. Был субсидиялар "Эшһеҙ граждандар үҙмәшғүллегенә булышлыҡ итеү" программаһы сиктәрендә бирелә. Мәғлүмәтте (347) 282-45-54 телефоны йәки Бессонов урамы, 2а адресы (3-сө ҡат, 7-се бүлмә, "Мир" фирмаһы" туҡталышы) буйынса алырға мөмкин.

✓ **Баш ҡаланың Октябрь районы хакимиәте халыҡҡа Спорт һарайы янында урынлашҡан скверға исем һайларға, шулай уҡ ошонда башланғыс кластар уҡытыусыһына һәйкәл ҡуйыу-ҡуймауға ҡарата үҙ фекерҙәрен белдерергә тәҡдим итә.** Һәйкәл ҡуйыу идеяһы менән республикабыҙҙа Рәсәйҙең берҙән-бер халыҡ уҡытыусыһы, Башҡортостандың беренсе халыҡ уҡытыусыһы Лиза Әғәҙуллина сығыш яһаған. Ҡала халҡы "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге төркөмдә скверға исем һайлауҙа ҡатнаша һәм һәйкәл ҡуйыуға ҡарата үҙ фекерҙәрен белдерә ала.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# БАР ИҒТИБАР - БӨРЙӘНГӘ!



**2020 йылда Башҡортостанда уҙасаҡ Бөтә донъя фольклориадаһы майҙансыҡтарының береһе итеп Бөрйән районы һайланған. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәйҙең "Здравницы" журналына биргән интервьюһында ошо хаҡта хәбәр итте.**

"2020 йылда Башҡортостан Бөтә донъя фольклориадаһын ҡабул итә. Ошо ҙур халыҡ-ара традицион мәҙәниәт фестивале ЮНЕСКО эгидаһы аҫтында уҙғарыла, - тип һөйләне Рөстәм Хәмитов. - Беҙгә донъяның 60 иленән өс меңдән ашыу артист килә. Улар үҙҙәренең йыр-моңо, бейеүҙәре, халыҡ кәсептәре, аш-һыуы, милли кейемдәре һәм сәхнә сәнғәте менән таныштырасаҡ. Фольклориада майҙансыҡтарының береһе итеп Бөрйән районы һәм "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы һайланған". Республика башлығы, әлеге ваҡытта район биләмәһендә "Бөрйән" туристик кластерын булдырыу башланған, тип билдәләне. "Шүлгәнташ" музей-ҡурсаулығы уның нигеҙе булып тора. "Хәҙер унда уникаль музей комплексы төҙөлә, асылда ул - 15-20 мең йыл элекке үҙенсәлекле һүрәттәр менән мәмерйәнең күсермәһе. Ошо комплекс ата-бабаларыбыҙ донъяһын күҙалларға һәм шул уҡ ваҡытта мәмерйәгә кешелек факторының тәьҫирен кәметергә, уның экосистемаһын һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирәсәк, - тип билдәләне төбәк етәксеһе. - Объекттың бөтә донъяға танылыу яулағанын иҫәпкә алып, беҙ халыҡ-ара туристар ағымын һиҙелерлек арттырырға ниәтләйбеҙ, шул иҫәптән тейешле инфраструктура булдырыу, отелдәр төҙөү, төрлө йәйәүлеләр маршрутын һалыу иҫәбенә". Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, Бөрйән районы ла халыҡ кәсептәре күҙлегенән туристар өсөн ҡыҙыҡлы буласаҡ. "Бөрйән районының үҙенең хозур тәбиғәте һәм Шүлгәнташ мәмерйәһенән тыш, башҡорт балы менән дә дан тотҡанын онторға ярамай, - тине Рөстәм Хәмитов. - Унда боронғо кәсеп - солоҡсолоҡ бөгөнгәсә һаҡланып ҡалған. Шул рәүешле борон башҡорттар ҡырағай бал ҡорттарынан бал алған. Халҡыбыҙҙың тарихы һәм ғөрөф-ғәҙәттәре, шул иҫәптән ошондай кәсептәр туристарға ҡыҙыҡлы булыр, тип ышанам".

# КҮСЕП ҠАЙТЫҒЫҘ



**Башҡортостан биш йылда 700-ҙән ашыу ватандашын ҡабул итәсәк. Рәсәй Хөкүмәте сит илдә йәшәүсе ватандаштарыбыҙҙы үҙ ирке менән күсеүгә булышлыҡ итеү буйынса республика программаһын раҫланы.**

Һаулыҡ һаҡлау һәм медицина фәндәре өлкәһендә мәшғүл белгестәрҙе, шулай уҡ ошо йүнәлештәр буйынса белем алыусы студенттарҙы күсереүгә өҫтөнлөк ҡарала. Был турала Министрҙар кабинеты сайтында хәбәр ителә. Ҡул ҡуйылған бойороҡ менән "Башҡортостан Республикаһында хеҙмәт баҙарын көйләү һәм халыҡ мәшғүллегенә булышлыҡ итеү" дәүләт программаһының "Башҡортостан Республикаһына сит илдә йәшәүсе ватандаштарыбыҙға үҙ ирке менән күсеүгә булышлыҡ итеү" ярҙамсы программаһы проекты тура килтерелә. Төбәк программаһын ғәмәлгә ашырыу 2017-2021 йылдарҙа республикаға 700-ҙән ашыу ватандашты күсерергә ярҙам итәсәк.

# ИКЕЛӘТӘ ФАМИЛИЯ



**Башҡортостанда яңы тыуған сабыйға исем һайлауҙа икеләтә фамилия ҡулланырға мөмкин. Республика парламентарийҙары тәүге уҡыуҙа Ғаилә кодексына үҙгәрештәр ҡабул итте.**

Баланың фамилияһы ата-әсәләрҙең фамилияһы менән билдәләнергә тейеш. Ата-әсәнең фамилияһы төрлө булғанда уларҙың килешеүе буйынса балаға атаһының, әсәһенең йәки ата-әсәнең фамилияларын төрлө эҙмә-эҙлелектә бер-береһенә ҡушыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән икеләтә фамилия ҡушыла. Бер туған ағай-һеңлеләрҙең икеләтә фамилияһын булдырғанда ата-әсәнең фамилияларын ҡушыу тәртибен үҙгәртергә ярамай. Баланың икеләтә фамилияһын яҙғанда ул дефис менән тоташҡан ике һүҙҙән артмаҫҡа тейеш.Төҙәтмәләр ата-әсәләргә баланың исемендә һандарҙы, хәреф-һан билдәләрен, символдарҙы һәм "дефис" билдәһенән тыш, хәреф булмаған билдәләрҙе, һүгенеү һүҙҙәрен, дәрәжә, вазифа, титул билдәләрен ҡулланыуҙы тыя. Был нормалар федераль ҡануниәттә яҙылған. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары уларҙы төбәк кимәлендә нығытырға ҡарар итте.

# ӨЛӨШСӨЛӘРГӘ ЯРҘАМ



**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары беренсе уҡыуҙа "Башҡортостан Республикаһының айырым закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы закон ҡабул итте.**

Парламентарийҙарҙың күпселеге хуплаған закон проекты "Башҡортостан Республикаһы биләмәһендә күп фатирлы йорттар төҙөү буйынса төҙөүселәрҙең (заказсыларҙың) бурыстарын үтәмәү һөҙөмтәһендә зыян күргән граждандарҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса саралар тураһында"ғы һәм "Башҡортостан Республикаһында ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында"ғы республика закондарына төҙәтмәләрҙе күҙ уңында тота. Яңы закон алданған өлөшсөләргә ҡаҙнанан аҡсаны тотонмайынса ярҙам итергә мөмкинлек бирәсәк. Зыян күргәндәрҙе ҙур инвестиция проекттары сиктәрендә төҙөлгән йорттарға күсереү күҙаллана. Ошондай проекттарҙы тормошҡа ашырыуға ер һатыуһыҙ бүленәсәк, ә төҙөүсе-инвестор, үҙ сиратында, алданған өлөшсөләргә йорттар участкаһында төҙөлгән дөйөм майҙандарҙың 10 процентын бирәсәк. Быға оҡшаш закондар бер төркөм Рәсәй төбәктәрендә ҡабул ителгән. Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе Хәлит Мәхмүтовтың һүҙҙәренсә, бөгөн Башҡортостанда 29 проблемалы майҙансыҡ иҫәпләнә. Һигеҙенең проблемаһын ошо законды ҡабул иткән осраҡта ғына хәл итергә мөмкин.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың Экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 19 августан республикала һыу ҡоштарына, ҡарағай урманы, һаҙлыҡ һәм ҡыр йәнлектәренә һунар асылған. 2017 йылдың аҙағына тиклем һуйыр, ҡор һәм өйрәк ауларға рөхсәт ителә. Августа йәрәбә барышында 41 һунарсы 10 районда һоро айыу атырға рөхсәт алды. 15 октябрҙән 15 ғинуарға тиклем тәбиғәтте һаҡлау министрлығы төлкөгә һәм ҡуянға һунар итеүҙе тыйҙы.

✓Бер аҙна эсендә Өфөләге яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензиндың хаҡы үҙгәрмәгән, тип билдәләйҙәр Башҡортостанстатта. 25 сентябргә һайлап алынған аҙналыҡ мониторинг мәғлүмәттәре буйынса, А-76 (АИ-80) маркалы бензиндың бер литры уртаса 34, 30 һум тора. Баш ҡалала АИ-92 бензинының уртаса хаҡы - 36,30 һум, АИ-95 һәм юғарыраҡ - 39,30 һум, дизель яғыулығы 38,28 һум тәшкил итә.

✓Башҡортостанда сәләмәтләндереү кампанияһы яҡынса 1,5 миллиард һумға төшкән һәм 210 мең ҡыҙ һәм малайҙы йәлеп иткән. Улар иҫәбендә ауыр тормош хәлендә булған, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған, инвалид, шулай уҡ аҙ тәьмин ителгән, ҡасаҡ һәм мәжбүри күсенгән ғаиләләрҙәге балалар. Бынан тыш, төбәк уҡыусыларының бер өлөшө республиканан ситтә: Ҡара диңгеҙ буйында, Ҡырым Республикаһында, Бөйөк Британия һәм Болгарияның халыҡ-ара үҙәктәрендә ял итте.

✓26 сентябрҙән Башҡортостанда мотоцикл, скутер һәм мопед водителдәре яғынан Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙарҙы асыҡлауға йүнәлтелгән иҫкәртеү саралары башланды. Республика Дәүләт автоинспекцияһында ике тәгәрмәсле транспорт яратыусыларға транспорт ағымында ҙур тиҙлектә бармаҫҡа, юл ҡағиҙәләрен үтәргә кәңәш итәләр. "Мотоцикл" операцияһы ошо аҙнаның аҙағына тиклем дауам итә.

✓Өфөлә IV "Көмөш Аҡбуҙат" халыҡ-ара милли һәм этник кинофестивален үткәреү ваҡыты күсерелде. Кино фестивале 12-14 октябрҙә түгел, ә 8-10 декабрҙә ойошторола. IV "Көмөш Аҡбуҙат" халыҡ-ара милли һәм этник кинофестивале милли һәм этник йүнәлештәге фильмдар төшөргән кинематографистарҙың ижадын популярлаштырыу өсөн уйланылған. Өс көнгә Өфө мәҙәни үҙәккә әүереләсәк һәм төрлө төбәктәрҙән, илдәрҙән режиссерҙарҙы, актерҙарҙы, продюсерҙарҙы йыясаҡ.

КӨНАУАЗ

# ТАҒЫ ЛА ТЕЛ ТУРАҺЫНДА



**Белеүегеҙсә, һуңғы арала мәктәптәрҙә башҡорт телен туған тел булараҡ һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыу буйынса ҡайһы бер сетереклектәр килеп тыуып, эш атай-әсәйҙәрҙән "Балаңды туған телдә уҡытырға ризаһыңмы?" тигән ғаризалар йыйыуға тиклем барып еткәйне.**

Әлбиттә, йәмғиәттә барлыҡҡа килгән ошондай сетерекле хәлдәр мәлендә ведомство етәкселәренең дә, республика етәкселәренең дә ҡәтғи һүҙе, ҡарарҙар, указдар ҡабул итеүе, йәғни мәсьәләне көйләүе талап ителә. Сөнки беҙ конституцион демократик дәүләттә йәшәйбеҙ, һәм халыҡ талабының хаҡлығы конституцияла һәм закондарҙа теркәлгән икәнен һәр саҡ иҫтә тоторға бурыслыбыҙ. Тағы бер иҫкә төшөрәйек: Рәсәй Конституцияһындағы 68-се статьяның 2-се пунктында: "Республикалар үҙ дәүләт телдәрен булдырырға хоҡуҡлы. Республикаларҙың дәүләт власы органдарында, урындағы үҙидара органдарында, дәүләт учреждениеларында улар Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле менән берҙәй ҡулланыла", - тиелгән. Тимәк, оло Ватаныбыҙ - Рәсәйҙең Төп законына ярашлы, Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәре - рус һәм башҡорт теле - бер үк конституцион-хоҡуҡи статусҡа эйә. Унан һуң, милли республикаларҙағы дәүләт телдәре мотлаҡ бөтә уҡыусыларға ла уҡытылырға тейеш, тигән фекерҙе Рәсәй Федерацияһының Конституция Суды үҙенең 2004 йылдың 16 ноябрендәге №16-П ҡарары менән яҡлап сыҡты.

Эйе, мәғариф системаһы кеүек башҡа бер генә өлкә лә туҡтауһыҙ реформаларға дусар ителмәйҙер. Рәсәйҙең яңы мәғариф министры Ольга Васильева ла был хаҡта борсолоп һөйләй һәм реформаларҙы туктатасаҡтары тураһында белдерә. Халыҡтың ана шул реформаларҙын, үҙгәрештәрҙең кире эҙемтәләре тураһындағы һүҙҙәре, туған телдәрҙе уҡытыу мәсьәләһе тураһындағы борсолоуҙары ла Мәскәүгә, юғарылағы етәкселәргә барып етһен һәм уны хис-тойғоға, кемдәрҙеңдер йоҙроҡ болғауына ҡарап түгел, ә закондарға таянып хәл итеү зарурлығы алға һөрәлһен ине. Шуны телә͏й бит барыһы ла.

**Әйткәндәй, Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен үҫтереү буйынса саралар тураһында Указ ҡабул итеүе ошо мәсьәләне көйләү юҫығындағы бер аҙым булды.** Указ менән Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлап ҡалыуға, пропагандалауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән проекттарҙы бойомға ашырыу өсөн республика Башлығы грантары булдырылды. Был документта шулай уҡ Башҡорт телен һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү фондын булдырыуҙың маҡсатҡа ярашлы булыуы билдәләнгән. Башҡортостан Хөкүмәтенә 2018 йылдың 1 февраленә тиклем "Башҡорт теле", "Рус теле" һәм "Туған телдәр" ярҙамсы программалары менән Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлау, үҫтереү буйынса дәүләт программаһын әҙерләргә һәм раҫларға, шулай уҡ Указды тормошҡа ашырыуға бәйле сығымдарҙы финанслау сығанаҡтарын билдәләргә ҡушылды.

**Был юлдарҙы уҡыусыларға тағы шундай мәғлүмәт. Ата-әсәләргә, уҡытыусыларға, мәктәп директорҙарына, муниципалитет хакимиәттәренең мәғариф бүлектәренә ярҙам күрһәтеү өсөн Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағында хоҡуҡи ярҙам үҙәге асылды.** Үҙәктең бурысы - башҡорт телен дәүләт һәм туған тел булараҡ өйрәнеү мәсьәләләре буйынса консультациялар биреү. Квалификациялы юристар, мөрәжәғәт итеүселәрҙең теләге буйынса, тел сәйәсәте өлкәһендә халыҡтың хоҡуҡтарын һәм мәнфәғәттәрен яҡлауға бәйле мәсьәләләр буйынса ойошмаға мөрәжәғәттәр, башҡорт телен өйрәнеүгә хоҡуҡты һаҡлауға бәйле ғаризалар, мөрәжәғәттәр, дәғүә ғаризаларын яҙырға ярҙам итәсәк. Үҙәктең эшмәкәрлеген финанс яҡтан тәьмин итеү өсөн махсус фонд булдырыласаҡ. Был Башҡортостанда йәшәүселәргә үҙәктең хеҙмәттәре менән бушлай файҙаланырға мөмкинлек бирәсәк. Хоҡуҡи ярҙам үҙәгенә түбәндәге адрес буйынса мөрәжәғәт итергә мөмкин: Өфө ҡалаһы, К. Маркс урамы, 3, 101-се бүлмә. Телефон: 8 (347) 246-30-42.

**Тағы бер хәбәр. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы 2019 йылды ерле халыҡтарҙың теленә ярҙам итеү, хуплау һәм әүҙемләштереү маҡсатында Халыҡ-ара ерле халыҡтар телдәре йылы тип иғлан итте.** Ошо башланғысты бөтә ағза-дәүләттәр, шул иҫәптән Рәсәй Федерацияһы хупланы. Был хаҡта Европа башҡорттарының Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына башҡорт телен һаҡлау үтенесе менән мөрәжәғәт иткән Ойошма секретариатының яуап хатынан билдәле булды. "Ысынлап та, был күп кенә ерле халыҡтар юлыҡҡан ҙур проблема һәм ул Берләшкән Милләттәр Ойошмаһында ҡурҡыу тыуҙыра. 2016 йылда ерле халыҡтарҙың телдәре буйынса эксперттар кәңәшмәһен ойоштороҡ, унда ошо һорауҙарҙы тикшерҙек", - тиелгән хатта. "Беҙгә артабанғы хәрәкәттәр стратегияһын уйлау өсөн ошо кәңәшмәнең документтарын ҡарарға, конференцияла сығыш яһаусы белгестәр менән бәйләнешкә инергә кәңәш иттеләр", - тип хәбәр итте Швейцарияла йәшәүсе Айһылыу Йәнтүрина-Дарлес.

**Шулай итеп, милләттәштәргә шуны ла әйтеп ҡуйыйыҡ: туған телеңдә һаҡлау буйынса дәүләт кимәлендә ниндәй генә ҡарарҙар, указдар ҡабул ителмәһен, һәр кем үҙ бурысын иңенән төшөрмәҫкә тейеш икәнен аңлаһын ине: туған тел иң тәүҙә ғаиләлә һаҡлана! "Балаңды туған телдә уҡытырға ризаһыңмы?" тигән һорауға кире яуап биреүселәр араһында үҙебеҙҙең милләттәштәр ҙә барлығын беләбеҙ. Күренекле яҙыусыбыҙ Булат ағай Рафиҡовтың һүҙҙәре тап шундай манҡорт милләттәштәргә төбәп әйтелгән дә инде: "Туған телдән баш тартыу - ата-әсәңә, халҡыңа ихтирам юҡлығының, кәмһетеп ҡарауҙың билдәһе, ә һәр хыянат тыуған еренде, ватандаштарыңды хурлауҙан башлана бит. Хыянат нигеҙендә үҙ йәнеңде бөтә нәмәнән өҫтөн ҡуйыу, йәғни ереңде, халҡыңды, намыҫыңды һаҡлау шикелле кешелек вазифаларыңды үтәүҙән баш тартыу, башҡалар иҫәбенә йәшәү теләге ята. Кешене ерәндәрә торған теләк!"**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

ҠЫҪҠАСА

## АҒЫУЛАНАЛАР, АУЫРЫЙҘАР...

✓**Башҡортостанда спиртлы эсемлектәр менән ағыуланыу күрһәткесе республика кимәленән юғарыраҡ булған муниципалитеттар аталды.** "Роспотребнадзор"ҙың төбәк идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, республикала бындай биләмәләр 14. Улар - Стәрлетамаҡ, Янауыл, Дүртөйлә, Туймазы, Өфө, Сибай, Нефтекама, Октябрьский, Күмертау, шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Янауыл, Дүртөйлә, Мишкә, Өфө, Хәйбулла, Көйөргәҙе районҙары. 2017 йылдың ғинуар-июль айҙарында Күмертау (6), Стәрлетамаҡ, Салауат (бишәр), Ишембай ҡалаларында, Ишембай, Көйөргәҙе районҙарында (берәр) 19 бала (0-14 йәшкәсә) спиртлы эсемлектәр менән ағыуланған.

✓**Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор республикала киңкен химик этиология менән ағыуланыу хәлен анализлаған.** Йыл башынан алып 1725 ағыуланыу осрағы теркәлгән. Уларҙан 283 кеше һәләк булған, һәләк булғандарҙың 111-е алкоголь менән ағыуланған. Башҡортостан буйынса спиртлы эсемлек менән ағыуланыу күрһәткесе 100 мең кешегә 21,3 тәшкил иткән. Спиртлы эсемлектәр менән киңкен ағыуланыу сәбәптәре булып күбеһенсә этил спирты (90,4 процент), суррогат алкоголь (2,8 процент), метанол (3,2 процент), метил спирты (0,8 процент) менән ағыуланыу тора, тигән мәғлүмәт килтерә төбәк Роспотребнадзор идаралығы. Бынан тыш, дарыуҙар, медикаменттар һәм биологик (күрһәткес 100 мең кешегә 11,1 процент), наркотик матдәләр менән ағыуланыу осраҡтары (74 осраҡ) теркәлгән.

✓**Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы 2-16 октябрҙә грипты һәм киңкен респиратор вирусты инфекцияһын иҫкәртеү буйынса ҡыҙыу линия ойоштора.** Шылтыратыусылар 8-800-100-47-67 телефоны буйынса иртәнге сәғәт 10-дан 4-кә ҡәҙәр ҡабул ителәсәк, тип аңлаттылар Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтендә. Ведомство белгестәре грипҡа ҡаршы иммунизация өстөнлөктәре, грипты шәхси һәм йәмәғәт профилактикалау саралары тураһындағы һорауҙарға яуап бирәсәк. Вакцинация ауырыуҙы төп иҫкәртеү сараһы тип иҫәпләнә. Прививка яһау кампанияһы башланған да инде. Быйыл иммунизация менән республиканың 40 процент халҡын йәлеп итеү күҙаллана. Уларҙың 75 проценты "хәүеф төркөмө"нә ингәндәр: балалар, уҡыусылар, белем биреү учреждениелары, медицина хеҙмәткәрҙәре, 60 йәштән өлкәндәр, студенттар, әрмегә саҡырыу йәшендәге үсмерҙәр һәм башҡалар булырға тейеш.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡолаҡ шаулаһа

❖ 2 баш һуғанды һәм 2-3 бөлем һарымһаҡты ҡырғыстан үткәргә. Ҡатнашманы марля тоҡсайға һалығыҙ ҙа, бүленеп сыҡҡан һутты баштың сәс өлөшөнә һөртөгөҙ. Һуңынан марля тоҡсайҙы баштың шаулаған урынына ҡуйып, өҫтөнән йылы яулыҡ менән урап, 2 сәғәт тотоғоҙ. Унан һуң сәсегеҙҙе йыуығыҙ һәм һуған ҡабығынан яһалған ҡуйы төнәтмә менән сайҡатығыҙ. Ошонан һуң ҡолаҡтар бер йылға шауламай ҡалыр. Ҡайһы саҡта файҙаһы тағы ла оҙаҡҡа етә.

### Баллы һыу

❖ Баллы һыу ашҡаҙанды таҙарта, ҡан төкөрөүҙән, ҡатын-ҡыҙҙы ауыры төшөүҙән һаҡлай.

### Ҡарбуз

❖ Миҙгелде файҙаланып, ҡарбуз ашап ҡалығыҙ. Ул эске ағзаларҙы таҙарта, көстә арттыра, һалҡын тейеүҙән, үпкә сирҙәренән шифалы. Ҡарбуз - үҙе ризыҡ та, шәрбәт тә, емеш тә бит әле! Үҙе ябыҡтыра ла.

### Үпкәгә шифа

❖ Баҡырлы һыу кешегә зарарлы, ә үпкәһе сирлегә йәрәхәттәрҙән ҡотолорға ярҙам итә. Ул шулай уҡ геморрой менән сирлегә лә шифалы.

### Яман шеш

❖ Яман шештән ябай әрем ярҙам итә. 1 балғалаҡ әремде 1 стакан ҡайнап сыҡҡан һыуға һалып, яртыһы ҡалғансы ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда 30-ар мл эсергә.

### Крыжовник

❖ Организмда матдәләр алышыныуын яҡшырта, бигерәк тә өлкәндәргә уны күберәк ашарға кәрәк.

### Иммунитетты нығытыу

❖ Ярты килограмм мүк еләген иҙеп, уға туралған 3 алма, 1 стакан әстерхан сәтләүегә, ярты килограмм шәкәр, ярты стакан һыу өҫтәргә. Талғын утта ҡайнап сыҡҡансы торорға. Һыуытырға. Балаға иртән һәм кисен 1-әр балғалаҡ бирергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

***✓ Төрлө милләт балалары һәр саҡ дуç-татыу булды, башҡортса уҡымайым, тип ҡарышып ултырманы. Беҙ эшләгән дәүерҙә ата-әсәләр ҙә мәктәп эшенә ҡыçылып, балаһына уҡыу телен һайлап, ғариза яҙып йөрөмәне.***



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Сәүҙәгә һәм Ғәйшәгә өйләнгәне

Мәккә мәжүсиҙәре күҙәтеүенә ҡарамаçтан, Мөхәммәт бәйғәмбәр төрлө ырыуҙар менән бәйләнешкә инеү әмәлен табып тора. Тик һөйләшеүҙәр тейешле һөҙөмтә бирмәй - ырыу башлыҡтары мосолмандарҙың бөтөн өммәтен дә үҙҙәренә ҡабул итергә ризалашмай. Тик шулай ҙа һөйләшеү барышында айырым кешеләр Ислам тәғлимәтен ҡабул итеп, мосолман дине тураһындағы хәбәрҙе ырыуҙан-ырыуға бик тиҙ тарата.

619 йылдың аҙағында, Хәҙисә вафат булғандан һуң бер нисә ай үткәс, Мөхәммәт бәйғәмбәр Сәүҙә исемле утыҙ йәшлек тол ҡатынға өйләнә, ә Фатима ҡыҙын Ғәлигә кейәүгә бирә. Күп тә үтмәй, Мөхәммәт бәйғәмбәр Әбү Бәкерҙең ҡыҙы Ғәйшә менән дә йәрәшә. Тик Ғәйшә үтә йәш булғанлыҡтан, туйҙы ике-өс йылға кисектереп торалар. Әйткәндәй, Әбү Бәкер ҡыҙының тәрбиәһенә ҙур иғтибар биргәнлектән, Ғәйшә бәләкәйҙән үк уҡый-яҙа белә, тәрбиәһе һәм белеме буйынса Мәккәнең иң данлы һәм иң бай ғаиләләрендәге ҡыҙҙарҙан һис тә ҡалышмай.

Әбү Бәкер үҙе иһә Исламды тәүгеләрҙән булып ҡабул итә һәм бик иманлы кеше була. Ислам динен ҡабул иткән ҡолдарҙы һатып алып, ирекккә ебәрә, ярлы мосолмандарға ярҙам итә.

Шулай итеп, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең иң яҡын юлдаштары үҙҙәренең хаҡлы булыуҙары, ҡасан булһа ла еңеүгә өлгәшәсәктәренә һис тә икеләнмәй. Уңышһыҙлыҡтар уларҙы ҡаҡшатмай, киреһенсә, имандарын нығыта бара.

Был осорҙа Мәккәнән төньяҡҡа табан, һыбайлыға - алты, йәйәүлегә ун бер көнлөк юлда ятҡан Йәçриб оазисында ла тыныс булмай.

Ҡасандыр был оазиста өс ырыу йәшәй. Был ырыуҙар үҙҙәре янына дүртенсе ырыуҙы ла һыйындыра. Тик яңы килгән ырыуҙаштар бик тиҙ үрсей башлай һәм йөҙ йыл эсендә башҡаларҙы ассимиляциялай. Тик бынан һуң күп тә үтмәй, улар үҙҙәре үк ике яңы ырыуға бүленә лә бер-береһе менән дошманлаша башлай.

Бер-береһенә көсө етмәгәс, ситтән ярҙам эҙләйҙәр, аҙаҡ ярҙам ҡулы һуҙған ырыуҙарға үҙ ерҙәрендә йәшәргә рөхсәт итәләр. Шулай итеп, Йәçриб оазисына Бану Ҡурайза, Бану Нәҙир һәм Бану Ҡайнуҡа исемле ырыуҙар килеп йәшәй башлай. Яңы килеүселәр барыһы ла йәһүд динен тота. Күп тә үтмәй, улары ла бер-береһе менән дошманлаша. Был биш ырыу ситтән дошман килгәндә генә берләшә, ҡалған ваҡыт бер-береһе менән ыҙғышып-талашып йәшәй. 617 йылда улар араһында ҙур һуғыш була. Был һуғышта береһе лә еңеүгә өлгәшә алмайынса, килешеү төҙөлә. Тик ҡарымта ҡанундары онотолмай, шуға ла улар барыһы ла ҙур көсөргәнешлек кисерә.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тәғлимәте менән улар яҡшы таныш була. Йәһүд динен тотоусы ырыуҙар, Йәçриб мәжүсиҙәрен үҙ диненә күндерә алмаһалар ҙа, берҙән-бер Алла, Уның тарафынан ебәрелгән Изге Китап, бәйғәмбәрлек, ожмах, тамуҡ тигән төшөнсәләрҙе аңлатып өлгөргән була. Шулай уҡ Йәçриб мәжүсиҙәре йәһүдиҙәрҙең Алла тарафынан ебәрелергә тейеш Мәсихте көтөүен дә яҡшы белә. Мәсих иһә еңеү килтерергә тейеш.

Йәçриб мәжүсиҙәренең аҡһаҡалдары менән ырыу башлыҡтары байтаҡ уйлағандан һуң, Мәсих - ул Мөхәммәт бәйғәмбәр, һәм фәҡәт ул ғына дошмандарҙы еңергә ярҙам итеп, оазисҡа именлек килтерәсәк, тигән һығымта яһайҙар һәм Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе, башҡа берәйһе үҙенә алып өлгөрмәç борон, үҙебеҙгә саҡыра һалырға кәрәк, тигән бер һүҙгә киләләр. Йәçриб кешеләре Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең үҙҙәренә, алыç ҡына булһа ла, туған икәнлеген дә иçенә төшөрә, сөнки, ысынлап та, уның әсәһе Әминәнең ата-бабалары ла, олатаһы Әбд әл-Мотталибтың әсәһе лә сығышы менән ошо оазистан була.

**(Дауамы бар).**

ТУҒАН ТЕЛЕМ...

**Арҡауыл Йүрүҙән буйында ултырған боронғо ауылдарҙың береһе, аçаба башҡорттар төйәге. Ауылдың Габовка тигән урамында элек-электән урыçтар йәшәне. Хәҙер ҙә улар яңы йорттар һалып, башҡорттар менән дуçлашып, туғанлашып, аралашып, телебеҙҙе, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, йолаларыбыҙҙы ихтирам итеп йәшәй. Башҡортса һөйләшәләр. Балаларының мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүенә лә ыңғай ҡарашталар.**

# ИЛҺӨЙӘРҘӘР БУЛМАÇ...

## телһөйәрлек булмаһа



Арҡауыл мәктәбендә 25 йыл башҡорт теле уҡытыусыһы булып эшләнем. Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Вәриҙә Хөснөтдинова апай менән бергәләп рус кластарында башҡорт телен өс сәғәтлек программа менән уҡыттыҡ. Хәҙерге кеүек, рус кластары өсөн башҡорт теле дәреслектәре лә юҡ ине. Башланғыс кластар өсөн дәреслектән файҙаланып, башҡортса дөрөç яҙырға, уҡырға, аралашырға өйрәтә инек. Шиғырҙар ятлатыуға өçтөнлөк бирҙек. Уҡытыу-тәрбиә эшендә балалар матбуғатын файҙаландыҡ. Уҡыусы йәшәгән һәр ғаиләгә "Йәншишмә" гәзите, "Аманат" менән "Аҡбуҙат" журналдары килер ине. Дәресте, ғәҙәттә, "Йәншишмә" гәзитенә күҙәтеү яһауҙан башлар инем. Артабан уҡыусыларҙы гәзиткә хәбәрҙәр яҙырға өйрәттек. Мәҡәләләре баçылып сыҡһа, улар өсөн оло байрам булыр ине.

Рус кластарында уҡыған төрлө милләт балалары һәр саҡ дуç-татыу булды, башҡортса уҡымайым, тип ҡарышып ултырманы. Беҙ эшләгән дәүерҙә ата-әсәләр ҙә мәктәп эшенә ҡыçылып, балаһына уҡыу телен һайлап, ғариза яҙып йөрөмәне. Етәкселектә лә телде һөйгән, белгән, хөрмәт иткән шәхестәр ултырҙы. Район комитетының идеология буйынса секретары Мәрйәм Кәримова милли телдәрҙә уҡытыуҙы үҙе контролдә тотто, ә мәғариф идаралағының телдәр буйынса методисы Сажидә Миһранова башҡорт телен уҡытыу, уның абруйын күтәреү өçтөндә фиҙаҡәр эшләне. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡалала ғына түгел, ауылда ла туған телендә һөйләшмәүселәр ишәйҙе хәҙер. Быға кәрәҙле телефон, интернет булышлыҡ итә, күрәһең. Үҙем йәшәгән урам балалары ла русса һөйләшеп уйнайҙар. Йыш ҡына уларҙың янына барып, әңгәмәләшеп алам. "Атайың, инәйең кем, башҡортмо, урыçмы? Өйҙә ниндәй телдә һөйләшәһегеҙ?" - тип һорайым. Һеҙ башҡорт бит, башҡортса һөйләшергә кәрәк, "Һаумыһығыҙ", тип иçәнләшегеҙ, тип өйрәтәм. Өйрәтеүгә ҡолаҡ һалалар, мәктәптән ҡайтыусы балалар "Һаумыһығыҙ", тип иçәнләшеп үтәләр.

Эйе, башҡорт, рус, инглиз телдәрендә һөйләшкән балаларға ҡарап, һоҡланам. Улар шулай төрлө телдәр белеүе менән бәхетле. Тик бына, үкенескә ҡаршы, йөҙө-һыны башҡорт булып та, туған телендә һөйләшә белмәгән кешеләр ишәйеүе эсте бошора барыбер. Улар тел белмәүҙәренән ояла, ҡыйынһына, әлбиттә. Ҡарап тороуы йәл ундай кешегә. Был хәлгә ата-әсә, ясле, мәктәп ғәйепле икәне көн кеүек асыҡ. Ҡатнаш никахтар ҙа үҙ ролен уйнай был тәңгәлдә. Ундай ғаиләлә үçкән балалар барыбер ике ут араһында ҡала, тәжрибә күрһәтеүенсә, башҡорт милләте файҙаһына булмай уның һайлауы. Бер танышым сит милләт ҡыҙына өйләнде. Килен кеше ҡайны-ҡәйнәһененең тупһаһына аяҡ та баçмай, туғандарын да танымай. Өфөлә йәшәп, ике ҡыҙ үçтерәләр. Үçеп еткән ҡыҙҙары әсәләренә: "Мама, неужели ты себе русского не нашла?" - тип әйтә икән. Ғаиләлә атайҙарының да, уның милләтенең дә, теленең дә абруйы булмауы тураһында һөйләй инде был миçал. Үкенескә күрә, бындай яҙмышлылар бихисап бит.

Унан һуң, ата-әсәләр араһында, ниңәлер: "Балам башҡортса уҡыһа, кеше булмаç", тигән фекер таралып китте. Күп зыялыларыбыҙҙың башҡорт мәктәбендә уҡып, кеше булыуы бының киреһен раçлай ҙаһа. Мәçәлән, 1953 йылда Ҡыйғы районы Абзай башҡорт урта мәктәбен 20 уҡыусы тамамланыҡ. Уҡытыусыларыбыҙ Фәниә Чанышева, Вәсил Ғәйнетдиновтар туған телгә һөйөү тәрбиәләне. Математика, физика, химия фәндәрен русса, ҡалғандарын башҡортса уҡыныҡ. Рәғиб Ғимаев менән Сафа Әхмәтов республикала танылған техник фән докторҙары булды. Гүзәл Сәғитова-Мәғәфүрова танылған артист, ҡалғандарыбыҙ уҡытыусылар, медицина хеҙмәткәрҙәре, төҙөүселәр булып киттек.

Ҙур вазифалар биләп, туған телендә иркен һөйләшкән кешене бәхетле, абруйлы, оло шәхес итеп һанайым. Һүҙем БДУ-ның география факультеты деканы Инбер Яппаров хаҡында. Биографияһы ҡыçҡа: Дыуан районы Ҡәҙер һигеҙ йыллыҡ мәктәбе, Мәсәғүт педучилищеһы, БДУ-ның география факультеты. Сәсән телле Мөхәмәт ағай менән Сафура апайҙың улы ул. Туған тел - әсә һөтө, атай аҡылы менән һеңгән уға. Инбер радио, телевизорҙан йыш һөйләй. "Телевизорынды ас, Яппаров һөйләй", - тип шылтырата миңә йыш ҡына Хәнифә Сиражетдин ҡыҙы. Тәбиғәт күренештәре, төрлө ғәрәсәттәр хаҡында, ерҙә, күктә бер-бер ғәрәсәт ҡупһа, башҡорт теленең һүҙ байлығын оçта ҡулланып, уларҙың сәбәбен, зыянын халыҡҡа ваҡытында аңлата бара Инбер Яппаров.

Быйылғы август конференцияһында мәктәптәр алдында уҡытыуҙы тәрбиә эше менән ҡушып алып барырға тигән бурыс ҡуйылды. Был яңылыҡ түгел, Совет дәүерендә лә уҡытыусылар алдына ҡуйылған төп бурыс ошо ине. Белеүебеҙсә, капитализм тәрбиә өлкәһендә тупланған бар ҡаҙаныштарҙы емереп килеп инде беҙҙең донъяға. Баланы шәхес итеп тәрбиәләгән ойошмалар юҡҡа сыҡты. Совет кешеһенең әхлаҡ кодексы онотолдо. Һөҙөмтәлә ата-әсә тәрбиәһе етмәгән, илһөйәрлек тойғоһо булмаған быуын үçте. Вандалдар, наркомандар, эскеселәр әхлаҡ кәмеүенән барлыҡҡа килгән заман бәләләре бит инде улар. Шуға ла уҡытыу һәм тәрбиә мәсьәләһенә ныҡлап йөҙ бороу аңлашыла. Тик бына тәрбиә һәр милләт балаһына үҙ туған телендә еткерелә, һеңдерелә икәнен генә онотмаçҡа кәрәк. Был беҙҙең башҡорт балаларына, башҡорт теленә лә ҡағыла. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә ашырыу, уның абруйын күтәреү юлдарын эҙләргә кәрәк, минеңсә. Эшкә алғанда, юғары вазифаларға үрләткәндә шәхестең башҡорт телен белеүен дә шарт итеп ҡуйырға кәрәк. "Башҡортса аңлайһыңмы, һөйләшә беләһеңме?" тигән һорау уйланырға мәжбүр итер, телгә ҡарашын үҙгәртер ине күптәрҙең.

Мине тағы шул аптырата: ниңә ата-әсәләр бик шәбәйеп, ғауғалы булып китте әле? Мәктәптең үҙ принцибы, үҙ уҡытыу тәртибе, уставы, башҡа документтары менән билдәләнгән уҡытыу теле бар бит. Ата-әсә һүҙе ошо документтарҙан өçтөн булып сыға түгелме? Уҡытыу теле һайлаһындар, ғариза яҙһындар, имеш. Бөгөнгө ата-әсәләрҙең ҡайһы берҙәренең үҙҙәрен тәрбиәләү талап ителеүе лә сер түгел бит әле.

Мәктәп телһөйәр, илһөйәр шәхес тәрбиәләп сығарырға тейеш. Әгәр ҙә балаларҙы туған телдә уҡыуҙан мәхрүм итәбеҙ икән, ниндәй илһөйәрлек тураһында һүҙ барыуы мөмкин! Ата-әсәләрҙең барыһы ла ошо хәҡиҡәтте аңларлыҡ кимәлдә түгел бит. Һәр хәлдә, улар менән дә аңлатыу эштәре алып барырға тейеш уҡытыусылар, башҡа йәмәғәт эшмәкәрҙәре, зыялыларыбыҙ. Милләтеңдең бәçен ебәреп, унан баш тартыу, балаларҙы туған телдән мәхрүм итеү оло әҙәпһеҙлек, атай-олатайҙар аманатына хыянат итеүгә тиң икәнен ныҡлап аңлатыу кәрәк уларға.

Ауылдашыбыҙ, мәшһүр шағирыбыҙ Рәми Ғарипов:

*Халҡым тел тыуҙырған,*
*Бөйөк бер тел!*
*Теле үлмәç, үҙе үлмәһә...*
*Үҙе үлмәç,*
*күрер киләсәкте,*
*Үҙен үҙе әгәр күммәһә*, - тигән. Үҙ ҡулдарыбыҙ менән быумайыҡ илһөйәрлекте, телһөйәрлекте, тип әйткем килә мине ишетеүсе бар кешеләргә.

Мөслимә **МӨҒТӘБӘРОВА.**
**Салауат районы Арҡауыл ауылы.**

ТАМЫРҘАРҘЫ ЮЛЛАП...

# ТИПТӘР ҺҮҘЕНЕҢ ...

## килеп сығышы тураһында

**Билдәле ғалим-тарихсыбыҙ Әнүәр ағай Әсфәндийәровтың көнбайыш башҡорттары тарихына арналған ғилми мәҡәләһен гәзитебеҙҙә баҫырға әҙерләгәндә уның типтәр сословиеһына арналған өлөшөн айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡабул иттем.**



Ғалим типтәрҙәрҙең милли сығышы төрлөсә булып, улар араһында ерһеҙ башҡорттарҙың, ситтән күсеп килгән татар, сыуаш һәм башҡа халыҡ вәкилдәренең булыуын тарихи документтар ерлегендә раҫлай. Уның Башҡортостандан башҡа бер төбәктә лә типтәр сословиеһы теркәлмәүе һәм типтәрҙәрҙең төүгеләренең ерһеҙ ҡалған башҡорттарҙан булыуы хаҡындағы фекерҙәре иғтибарға лайыҡ.

Бәгзе донъя телдәрендәге уртаҡ һүҙ тамырҙарының башҡорт телендә лә булыуы менән ҡыҙыҡһынған кеше булараҡ, мин Ә. З. Әсфәндийәровтың "типтәр" һүҙенең этимологияһы хаҡындағы фекерҙәрен бик ентекләп уҡыным. Килмешәктәрҙең айырым дәфтәргә теркәлеүе менән бәйләп, күптәр "типтәр" һүҙенең "дәфтәр"ҙән килеп сығыуына ышана. Ғалим был фараздың ысынбарлыҡҡа тура килмәүе, ошо ике һүҙҙе бәйләүҙә бер ниндәй ҙә логика булмауы хаҡында яҙа. Ябай тел анализы ла ошо фекерҙең дөрөҫлөгөн раҫлай. Дин, уҡыу-яҙыу, фән өлкәһенә ҡараған байтаҡ ҡына һүҙҙәр телебеҙгә ғәрәп һәм фарсы телдәренән килеп ингән. Фарсы һәм ғәрәп һүҙҙәренең әйтелеше башҡорт кешеһендә әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай, шуның өсөн уларҙы үҙгәртеү, ҡулайлаштырыу ихтыяжы ла юҡ. "Дәфтәр" һүҙе күп быуаттар элек телебеҙгә нисек килеп ингән, хәҙер ҙә бер үҙгәрешһеҙ ҡулланыла. Шулай булғас, "дәф" ижегенең "тип"кә әүерелеүенә ышаныу бер ҡатлылыҡ булыр ине. Унан һуң, айырым кешене генә түгел, тотош халыҡ төркөмөн йәнһеҙ әйбер-предмет исеме менән атау халҡыбыҙға хас күренеш түгел.

Миненсә, "типтәр" һүҙенең килеп сығышын "тибеү - тибелеү - типтереү - типтер - типтәр" һүҙ теҙмәһе нигеҙендә аңлатыу шулай уҡ ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Берҙән, "типтер" - "типтереү" ҡылымы бойороҡ һөйкәлеше булып, тел ҡанундарына ярашлы, бер нисек тә исемгә әүерелә алмай, һәм башҡорт телендә ошо рәүешле яһалған бер исем дә юҡ. Икенсенән, "тибеү" һүҙенең башҡа кешене түбәнһетеү, мәсхәрәләү, күрә алмау кеүек мәғәнәүи төҫмөрләнештәре бар: халыҡ мәнфәғәттәре өсөн ихтилалда ҡатнашып, аҫабалыҡ хоҡуғынан яҙған башҡорт типтәре лә үҙ ҡанҡәрҙәштәре тарафынан "тибелгән" булып сыға түгелме һуң? Билдәле булыуынса, йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тупаҫ боҙоусылар ғына үҙ ырыуынан ҡыуып сығарылып, "тибелеү"-гә дусар ителгән. Ә башҡа тарафтарҙан күсеп килеүсе типтәрҙәр "тибелеп" түгел, башлыса үҙ ирке менән башҡорт аҫабалары биләгән ерҙәргә һыйынырға тырышҡан.

"Типтәр" һүҙенә иғтибарлабыраҡ ҡараһаң, уның ике өлөштән - "тип" тамырынан һәм "тәр" күплек ялғауынан хасил булғанын күрергә була. Тимәк, беҙгә ошо "тип" тамырының килеп сығышын һәм мәғәнәһен асыҡлау фарыз. Булмаһа, ошо ниәтебеҙҙе күҙ уңында тотоп, фекеребеҙҙе Кавказ тарафтарына йүнәлтәйек.

Билдәле булыуынса, ингуш һәм чечен халыҡтарының ижтимағи тормошонда "тейп" тип аталған ырыу берләшмәләре ҙур роль уйнай. Чечен телендә был һүҙ "тайп" тип әйтелә. Бер тейпҡа ҡараған кешеләр һәр осраҡта ла нәҫелдәш заттар булмай, улар уртаҡ территория һәм бер үк һөнәр менән шөғөлләнеү ерлегендә лә берләшә. Мәҫәлән, пешхой тейпы сүлмәк яһаусыларҙан хасил булған. Әйткәндәй, 130-ҙан ашыу чечен тейптарының 35 проценты сығышы буйынса чечен халҡына ҡарамай икән, сөнки тейпҡа башҡа урындарҙан күсеп килеүселәр ҙә инә алған. Беҙгә бына нимә мөһим: чечен тейптарының, бигерәк тә боронғоларының, һәр береһенең изге тауы, йәки тау түбәһе булған. Был башҡорт ырыуҙарының аймаҡтарға, икенсе төрлө әйткәндә, түбәләргә бүленеүенә бик оҡшаш. Чечен тейпы башҡорт түбәһе һымаҡ ул.

Фекер ебен артабан һүтә бирәйек. Боронғо ғәрәптәр бер ырыу-ҡәбиләгә ҡараған йәиһә бер дингә табынған кешеләр төркөмөн "таифә", тип атай. Йәнә, ошо уҡ тамырҙан яһалған ҡылым күсеп йөрөү, сәйәхәт итеүҙе лә аңлата икән. Ғәрәп бәҙәүиҙәренең төркөм-таифәләргә бүленеп, сикһеҙ сүллектәрҙә күсмә тормошта йәшәгәне лә билдәле. Тимәк, Кавказ халыҡтарының "тейп" һәм ғәрәптәрҙең "таифә" һүҙҙәренең тамырҙаш һәм мәғәнәләш булыуы шик тыуҙырмай.

Бына ошо тарихи-лингвистик экскурсты тамамлап, үҙебеҙҙең типтәрҙәргә ҡайтайыҡ. Һис шикһеҙ, типтәрҙәр - күсеп йөрөүсе (!) төркөм, башҡа "тайп", икенсе "таифә" кешеләре. Башҡортта ҡалын ижекле һүҙҙәрҙе йомшартып әйтеү осраҡтары бар: аҙ - әҙ, асы - әсе һ.б. Тимәк, "тайп - тәйп - тейп" сиратлашыуын дөрөҫ тип таныаҡ, уның күплек варианты булараҡ, "тәйптәр - тейптәр" һүҙе килеп сыға. Мәғәнәүи яҡтан ҡарағанда ла, типтәр тип аталғандар (башҡорт булған хәлдә лә) икенсе төптән, башҡа түбәнән, башҡа төркөмдән күсеп килеүселәр булған бит.

Әйткәндәй, бер урындан, билдәле йүнәлештән ситкәрәк китеүҙе аңлатҡан "тайпылыу" һүҙе лә ошо уҡ тамырҙан сыҡҡанға оҡшай. Ғөмүмән, донъя телдәре күҙгә күренмәҫ боронғо мәғәнәүи һәм лингвистикептәр менән бәйләнгән. Беҙ һис иғтибар итмәгән, башҡортса ла "тип", тип әйтеп йөрөгән ҡәҙимге урыҫ һүҙе лә әле тикшергән һүҙҙәргә тамырҙаш та, мәғәнәләш тә булып тойола: бер класҡа, бер төркөмгә берләштереп булған нәмәләргә ошо "тип" һүҙен ҡулланабыҙ бит, йәмәғәт.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔**1773 йыл** - Башҡорт мәғдән сәнәғәтсеһе Исмәғил Тасимов проекты буйынса Петербургта Сенат тарафынан Тау мәктәбенә нигеҙ һалына. Бөгөн ул - Тау институты.

➔**1773 йылдың 16 апрелендә** "Бығаулыларҙы Нерчинск урынына Ырымбурға ебәреү тураһында"Сенат указы сыға.

➔**1773 йылдың 31 авгусы** - "Һамарҙы Ҡаҙан губернаһы ведомствоһынан сығарып, Ырымбур губернаһы составына индереү тураһында" Сенат указы сыға.

➔**1773 йылдың 17 сентябре - 1775 йыл** - Дон казагы Емельян Иванович Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышы.

➔**1773 йылдың 1 октябре** - Е.И.Пугачев ("Петр Ш батша") һуғыша-һуғыша Ырымбурға килеп етә һәм башҡорттарҙы көрәшкә ҡушылырға саҡырып, ирек, ер, һыу вәғәҙәләүсе манифест менән мөрәжәғәт итә.

➔**1773 йылдың 2 октябре** - Яманһары Яппаров менән Кинйә Арыҫланов етәкселегендәге башҡорт отрядтары пугачевсыларға ҡушыла.

➔**1773 йыл - 1774 йылдың марты** - Пугачевсылар Ырымбурҙы ҡамай.

➔**1773 йылдың 17 октябре** - Кинйә Арыҫланов "батша Петр Федоровичҡа" ярҙамға саҡырып, Әлибай Мырҙағоловҡа хат яҙа. Старшина Әлибай был ваҡытта пугачевсыларға ҡаршы һуғышырға тейешле башҡорттарҙың мең башлығы ярҙамсыһы булып, Стәрлетамаҡта тора.

➔**20 октябрь** - Кинйә Арыҫланов бөтөн таныш старшиналарға хаттар ебәрә. Восстаниеның төүге аҙнаһында уҡ Пугачев лагерына старшиналар башлығында 21 отряд килеп етә.

➔**1773 йылдың 9 ноябре** - Салауат Юлаев Ырымбурҙы һаҡлап ярҙамға барыусы башҡорт командаһын баш күтәреүселәргә ҡушылырға өндәй. Ноябрь ахырында Пугачев Салауатҡа полковник чины биреп, тыуған яҡтарында халыҡты көрәшкә күтәрергә ебәрә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Табындар

XV быуаттың икенсе яртыһында табындарҙың Себер хандары менән мөнәсәбәттәре боҙолған саҡта, табын бейҙәре Әсәт Шикарали һәм Ишем бейҙәр Ибаҡ һәм Шибаҡ хандар менән ярышҡан. Башҡорттарҙың Урал аръяғына күсенеүе урыҫтарҙың көнсығышҡа хәрәкәте, Ермактың походтары, Себер ханлығының ҡыйралыуы, Строгановтарҙың колонизаторлыҡ сәйәсәте менән бәйле. Башҡорттарҙың Күсем хан менән XVI быуаттағы мөнәсәбәтендә табындар (ҡатай төркөмөнә ҡараған һәлйоттар, ҡатайҙар, һеңрәндәр, терһәктәр, мәкәтиндәр) ҙур роль уйнай.

Табындар иң эре башҡорт ҡәбиләһе һанала: уға туғыҙ ырыу инә. Уларҙың дүртеһе: ҡара, барын, тиләү һәм күбәләк табындар (көнсығыш табындар) Урал аръяғында йәшәй. Ҡара табын ырыуҙары: аяла-табын, ҡыпсаҡ-табын, ҡарағай-табын, әйле-табын, сәнкем-табын, көҙәйтабын, ҡырғыҙ-табын, мөсүл-табын, аҡшураз-табын.

Табындар юрматылар менән Бөгөлмә ҡалҡыулығында йәшәй, һуңынан Ағиҙел йылғаһы буйына күсә (XIII-XVI бб.). Көнбайыш табындар Башҡорт иленең уртаһында урынлашҡан: кесе, йомран, кәлсер, дыуан һәм һарт табындар (көнбайыш табын ырыуҙары). Көнсығыш табындар күбеһенсә Урал аръяғында, Тубылдың аръяғындағы Уй йылғаһы тамағына тиклем урынлашҡан. Берләшмәгә алты ҡәбилә ҡарай: табын, ҡыуаҡан, һырҙы, бишул, баҙраҡ, ҡумырыҡ. Шул уҡ ваҡытта табын ҡәбиләләре туғыҙар ырыуҙан тора.

Табын башҡорттары этномияһы 260 атаманы тәшкил итә. Табындарҙың 230 тамғаһының 150-һе тиләү-күбәләк-ҡара табындарға ҡарай. Табын ҡәбиләһенең тамғаһы - ҡабырға. Табын ырыу-ҡәбилә төркөмдәре менән дыуандарҙың, таҙҙарҙың һәм урандарҙың этник тарихы бәйле.

Ҡайһы бер ғалимдар "табын" атамаһын "өҫтәл", "ный тулы өҫтәл" менән бәйләй. Был хәл табындарҙың хәлле йәшәүенә ишара. "Табынырға" һүҙе табындарҙы Тәңре дине, тимәк, боронғо тарих менән бәйлелекте аңлата. Татарстандың Мөслим районында Табын йылғаһы аға, уның буйында Түбән Табын һәм Юғары Табын ауылдары урынлашҡан. Башҡорт шағиры Ирек Кинйәбулатов "Табындарға" тигән шиғыр яҙған:

... Табын, тиһәм, күҙ алдына баҫа
Өҫтәл һығылыр һыйлы табындар.
Йот йылына ырыу хаҡы өсөн
Бүлешелгән һуңғы ҡабымдар.
Туғандарым:
Кәлсер Табын,
Төкөн Табын,
Дыуан Табын,
Ҡара Табын,
Барын Табын,
Күрпәс Табын,
Ҡумырыҡ Табын... -
Беҙ бит ниндәй оло Табын!
Эй, ырыуым!
Һинең һүнмәҫ утың
Нисә мең йыл элек ҡабынды?
Ҡәбиләнә нисек һыйынды ла
Нисә ырыу һинә табынды ...

**(Дауамы бар).**

✓ Ул фекерен социаль селтәрҙәрҙә баҫып сығара ала, ундай кешеләрҙең төркөмөнә яҙылыусыларҙың һаны ҡайһы берҙә 30-70 мең тирәһе була. Гәзиттәрҙең ундай тиражы юҡ. Шуға ла бөгөн журналист үҙгәрергә тейеш.



# ДЕПУТАТЛЫҠ

## "Милләт әсәһе" тигән

**Сәйәсәт - элек-электән ир-ат өлкәһе, ир-ат шөғөлө иҫәпләнә. Ир-егеттең батырлыҡтар, ҡыйыу ҡарарҙар ҡабул итеү сифаты уның тәбиғи булмышында ята, ә ҡатын-ҡыҙҙың асылы - донъяға һөйөү таратыуҙа, тиҙәр. Ә шулай ҙа халыҡтың ышанысын аҡлап, сәйәсәттең еңел булмаған йөгөн үҙ иңдәрендә алып барыусы ҡатын-ҡыҙ замандаштарыбыҙ күп беҙҙең. Уларҙың береһе - Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты Үҙәк штабы рәйестәше, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Мәғариф, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр сәйәсәте комитеты рәйесе Эльвира Ринат ҡыҙы АЙЫТҠОЛОВА менән унең депутат эшмәкәрлеге һәм башҡа мәсьәләләр хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.**

### Ғаилә лә, мөхит тә тәрбиәләй

Учалы районы Яңы Байрамғол ауылында тыуып-үҫеп, икенсе класҡа тиклем ошо ауылда уҡыһам да, ғаиләбеҙ менән ситкә сығып китеү сәбәпле, урта мәктәпте Ҡаҙағстанда тамамланым. Шулай ҙа һөнәр алыу өсөн Башҡортостанды һайланым - тәүҙә Белорет педагогия училищеһында (колледжы), аҙаҡтан Башҡорт дәүләт университетының журналистика факультетында һөнәр үҙләштерҙем. Атайымдың тамырҙары Учалы районы Туңғатар ауылынан, ул Силәбе өлкәһе менән сиктәш кенә. Өләсәйем менән олатайым Силәбе өлкәһе Златоуст ҡалаһында йәшәгән. Атайым ҡалала үҫкән, ҡала мәктәбен тамамлаған. Инәйем (әсәйем.-**Ред.**) менән өйләнешеп, инәйемдең тыуған ауылы Яңы Байрамғолда йәшәй башлағас та атайым урыҫ теленән саф башҡортса аралашыуға күсә алмай. Шуға ла өйҙә беҙ башҡортса ла, урыҫса ла һөйләштек. Ике телдә лә, тигәс тә, ике телде ҡатыштырып, бутҡа яһап түгел, ә айырым-айырым ике телдә һөйләштек. Шуға ла миңә бөгөн сығыш яһарға тура килһә, ике телдә лә таҙа итеп һөйләй алам.

Баланың теле ғаиләлә әсә телендә асылырға тейеш, ул бәләкәй саҡта унең менән тик туған телдә һөйләшергә кәрәк, тигән фекерҙең дөрөҫлөгөнә инанғанмын. Ҡайным һәм ҡәйнәм менән өйҙә башҡортса аралашабыҙ, шуға ла тормош иптәшем менән килештек тә, балалар үҫкәнсе, улар менән тик башҡортса һөйләшергә тырыштыҡ. Өлкән ҡыҙыбыҙға әле 21 йәш, ул балалар баҡсаһында ла башҡорт төркөмөнә йөрөнө, туған телен яҡшы белә. Ә бына бәләкәй ҡыҙыбыҙға башҡорт төркөмөндә шөғөлләнергә мөмкинлек булманы. Башҡортса ғына һөйләшкән бала, балалар баҡсаһына барғас, бер нәмә аңламайынса, бер ай шымып йөрөнө-йөрөнө лә, урыҫ телендә һөйләшеп алды ла китте. Шуға ла, башҡорт балаһы урыҫ телен үҙләштерә алмаҫ, тип, һис борсолорға ярамай ата-әсәләргә. Бәләкәй баланың сит тел үҙләштереү һәләте ҙур, ә бына бала саҡтан туған телендә аралашмаһа, аҙаҡтан һуң булыуы ла ихтимал. Бөгөнгө көндә бөтөн уҡыу йорттарында ла сит тел булараҡ инглиз теле өйрәтелә һәм беҙ күрәбеҙ: башҡорт телендә һөйләшкән балаға инглиз өндәре лә тәбиғи бирелә, сөнки унең теле ошо өндәрҙе әйтеп асылған.

### Журналист шул уҡ сәйәсмән

Педагогия училищеһынан һуң журналист һөнәрен һайлағанда йәшлегемә барып, унең асылын, мәғәнәһен аңлап етмәгән дә булғанмындыр. Шуныһы ла ҡыҙыҡ, бала саҡта мин ул ваҡыттағы иң билдәле һөнәрҙәр - уҡытыусы ла, табип та түгел, ә журналист булып уйнағанмын. Үҙем иҫләмәйем, әммә инәйем һөйләүенсә, тараҡты микрофон итеп тотоп, уға һөйләп, хәлдәрегеҙ нисек, тип, башҡаларға һорау биреп йонсотҡанмын. Баҡтиһән, журналистика һинең йәшәү рәүешеңә әүерелә икән. Белемдән тыш, журналисҡа тәжрибә кәрәк, шунһыҙ ул үҙ һөнәренең оҫтаһына әүерелә алмай. Студент саҡта "Молодежная газета"ла эшләп киткәйнем. Ә һөнәрҙең төмен радиола, телевидениела эшләгәндә тойҙом.

Депутат итеп һайланғас, баштa миңә, эфирҙа эшләп өйрәнгән кешегә, нимәлер етмәй һымаҡ ине. Әлбиттә, журналист шулай уҡ сәйәсәттән ситтә була алмай, һөнәрең шундай: теләйһеңме һин, юҡмы - сәйәси ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнарға, бөтөн яңылыҡтарҙы, үҙгәрештәрҙе белергә тейешһең.

Депутат эшенә журналист һөнәре аша килеүем әлеге эшемдә ныҡ ярҙам итә. Журналист булараҡ, республика буйлап күп йөрөнөм, проблемаларҙы ишетеп түгел, күреп беләм. Закон ҡабул ителгәндән һуң да, халыҡ менән аралашып, уларға был реформаның файҙаһы бармы, юҡмы, нимәгә иғтибар итергә кәрәклеген белешергә ғәҙәтләнгәнмен. Шулай уҡ журналист булараҡ, һәр бер һорауҙы төбөнә төшөп асыҡларға тырышыу бар. Халыҡ менән власть араһындағы арауыҡты яҡынайтырға тырышыуға ла беренсе һөнәремдә үҙләштергән сифаттар ярҙам итә. Элекке журналистар булмай, был - хәҡикәт.

### Башҡорт телен уҡыйыҡ!

Бөгөн дәүләт теле булараҡ та, туған тел булараҡ та башҡорт телен өйрәнеү өсөн бөтөн шарттар тыуҙырылған - закондар яҡлай, уҡытыусылар бар, бюджеттан аҡса бүленә. "Мәғариф тураһында"ғы законға килгәндә, ул тел мәсьәләһенә ҡағылышлы ғына түгел, ә бөтөн һорауҙарға ҡарата ла бик демократик ҡараштa төҙөлгән һәм унең вариатив өлөшө шаҡтай ҙур. Теләй икән, бала мәктәпкә йөрөмәй, өйҙә уҡый, теләй икән, параллель рәүештә бер нисә вуз тамамлай, теләй икән, профилле кластар бар, теләгән фәндәрен тәрәнерәк өйрәнә ала. Бер яҡтан, был - заманса мәғариф системаһының демократик принциптары. Икенсе яҡтан, кешенең теләктәренә килгәндә, был бик ҡатмарлы һорау. Беҙ "тейеш" тигән принципта эшләгән совет мәктәбендә белем алдыҡ. Әлбиттә, унда уҡыған ҡайһы бер предметтарҙың тормошта кәрәге лә теймәне, әммә уларҙы беҙ уҡырға тейеш инек. Ни өсөн, тигән һорау ҙа тыумай торғайны. Бөгөн заман икенсе, заманса фекерләгән ата-әсәләр быуыны үҫеп етте. Был Закондың ҡабул ителеүенә декабрҙә биш йыл була, һуңғы ваҡытта ата-әсәләр унең көсөн һәм төмен белеп алды. Улар һәр бер фән, дәреслек тураһында белергә теләй - ниңә, ни өсөн, унан балама ниндәй файҙа? Тимәк, уҡытыусыларға ла, мәктәп директорына ла ошондай фекер йөрөткән ата-әсәләр менән аралаша, хәлде аңлата белергә өйрәнергә кәрәк.



**ЭЛЬВИРА АЙЫТҠОЛОВА:**

*Беҙ - традициялары бай халыҡ, милли йолаларыбыҙҙы тотоп көн күрәбеҙ. Яңы заман башҡорто булам, тип, тарихыбыҙҙан, мәҙәниәтебеҙҙән баш тартырға кәрәкмәй, киреһенсә, бөгөнгө заманға яраҡлаша белгән лайыҡлы башҡорт булырға тырышһаҡ ине.*

Һәр бер нәмәнең ыңғай һәм кире яғы булған кеүек, был күренештең ыңғай яғы шунда - конкуренция үҫә, уҡытыусылар, ә уларҙың йөҙөндә мәғариф системаһы ошо шарттарҙа үҙе лә үҙгәрергә, икенсерәк сифаттарҙы үҙләштерергә бурыслы. Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөнгө еңел булмаған осорҙо мин бер хәлдән икенсе хәлгә күсеү осоро тип атар инем. Яңылыҡтар үҙләштерелеп, иләнеп, һуғылып, яйға һалынырға тейеш ине ҡасан булһа ла. Ошоно йырып сыҡһаҡ, мәктәпкә мөнәсәбәт тә үҙгәрер, бәлки. Беҙ бала саҡта, шым ултыр, тип уҡытһалар, бөгөн төрлө методикалар күп, уларҙың ҡайһылары буйынса уҡыусы дәрестә парта артында бөтөнләй ултырмай, ә кабинетта ирекле хәрәкәт итеп белем ала, был тыйылмай. Бала үҙен азат тоя. Донъя үҙгәрә, шуға ла, элек рәхәт ине, элек яҡшы ине, тип, беҙ ҙә боронғоға йәбешеп ята алмайбыҙ. Бары тик үҙгәреп торған шарттарға үҙебеҙҙең яуап булырға тейеш.

### Беҙ ҙә үҙгәрәбеҙ...

Үҙгәрештәр журналистикаға ла ҡағыла. Бөгөн үҙ фекереңде еткереүҙең юлдары шул тиклем күп, күрә йөрөйбөҙ, кеше яҙа, фекер йөрөтә, ҡыҙыҡлы мәғлүмәт табып, уны еткерә белһә, унең бөтөнләй журналист булмауы ла ихтимал. Ул фекерен социаль селтәрҙәрҙә баҫып сығара ала, ундай кешеләрҙең төркөмөнә яҙылыусыларҙың һаны ҡайһы берҙә 30-70 мең тирәһе була. Гәзиттәрҙең ундай тиражы юҡ. Шуға ла бөгөн журналист үҙгәрергә тейеш. Журналист булып эшләйһең икән, һин дә ошо социаль селтәрҙәрҙә булырға, үҙең тапҡан, яҙған материалдарыңды күберәк кеше уҡыһын өсөн юлдарын эҙләргә бурыслыһың. Журналистар - улар яҙа белгән, тормошто күҙәтә, һығымта яһай белгән кешеләр, уларҙың яҙған мәҡәләләре бөгөнгө матбуғаттың беренсе өлөшө генә. Ошо мәҡәләне уҡыусыларға алып барып еткереү - икенсеһе.

Бөгөн көслө журналистар күп, тик уларҙың ижадын уҡыусыға еткереү йәһәтенән дә эшләргә кәрәк. Заман журналисының тауышы "үтек"тән дә ишетелергә тейеш. Әбей-бабайҙарға ул гәзит аша килһә, йәштәргә - социаль селтәрҙәр аша. Мәҫәлән, минең бәләкәй ҡыҙыма 9 йәш. Элек беҙ Юрий Гагариндарға ҡарап һоҡланһаҡ, бөгөн ҡыҙым блогерҙарға тиңләшергә ынтыла. Иң ҡыҙығы, хәҙерге балалар, блогер бөтөн нәмәне лә белә, тип уйлай. Интернеттан блогерҙарҙың видеоларын ҡарай, үҙе лә эшләп маташа. Яңыраҡ ҡына миңә һөйләй, Ивангай тигән блогер сирләп киткән, ти. Бер аҙна буйына бер нәмә лә яҙмаған, бер аҙна буйына унең бер ниндәй ҙә яңылыҡтары булмаған. Ошо арала исеме билдәһеҙ генә бер бала-саға уны яҙылыусылар һаны буйынса үтеп киткән. "Былай барһа, интернетты балалар үҙҙәренең ҡулдарына алып ҡуяр инде", - ти ҡыҙым.

Быларҙы мин нимә өсөн һөйләйем? Бөгөн йәштәр бөтөнләй икенсе төрлө фекер йөрөтә, уларға бөтөнләй икенсе нәмәләр ҡыҙыҡлы. Мәғлүмәт алыусылар үҙгәрә икән, журналистарға ла мәҡәләләрен уларға еткереү өсөн ошо юлдарҙы ҡулланырға тура киләсәк. Депутаттарға ла ҡағыла был. Депутат үҙенең эшен яҡтыртып барһын, депутат менән еңел бәйләнешкә инеп булһын. Интернет менән файҙаланыусылар һаны киләсәктә күбәйә барасаҡ. Интернетта үҙебеҙҙең шрифт, башҡортса төркөмдәр булыуы ыңғай күренеш. Йәғни, интернетта ла башҡорт мөхите булырға те-

***✓ Үҙебеҙ өсөн үҙебеҙ яуаплылыҡ алырға, үҙ юлыбыҙ менән барырға, проблемаларҙы бергәләп хәл итергә өйрәнһәк ине. Бөгөн коллектив йәшәү шарттарында түгелбеҙ, үҙәк урында - кеше факторы.***

# ВАЗИФАҺЫ...

## вазифаға ҡамасауламай



*Эльвира Ринат ҡыҙы ҙур ғаиләһе - тормош иптәше, ҡыҙҙары, әсәһе һәм ҡайны-ҡәйнәһе менән.*

ғына тиклем еткереп, закон рәүешендә индереп, 21-се кнопка тип йөрөтөлгән мотлаҡ дөйөм кнопкаға үҙенең контентын урынлаштырыу хоҡуғын алды улар. Хәҙер был милли канал тамашасыға яҡынырах - башҡорт тапшырыуҙарын кабелле операторҙарҙың 21-се кнопкаһында табырға була. Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының Мәскәүҙәге Үҙәк штабында мине хатта күберәк журналист булараҡ ҡабул итәйеш, бөгөн ул бар, хәҙер интеллигенцияны унда ла йәлеп итергә кәрәк. Сөнки, әйтеүемсә, бөгөн балаларҙы блогерҙар тәрбиәләй, ә улар араһында ысын шәхестәр һирәк. Милләт булараҡ үҙебеҙҙе һаҡлайыҡ, беҙҙең фекергә ҡолаҡ һалһындар, тиһәк, төрлө алымдарҙы үҙләштереп, ҡулланырға тейешбеҙ.

### Милли канал - милли мөхит

Ҡасандыр телевидение журналисы булараҡ та, әле лә урындағы телевидение менән яҡшы аралашам, уларҙың проблемаларын, яңылыҡтарын белеп торам. Башҡортостан юлдаш телевидениеһында профессиональ команда эшләй. Рәсәй кимәлендә беренселәрҙән булып инициатива менән сығыш яһап, эште аҙаләр, мин унда милли каналдарҙағы проблемалар тураһында йыш һөйләйем.

Әйткәнем бар, милли каналға ҡараш ябай ғына булырға тейеш түгел. Уға матбуғат сараһы тип кенә ҡарарға ярамай, унының йоғонтоһо ҙур, ул милли мөхит тыуҙыра. Кеше ер шарының ҡайһы нөктәһендә генә йәшәмәһен, интернет аша башҡорт телевидениеһын ҡараһа, унда, мин Башҡортостандан, тигән ғорурлыҡ тойғолары уяна. Телевидение ошо территориялағы халыҡты берләштерә, шәхестәребеҙҙең фекерен еткерә. Гәзит-журнал өйгә килә икән, уны үҙең генә уҡыйһың да ҡуяһың, ә телевидениелағы тапшырыуҙар һәр бер кешегә арналған, улар үткәргән бәхәстә барыһы ҡатнашҡан һымаҡ тәьҫир ҡалдыра. Күҙәтеп йөрөүемсә, БСТ Рәсәйҙә милли каналдар араһында иң алдынғыһы, беҙҙең тапшырыуҙарҙың сифаты юғары. Айырым балалар телеканалы бар, ул бәләкәстәрҙе тәрбиәләй. Ғөмүмән, һәр төбәктәге милли каналдың әһәмиәте ҙур. Улар аша тел, мәҙәниәт үҫә, милли мөхит булдырыла.

### Әүҙемдәр ҙә төрлө була

Бөгөнгө заманда ҡыҙыҡ ҡына тенденция барлыҡҡа килде. Күптәр башҡалар менән аралашҡанда, бәхәстәр ваҡытында үҙенең күп ваҡытын, иғтибарын, көсөн үҙе үҙгәртә алмаған күренештәргә бүлә. Шуның менән ғүмерҙәрен уҙғаралар. Әгәр ҙә нимәнелер үҙгәртә алмайһың икән, быға энергияңды түкмә. Психологтар әйтә бит, кеше ошо секундта бер нәмә тураһында ғына уйлай ала. Был энергияны кәрәкмәгән нәмәгә түгел, ә ғаиләгә бүлергә була.

Өйөңдәге ваҡиғаларҙан башҡаһына, йәғни йәмғиәттәге хәлдәргә битараф булығыҙ, тимәйем мин. Киреһенсә, гражданлыҡ әүҙемлеген законлар ҙа яҡлай, йәмәғәт контроленә дәүләт тарафынан иғтибар бүленә. Кеше үҙен ҡыҙыҡһындырған нәмәне тикшереп, һорауҙарына яуап ала ала. Әммә әүҙем кешеләр ҙә ике төркөмгә бүленә. Тәүгеләре үҙе өсөн эшләй һәм булған проблемаларҙы, сетерекле мәсьәләләрҙе күтәреп сығып, үҙенә иғтибар яулай, исемен данлай. Ундай кешеләр күп, тик лозунгыларынан файҙа юҡ. Икенсе төркөмгә ошо булған проблемаларға яуап эҙләүселәр инә. Яуаптарҙы урамда табып булмай, шуға бындай әүҙем кешеләр закондарҙы ҡарап, аналитик эш алып барып, эксперттарҙы йыйып, фекерҙәштәре менән берләшеп тә эшләһә, ҙур көскә эйә була ала. Бына бындай граждандар менән кәңәшләшеп эшләһәң, кәрәкле законды ҡабул итеүе лә, уны аҙаҡтан үтәүе лә еңел.

### Заман башҡорто - кем ул?

Бөгөнгө заман башҡорто кем һәм ул ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш, тигән һорауға яуап биреүе еңелдән түгел. Борондан килгән, беҙ баҫалҡы, беҙ тәбиғәт балаһы, тигәнерәк стереотиптар бөгөн дә матбуғат сараларында, мәҙәниәттә сағылыш таба. Әлбиттә, беҙ үҙ менталитетыбыҙҙан бер ҡайҙа ла китә алмайбыҙ, әммә башҡа заманда йәшәгәнебеҙҙе аңларға тейешбеҙ. Миңә, мәҫәлән, үҙебеҙҙе һәр ваҡыт кем менәндер сағыштырырға яратыуыбыҙ оҡшамай. Педагогикала шундай ҡағиҙә бар - баланы бер кем менән дә сағыштырырға ярамай, уны үҙе менән генә сағыштырырға була. Әйтәйек, кисә ул ниндәй ине лә, бөгөн ниндәй. Халыҡтарҙы ла башҡа халыҡтар менән түгел, ә бынан бер нисә йыл элек ниндәй булыуыбыҙ, был ваҡыт эсендә ниндәй юл үтеүебеҙ, ниндәй һабаҡтар алыуыбыҙҙы сағыштырырға кәрәк. Беҙгә эшләргә, үҫергә, камиллашырға бирмәйҙәр, тигән тәнҡит һүҙҙәренән дә арынырға ваҡыт. Бындай психология менән бөгөнгө баҙар шарттарында йәшәүе ауыр. Был ғәҙәткә ҡаршы көрәшергә кәрәк. Кем ғәйепле, нишләп килеп сыҡмай, тигән һорауҙарға яуап эҙләгәндә кеше үҙен иҫәпкә алмай, ғәҙәттә, ғәйеплеләрҙе ситтән эҙләй. "Ғаиләлә шулай тәрбиәләгәндәр", "Тейешле түңәрәккә яҙҙырмағандар", "Мәғариф системаһы дөрөҫ тәрбиәләмәгән", һ.б. Мөмкинлектәр күп бөгөн, ата-әсәйеңдең һине бала сағында бейеү түңәрәгенә яҙҙырмауынан күңел әрнеүе кисереп йөрөгәнсе, тот та бейеү түңәрәгенә яҙыл. Үҙебеҙ өсөн үҙебеҙ яуаплылыҡ алырға, үҙебеҙҙе бер кем менән дә сағыштырмаҫҡа, үҙ юлыбыҙ менән барырға, проблемаларҙы бергәләп хәл итергә өйрәнһәк ине. Бөгөн коллектив йәшәү шарттарында түгелбеҙ, үҙәк урында - кеше факторы. Мәскәү, Санкт-Петербург йәиһә сит илдәрҙә йәшәп, эшләп, унда ла тыуған илгә, халыҡҡа хеҙмәт итеп йөрөүсе йәштәребеҙ күп. Үҙ һәләтен, белемен үҫтереүселәр заманы хәҙер. Донъяға, кешеләргә ҡарашыбыҙҙы үҙгәртергә тейешбеҙ бөгөн, минеңсә.

Беҙ - традициялары бай халыҡ, милли йолаларыбыҙҙы тотоп көн күрәбеҙ. Яңы заман башҡорто булам, тип, тарихыбыҙҙан, мәҙәниәтебеҙҙән баш тартырға кәрәкмәй, киреһенсә, бөгөнгө заманға яраҡлаша белгән лайыҡлы башҡорт булырға тырышһаҡ ине.

### Һәр нәмәнең үҙ урыны

Ғаиләм янына ҡайтҡанда эшемде тышта ҡалдырып инергә тырышам, шулай ҙа әҙерләнергә, шылтыратыуҙарға яуап бирергә тура килә. Балаларымды, хәләл ефетемде беренсе урынға ҡуям. Бөгөнгө заманда нимә эшләгең килмәй, уны төрлө хеҙмәттәр аша эшләтеү мөмкинлеге күп. Аутсорсинг тиҙәр быны замансалап. Бала ҡараусы яллау ҙа шул уҡ аутсорсинг. Тик баланы аутсорсингҡа бирергә ярамай, ваҡытым нисек кенә тығыҙ булғанда ла, уларға дәрес әҙерләшергә, аралашырға тырышам. Балаларым менән аралашһам, ял итәм. Берәй ергә барып киләбеҙ, бик булмаһа, бәләкәсе видео төшөргәндә оператор булып торам. Балалар менән булған бәйләнеште юғалтырға ярамай. Өлкән ҡыҙым ашарға бешереү, өйҙө йыйыштырыу кеүек мәшәҡәттәрҙе үҙенә алған, һеңлеһен дә ҡарай. Эшем ғаилә тормошона бик ҡамасаулай тип әйтмәҫ инем. Бөтөн әсәйҙәр ҙә минең хәлдә, бөтәбеҙ ҙә эшләйбеҙ, эштән ҡайтҡандан һуң өйҙә икенсе смена башлана. Атайҙың һүҙе - иң төп һүҙ беҙҙә. Инәйем беҙҙе лә шулай тәрбиәләне, атайығыҙ ял итә, шауламағыҙ, тиер ине. Иң ҡурҡыныс нәмә - атайығыҙға әйтәм, тигән һүҙ ине. Атайҙың күҙ ҡарашы ла етә торғайны. Әле лә, атай нимә әйтер икән, тип һүҙ башлай ҡыҙҙар, үҙең һөйләшеп ҡарайһыңмы әллә, тиҙәр.

Аллаға шөкөр, инәйем иҫәнһау. Мин үҙем хәтерләмәйем, инәйең: "Һин - шәп, һин - маладис", - тип үҫтерә ине һине, ти әхирәтем. Әле лә шулай, инәйем дә, ҡәйнәм дә миңә гел уңыштар теләп тора. Ҙур ғаиләм, тип йөрөтәм уларҙы. Үҙемдең ғаиләмдән тыш, инәйем, ҡайным, ҡәйнәмдән торған ҙур ғаиләм менән аралашырға яратам. Ҡайным да тәжрибәле кеше, улар менән ултырып сәй эсеп алһаң да ял итәһең. Уҡырға яратам, был да энергия бирә. Тәбиғәтте яратам, быйыл тыуған көнөмә үҙемә бүләк яһаным - Ирәмәлгә менеп төштөм. Әйтәләр ине, көс өҫтәлә, тип, дөрөҫ икән.

Иртә таң менән үҙемә ваҡыт бүләм, сөнки көн дауамында быға мөмкинлек булмаҫын беләм, ә кисен өйҙә балалар көтә. Иртән фитнес менән шөғөлләнәм, ошо рәүешле үҙемде яңы көнгә әҙерләйем. Өлкәнәйгән һайын рухи торошондо ғына түгел, тәнеңде лә ҡарарға кәрәк. Холҡомдоң тыныс булыуы ла тормошомдо гармонияла тота, артыҡ хистәргә бирелеп, донъя емерә, үҙем уйлап тапҡан проблемаларға ҡайғырып ултыра торған ғәҙәтем юҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө башҡорт йәмғиәтендә эшләгән эше, һөйләгән һүҙе менән абруй яулаған шәхестәребеҙҙең береһе Эльвира Айытҡолованың әлеге мәлдә күптәрҙе борсоған һорауҙар буйынса әйткән фекерҙәре ҡыҙыҡлы булғандыр, тип ышанабыҙ. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙың бөгөнгө геройыбыҙ кеүек ҡыҙҙары бихисап һәм, иң һөйөндөргәне, улар ҡатын-ҡыҙ, тәү сиратта, милләт әсәһе икәнен, башҡорт ҡатыны үҙе өлгө һәм милләтебеҙҙең әҙәп-әхлаҡ сифаттарының дауамы булыуын алға ҡуйып йәшәй һәм эшләй. Милләткә тоғролоҡ та тап шунан башлана.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

**Ерлек мәҙәниәткә ҡарап түгел, ә мәҙәниәт ерлеккә ҡарап формалаша. Дөрөҫөрәге, шул ерлектән ҡалҡып сыға, шул тупраҡта үҫә. Шуға ярашлы, Сибай дәүләт филармонияһы ла Урал аръяғы фольклоры, ауыҙ-тел ижады һәм халыҡсан рухы менән һуғарылған. Уларҙың сығышын әллә ҡайҙан танып-белергә, үҙенсәлектәренә хайран ҡалырға була. Сибай дәүләт филармонияһы директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат ҠОТОШОВ, филармонияның режиссеры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фәнил ӘСӘҘУЛЛИН һәм художество етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Нәсимә ҒИЗЗӘТУЛЛИНАлар менән ошо юҫыҡта әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# УҢЫШЛЫ ТУПРАҠТА ТАМЫРЛАНЫП...

## уның өсөн йәм, биҙәк булырға тырышыуыбыҙ





➔ **Һеҙҙең барығыҙҙың да оҙаҡ йылдар Сибай төбәк мәҙәниәте өсөн хеҙмәт иткән кешеләр булыуығыҙҙан башлайыҡ әле һүҙҙе. Хеҙмәтегеҙҙе һәм ғүмерегеҙҙе ошо ҡалаға бағышлауығыҙҙың сәбәбе нимәлә? Ниmәһе менән ылыҡтыра һеҙҙе Сибай?**

**Айбулат Ҡотошов:** Һәр балыҡтың - үҙ һыуы, күл балығы - йылғала, йылғаныҡы диңгеҙҙә йәшәй алмай. Шуның кеүек, Сибай беҙҙең үҙ йылғабыҙ. Башҡа ерҙәргә лә саҡырҙылар, эшләп тә ҡайттыҡ, әле лә сит яҡтар менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ, әммә ошо Сибайҙан китә алмайбыҙ. Беҙҙәге кеүек халыҡсан, ябай һәм милли колоритты, милли үҙаңды әлегәсә һаҡлап ҡалған төбәктәр юҡтыр, тиһәм дә, арттырыу булмаҫ. Ваҡытында был ҡала шул ерлектең абруйлы шәхесе Зиннур Йәрмөхәмәтов хәстәрлегендә беҙҙе асыҡ йөҙ менән ҡаршы алды, эшләү һәм йәшәү мөмкинлектәре бирҙе. Бөтөн иҫтәлекле һәм матур ваҡиғаларыбыҙ ошо ҡала менән бәйле. Һәр беребеҙ ғаиләләрендә ҡаланың йәш быуынын үҫтереп киләбеҙ. Бер һүҙ менән әйткәндә, уңдырышлы тупраҡҡа тамырланғанбыҙ һәм уның өсөн йәм, биҙәк булырға тырышып ятабыҙ.

**Фәнил Әсәҙуллин:** Сибайҙа ижад итеүе үҙе бер ләззәт бит ул. Ниндәйҙер тамаша әҙерләп, уны халыҡ аңлармы икән, тигән борсолоу ят беҙгә. Сөнки халыҡ үҙе шул ерлекле ижад нигеҙендә барлыҡҡа килгән һәм йәшәп ята. Улар шул нигеҙҙән айырылмаған. Беҙҙең тамашасыға ниндәй генә йола йәки халыҡ ижады өлгөһөн күрһәт, улар уға аптырап ҡарамаясаҡ, улар уны белә һәм таный.

**Нәсимә Ғиззәтуллина:** Мин ун йәшемдән Сибайҙамын. Шунлыҡтан, ул миңә эшләгән һәм йәшәгән ерҙән бигерәк, тыуған яҡ та. Ә инде тыуған яҡтың ни өсөн үҙенә тартыуын үҙегеҙ беләһегеҙ. Мәҫәлән, ҡаланың бәләкәй булыуы минең ижадымды бер ҙә сикләмәй. Киреһенсә, бында ниmәгә тотонһаң да - хазина. Бөгөн күп ерҙәрҙә янынан тергеҙелеп ятҡан милли кәсептәр, йолалар һәм башҡа күренештәр был төбәктә күҙҙән дә, күңелдән дә юғалғаны юҡ.

➔ **Ысынлап та, сибайҙарға халыҡсанлыҡ хас. Ә бит республиканың башҡа театрҙары ла фольклор һәм халыҡ ижадын ҡулланмай тормай. Хатта бер үк әҫәрҙе йәки тамашаны бер үк режиссер ҡуйғанда ла, сибайҙарҙыҡы ныҡ айырыла. Бының сере нимәлә?**

**Айбулат Ҡотошов:** Татар халҡының арҙаҡлы йырсыһы Илһам Шакиров әйтеүенсә, башҡорт йырын йырлар өсөн башҡорт булып тыуыу зарур. Йәғни, ошо төбәктә тыуып үҫмәгәндә лә, ошонда ниндәйҙер арауыҡ йәшәп, эшләп, ерле халыҡ тыуҙырған мөхитте һеңдереү мотлаҡ. Бары шунда ғына һин шул ерлек һөйләшеүен алаһың, шунда барған хәл-ваҡиғаларҙа ҡайнап, шул ерлек халҡы кисерештәрен кисерә, хатта шулай уйлай һәм фәлсәфә итә башлайһың.

Нисек кенә тимә, Сибайҙа милли мөхит тә икенсерәк. Унда беҙ башҡортораҡ һәм рухлыраҡ. Мин милләтсе түгел, әммә халҡымды йәнем-тәнем менән яратыусы бәндә. Һәм бына ошо сифат беҙҙең барыбыҙға ла хас, ул беҙҙә ярылып ята - шул ғына.

**Нәсимә Ғиззәтуллина:** Өфө ижады - ул академик кимәл. Бәлки, шуға беҙҙең филармония ижады баш ҡалағылар һәм башҡалар өсөн экзотик күренеш һымаҡ ҡабул ителәләр. Шул уҡ ваҡытта беҙҙә үҙенсәлекле булыуға артыҡ ынтылыш та юҡ. Беҙҙең сығыштар, ижадыбыҙ тәбиғи килеп сыға. Бейеүҙәргә, тамашаларға халыҡтан алынған фольклорҙы, күп осраҡта, саҡ ҡына ла үҙгәртмәй, тере килеш кенә күсереп һалабыҙ. Сәхнәгә һәм тамашасы ҡабул итеүенә яраҡлаштырыу юҡ кимәлендә. Һәм, минең уйлауымса, тап бына ошо фишка отошло була ла инде. Сөнки халыҡ әлеге көндә тап ябайлыҡҡа, тәбиғилеккә һыуһаған һәм, ғөмүмән, ул һәр ваҡыт шундайға мохтаж булды ла инде.

**Фәнил Әсәҙуллин:** Халыҡсанлыҡтың ябайлығын ниндәйҙер түбән мәҙәни кимәл, тип ҡарап, яңылыша күптәр. Улар быны ауыл клубын ғына биҙәй алған тамаша, тип ҡарай. Әммә тап шул ябайлыҡтың бөйөклөк икәнен онотоп ебәрәләр. Халыҡ ижадында виләсәпит уйлап сығарып ултырырға кәрәкмәй, унда барыһы ла бар: йыры ла, бейеүе лә, йолалары ла һәм йөҙәр төрлө тамашалар ҡоророп башҡа байлығы ла. Беҙ бары уларҙы файҙаланабыҙ ғына. Биҙәмәйбеҙ ҙә, шаштырмайбыҙ ҙа, кәметмәйбеҙ ҙә, самаһын белеп, мәғәнә һәм урынын аңлап ҡына тотонабыҙ. Филармониябыҙҙың тамашасылар ҡарап һөйөнгән халыҡсанлығы бары ошоларҙан ғибәрәт. Һәм ошо урында билдәләп китергә кәрәк: заманында яңы асылған филармонияның стилен хәл иткән һәләтле шәхестәребеҙ Әлмира Ҡыуатова менән Гөлназ Аҡназарова бик отошло йүнәлеш һайлаған.

➔ **Сибай дәүләт филармонияһының янғын арҡаһында бинаһыҙ тороп ҡалыуын урап үтеп булмайҙыр әлеге һөйләшеүҙә. Был хәл, моғайын, учреждениеның эске тормошона ла, ижади процесҡа ла йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Нисегерәк кисерҙегеҙ, үттеме был кризис, ниндәй эҙҙәр ҡалдырҙы? Һәм, Сибайға филармония кәрәкме ул, тигән һорау тыумаймы?**

**Фәнил Әсәҙуллин:** Фажиғә булған осорҙо иҫләп киткәндә, мин филармония коллективына рәхмәтемде белдерер инем. Ҡапыл бинаһыҙ тороп ҡалғас, әле ҡайҙа-нисек тип уйлап ҡаңғырышыуҙар булып алды. Шул мәлдә артистар ҡайҙалыр китеү, эш эҙләү кеүек ым-хәрәкәт тә яһап ҡараманы, исмаһам. Улар сыҙамлы, ныҡ булып, тарҡалыу түгел, киреһенсә, ойошҡаныраҡ, берҙәмерәк булып кисерҙеләр был ваҡиғаны. Бинабыҙ сентябрь айында янды, ә октябрҙә артистарыбыҙ гастролдәргә сығып та китте. Нисек кенә аяныслы булмаһын, ошо хәл коллективтың тәртипле, мәҙәниәтле, намыҫлы шәхестәрҙән тороуын күрһәтте.

**Айбулат Ҡотошов:** Әлбиттә, архитектура ҡомартҡыһы булған бинаның янып әрәм булыуы, беренсенән, ҡала өсөн ҙур юғалтыу, филармония коллективы өсөн тетрәнеү булды. Әммә был торошхан нисек тә сығып, ижади процесҡа зыян килтермәскә тырыштыҡ. Тап ана шул үҙ стационарыбыҙ булмау арҡаһында ла гастролдәрҙә йышайттыҡ һәм кинерәк даирәләрҙә яуларға тотондоҡ. Ыҕаса йөрөмәгән төбәктәребеҙҙә булып сыҡтыҡ. Хатта Башҡортостандың үҙендә лә беҙҙең филармония артистары сығыштарын күрмәгән районлар бар ине.

Матди база мәсьәләһе, Аллаға шөкөр, ыңғай хәл ителеү юлында. Бындай эштә иң беренсе ҡағыҙ-документ юллана, ә бинаны тәҙөп ултыртыу артыҡ ауырлыҡ тыуҙырмаҫ, тигән өмөттәбеҙ. Ә инде, Сибайға филармония кәрәкме ул, тигән һорау тыумаһын өсөн беҙ бөтөн тырышлығыбыҙҙы һалабыҙ. Һәм, бәхеткә ҡаршы, "Касан филармонияның яңы бинаһы төҙөләсәк?" тигән һорауҙы йышыраҡ ишетәбеҙ.

**Нәсимә Ғиззәтуллина:** Сибай ҡалаһында баш ҡаланан һәм башҡа яҡтарҙан килгән концерттарҙы күрһәтерлек, күп һанлы халыҡты хеҙмәтләндергәндәй башҡа бина ла юҡ. Театрҙың уның функцияһы башҡа, ә концерттарға тауыштың, яҡтылыҡтың, сәхнә һәм сәхнә арты йыһаздары урынлаштырыуҙың үҙ тәртибе, үҙ талаптары бар. Яңы филармония бинаһының булдырылыуы бер ыңғайҙан ошо мәсьәләне лә хәл итер ине. Ниндәйҙер мәҙәни үҙәк булырға тейештер бит ҡала һынлы ҡала!

➔ **Бөгөн ауыл һәм ҡалалар буйлап сәйәхәт итеүсе артистар ҙа, төркөмдәр ҙә, коллективтар ҙа бихисап. Тик халыҡ һәр концертты ҡарап ултыра, уларҙың барыһына ла аҡса бүлә алмай. Улар иң-индәрҙе һайларға, үҙҙәренсә баһаларға тырыша. Бына ошондай шоу-бизнес күгендә үҙ урыныңды булдырыу, һүҙендә әйтеү ҡалайыраҡ бирелә?**

**Фәнил Әсәҙуллин:** Эйе, бөгөн концерттарҙың һәм концерт ҡуйыусыларҙың иҫәбе-һаны юҡ. Географияны киңәйтеү менән дә булабыҙ, тинек. Ә нисек бирелә ул географияны киңәйтеү? Был бит ҡайҙалыр барып төштөң дә, йырланың да бейенең түгел. Бөгөн урындағы хакимиәт башлыҡтарына инеп, һөйләшеп сығып ҡына тамашасы йыйып булмай. Башта ҡырҡ кешегә лә ҡуйбыҙ тамашаны, унан һикһән, унан тағы ла күберәккә өмөтләнәбеҙ. Бында һәр аҙым эҙмә-эҙлекле, әммә уйланылған булырға тейеш. Халыҡ филармонияның сифатлы, юғары кимәлдәге концерт алып килеүен үҙ күҙҙәре менән күрергә тейеш. Юғиһә, бөгөнгө тамашасы фонограммаға йырлаған өс артистың сығышынан туйған, рухи яҡтан асыҡҡан.

**Айбулат Ҡотошов:** Белеүегеҙсә, филармония концерт-театр берекмәһе атамаһы менән йөрөй, сөнки "Сулпан" балалар театры менән берлектәбеҙ. Балалар театры үҙаллы ла эшләп килә,

шул уҡ ваҡытта бергә ҡушылып, бик елле программалар, театрлаштырылған тамашалар ҙа ҡуйып ташлайбыҙ. Был тәңгәлдә, мәҫәлән, мин башҡа бындай коллективты белмәйем.

Сибай театр-концерт берекмәһенең бер сығышы ла, бер гастроле лә енелелпе булмай, бер ваҡытта ла бер йәки ике пар бейеүсе менән сыҡмайбыҙ. Һәр саҡ тулы коллектив менән йөрөйбөҙ. "Сибай" бейеү ансамбленең бейеүҙәре 8-12-16-шар пар менән башҡарыла. Сценарийыбыҙҙың мотлаҡ йөкмәткеле, мәғәнәле, фәһемле булыуы тураһында әйтергә лә түгел, унының тамашасы үҙе лә күреп тора.

Фәнил дөрөҫ әйтте, бөгөн халыҡты юҡ-бар менән алдап та, әүрәтеп тә булмай, улар ҡый-ҡырҡынды күп күрҙе, тыңланы һәм хәҙер инде айырырға ла өйрәнде. Улар рухтарын тултырырлыҡ, тулыландырырлыҡ булғанды эҙләй. Һәм тап ошо мохтажлыҡты сибайҙар ҡәнәғәтләндерә ала ла.

➔ **Филармонияларҙың, ғөмүмән, мәҙәни коллективтарҙың бөгөнгө замандағы тәрбиәүи роле нимәлә?**

**Айбулат Ҡотошов:** Иң беренсе быны милли күҙлектән алып ҡарайыҡ. Милләттең юғалып һәм онотолоп барған рухи ҡомартҡыларын халыҡ хәтеренән соҡоп-эҙләп алып, уларға йән өрөп, ҡабаттан шул уҡ халыҡҡа сығарыу, йәғни, халыҡтың боронғоһо менән бөгөнгөһө араһында бәйләнеш булдырыу - беҙҙең төп маҡсат. Шуларға рухи хазиналарға, ижадҡа һөйөү тәрбиәләү, уны пропагандалауҙы ла еҫтәйек. Мәҫәлән, бая телгә алған "Сулпан" театры республикабыҙҙа балаларға башҡортса әҫәрҙәр ҡуйыусы берҙән-бер театр. Ул бер беҙгә генә түгел, ә Башҡортостандың бөтә театр-филармонияларына ла тамашасы әҙерләүсе алыштырғыһыҙ мәктәп.

**Нәсимә Ғиззәтуллина:** Беҙҙәге программалар ниндәйҙер бер сюжетҡа, шул уҡ ваҡытта тарихи сюжеттарға ҡорола. Ябай кеше күҙенә салынып бармаған, әммә үтә лә мөһим булған ҡиммәттәрҙе сағылдыра программаларыбыҙ. Мәҫәлән, ғаилә ҡиммәттәре, атаәсә хаҡы, бала ҡәҙере, тарихи шәхестәребеҙ, ер-һыу атамаларыбыҙ, туған тел, тыуған ил, батырҙар, гүзәлдәр - программала яҡтыртылған был теҙмәне тағы ла әллә күпме дауам итергә була. Рус телле тамашасыларға ла башҡорт милли мәҙәниәте тураһында мәғлүмәт еткерәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта милләттәштәребеҙгә башҡа халыҡтар мәҙәниәтен дә күрһәтәбеҙ. Дөйөмләштереп әйткәндә, беҙҙең бурыс матурлыҡ, ихласлыҡ кеүек юғары һәм саф тойғолар аша халыҡтың күңелен үҫтереү, яҡшылыҡҡа инандырыу, мәрхәмәтлеккә өндәү, уларға көс, дәрт, илһам биреү. Кешенең рухы һауыҡмай, күңеле сафланмай тороп, ул ниндәйҙер бөйөк эштәргә йәки ябай ғына тормош арбаһын тартыуға ла бармай. Ошо хәҡиҡәттә ныҡ тота беҙҙең коллектив.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сибай концерт-театр берекмәһе ошо көндәрҙә яңы миҙгелен асып, гастролдәргә юлланмаҡсы. Уларҙы һәр ерҙә түҙемһеҙләнеп көтөүселәр иҫәбендә баш ҡала тамашасылары ла бар. Шулай ҙа бер теләк күңелдә өйкәй: саф башҡорт төбәгенең рухи мәккәһе булған был мәҙәниәт усағын заман һәм яҙмыш ел-ямғыры аҫтында ташлап ҡалдырмаһын ине Хөкүмәтебеҙ. Концерт менән концерт, артист менән артист араһында айырма булған кеүек, Сибай филармонияһының да тамашасы күҙлегенән, халыҡ фекеренән бик юғары ҡуйылған үҙ урыны бар икәнен юғарыла ла аңлаһындар ине.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ЗАУЫҠ*

*Ринат СӘЛӘЙМӘНОВ*

# УЛЪЯ

## (Поэма)



### I

Поэмаға һыйырмы
Уйлаған, яҙған?
Күреп тораһығыҙ, нисек
Йәмғиәт аҙған.

Тутты ғына таный тип,
Итмәгеҙ хөкөм.
Ялҡыны булмайынса,
Сыҡмай ул төтөн.

Юлдағы юлда булһын,
Кем түгел юлда?
Күҙебеҙ светофорҙа,
Ҡулыбыҙ - рулдә.

Киң юлдарҙы тарайта
Авто ағымы.
Был - донъя дәһшәтеме,
Заман заңымы?

Тоноҡ тәҙ(е)рәләрҙән
Мең күҙҙәр баға.
Ҡасан ғына һыймаҫлыҡ
Ине был аңға.

Киң юлды сығып бара
Бөрөшкән ҡартлас.
Совет заманы ҡотон
Бары ул һатмаҫ.

Бейек йорт ҡамауында
Әйләнә башы.
Сыуалышта эҙләй ул
Үҙ нигеҙ ташын.

Бер ҡыҙый үтеп бара
Янынан бейеп.
Йыртылған джинсыла,
Ҡолаҡсын кейеп.

Ошо джинсы үҙгәртте
Совет аҙымын.
Джинсылы ҡыҙ шаулатты
Тормош һуҙымын.

Һалынырмы Рәсәй
Ҡасандыр рәтҡә?
Яңы берәү илемде
Отторҙо кәртҡә.

Кәрт тигәндән... Урамда
Кәрт һала сиған.
"Байырһың, - ти, - берәүгә,
Бул бер аҙ сыҙам".

Яҙмыштар килеп тора
Сиған янына.
Кем бәхет, кемдер ҡайғы
Шәлен ябына.

Мин дә уның янына
Килеп туҡталдым.
Ҡулы оҫта уйнатҡан
Кәртҡә уҡталдым.

Үҙ яҙмышымды белеү -
Маҡсатым түгел.
Ил яҙмышын хәстәрләү
Ягында күңел.

Шикләнеп ҡарай минә
Сиған балаһы.
Көтмәгән илгенәмде
Кәртҡә һалаһын.

Кәртен оҙаҡ уйнатты,
Тик ҡалды шымып.
Йәнгә шик өҫтәп, бары
Әйтте ошоно:

"Беҙҙең яҙмышыбыҙҙы
Ҡабатламағыҙ.
Асылығыҙҙы гүргә
Ҡаҙаҡламағыҙ".

Ишетеүсе юҡ, күптәр
Ҡолаҡсын кейгән.
Заман эҙәм иңенә
Бурыстар өйгән.

Тамаҡ ҡайғыһы менән
Йөрәктәр тибә.
Бурысы - бурыс ҡаплау,
Өрәктәр тимә.

Рәсәйҙең яҙмышын
Оҡшатып ҡуям
Йыртыҡ джинсылы ҡыҙға -
Йәшемде тыям.

Баяғы ҡартлас менән
Ерләнһә әхлаҡ,
"Заман беҙҙеке!" тиеп
Ҡыуаныр ахмаҡ.

Йыртыҡ джинсы модала,
Күңел дә һүтек.
Сирыш йәнгә сит моңдар
Булырмы үтек?

Йәмғиәт селтәрендә
Бар булмышыбыҙ.
Ҡайҙа тәгәрәй икән
Был тормошобоҙ?

Кешеләр араһында
Һалҡынлыҡ арта.
Киң интернет донъяһы
Упҡынға тарта.

Күптәр хатта дуҫтарын
Танымай юлда.
Күҙҙәребеҙ айфонда,
Ә ҡулдар - рулдә.

### II

Яратып тыңлар инек
Фәрит моңдарын.
Йотлоғоп уҡып ҡара
Мостай томдарын.

Үәт, тағы концерт бара,
Ҡайҙа йырсыһы?
Тутыҡ тауыштар хәҙер
Кемде борсоһон?

Сәхнәне яулап алған
Әтәс тауышы.
Ҡайҙа ҡаялар шыңшыр
Моңло тау ҡошо?

Сәнғәттең хаҡы түбән,
Бар хаҡ атомға.
Тик ул килтерер тимә
Рухи артымға.

Әйтеп тора был хаҡта
Атомлы сабый.
Әсәй таныҙан алда,
Айфонды таный.

Бала шатлығы менән
Килә ҡайғыһы.
Атомлы сабыйҙарҙың
Һау һуң ҡайһыһы?

Был заманды үҙебеҙ
Төҙөнөк тәнә.
Һәм уның ҡармағына
Эләктек, әһә...

Борсолорға урын бар,
Кәрәк уйлайһы.
Үҙебеҙ түгелме ни
Заман улъяһы?

Заман беҙгә буйһона...
Юҡ, беҙ - заманға.
Ошоно аңлап етмәй
Кеше һаман да.

Һыуҙарым ҡалмаҫ ятып,
Бер эсерлек тә.
Атом заманаһында
Беҙ әсирлектә.

Бөгөн иң ҡурҡынысы -
Беҙҙең балалар.
Улар заман улъяһы
Булып баралар.

Атомға табыналар,
Гүйә Аллаға.
Замандың бар афәте
Төштө балаға.

Кеше балаларынан
Роботтар тыуа.
Улар рухи киләсәк
Юлдарын быуа.

Бала күҙҙәре менән
Баға киләсәк.
Көләс йөҙлә сабыйға
Мохтаж Ил-Әсә!

### III

"Тиҙ ярҙам" машинаһы
Елдерә юлдан.
Унда баяғы ҡартлас,
Ғүмере - ҡылда.

Улар алдынан бара
Джинсылы сибәр.
-Йә инде, "Тиҙ ярҙам"ды
Үткәреп ебәр!

Әрләмәгеҙ, ул гүзәл
Заман улъяһы.
Ҡолаҡсында. Суҡынып
Китһен донъяһы!

Их, ҡотҡарырға ине
Рухи һалдатты.
...Кейеүендә әйтәйем
Аҡтан халатты...

Был ҡарт ҙур йырсы ине,
Халыҡ йырсыһы.
Тутыҡ тауыштар хәҙер
Кемде борсоһон?

Йөрәктәрҙе елкетеп,
Йырлап йәшәне.
Туҡһанды ҡыуҙы, йәне
Һаман йәш ине.

Сәхнәләргә һыйманы
Моңло тауышы.
Ул үҙе булды илдең
Рухи табышы.

Милли сәнғәтте бер саҡ
Тотто ла һүкте.
Сүпле моң баҡсаһына
Ҡайғырып сүкте.

Джинсылы ҡыҙ ултыра
Ҡәбер янында.
Ниһайәт, олатайҙың
Хәҙер янында.

Тере сағында килеп
Хәлен белмәне.
Ноҡот укыуҙарына
Ҡолаҡ элмәне.

Хатта урам буйында
Танымай үтте.
Иҫкелек тип, ҡартластың
Яҙмышын һүкте.

Рухи олатай менән
Ерләнгәс әхлаҡ,
"Заман беҙҙеке!" тиеп
Ҡысҡырҙы ахмаҡ.

Сәхнә түренә ҡунып,
Йырланы таҡмаҡ.
Күҙҙәре ромб шикелле,
Ауыҙы - шаҡмаҡ.

Уға киң юл асылды,
Йондоҙло ғүмер.
Аҫыл ҡарттың исемен
Сүп менән күмер.

Джинсылы ҡыҙ ҙа ғашиҡ
Ахмаҡ моңона.
Бар йәне, тәне менән
Уға һонола.

Әрләмәгеҙ, ул да бит
Заман улъяһы.
Ҡолаҡсында. Суҡынып
Китһен донъяһы.

### IV

Ҡала шауынан йонсоп,
Ҡайттым ауылға.
Хәлдәре шәптән түгел,
Тағы ни булған?

Өләсәйҙәр келәттә
Ҡымыҙ бешәләр.
Тик ейәндәре һыра
Эсеп үҫәләр.

"Эфес" ҡапҡаларынан
Нисәмә тонна
Һыра оҙатылғанда,
Күҙҙәрем тона.

Ауыл ҡапҡаһын ялмай
Шайтан тауышы.
Ен һуты менән ҡустым
Ҡуйған ҡауышып.

Мин дә шәптәрҙән түгел,
Йөрәгем китек.
Атайҙы ерләп ҡайттым
Ихтирам итеп.

Йыртыҡ джинсылы ҡыҙҙың
Атаһы булам.
Ҡото киткән замандың
Хатаһы булам.

Ҡап уртаһында торам
Ике замандың.
Икеһе ике яҡтан
Һелкә ягамдан.

Алырға уйлай заман
Мине улъяға.
Ҡайһы яҡтан йыртылыр
Икән был яға?

Ике заман уртаһы -
Тап минең заман.
Ҡап үҙәктә бер маяҡ
Шикелле янам.

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺАТЫЛҒАН ҺЫУ ҘА ЗЫЯНЛЫ

■ RIKEN мейе институты хеҙмәткәрҙәре үткәргән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ауырлы саҡта майлы балыҡ ашау балаларҙа шизофрения үсеше хәүефен түбәнәйтә. Ғалимдар һынауҙарҙы ҡомаҡтарҙа үткәргән. Әсә ҡарынында саҡта омега-3 майлы кислотаһы етешмәгән ҡомаҡтар өлкән йәштә шизофрения симптомдарына эйә була. Омега-6 майлы кислоталары дефициты ла ошондай һөҙөмтәләргә килтергән. Майонез, көнбағыш орлоҡтары, етен майы был кислотаға бай. Ғалимдар психика менән бәйле проблемалар һәм ҡарында саҡта майлы кислоталар етешмәү араһында бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Шуға ла ауырлы ҡатындарға был яңылыҡҡа иғтибар итергә кәрәк.

■ Бесәй, эт кеүек йорт хайуандары менән бергә йоҡларға кәңәш итә Майо клиникаһы белгестәре. Шул саҡта йоҡоғоҙ яҡшыраҡ туйыр, тиғән фекергә улар. Һынауҙарҙа 40 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың ҡайһылары 5 ай буйына эттәр менән бер бүлмәлә йоҡларға тейеш булған. Кешеләр ҙә, эттәр ҙә төндәге әүҙемлекте күҙәтеүсе датчик йөрөткән. Эттәр менән бергә йоҡлаусылар төндә һирәгерәк уянған, улар урындарында һирәгерәк борғоланған, тимәк, яҡшыраҡ йоҡлаған. Әммә кеше этен ҡосаҡлап йоҡлағанда йоҡо сифаты түбәнәйгән. Эт һеҙҙең менән бергә караватта йоҡларға тейеш түгел, ти белгестәр. Был тәжрибә кеше менән йорт хайуанының бәйләнешен нығытҡан. Билдәле булыуынса, йорт хайуандары кешенең психик торошона ыңғай йоғонто яһай. Улар стресс кимәлен түбәнәйтә.

■ Тормошта яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшергә теләһәгеҙ, көнөнә йога һәм медитацияға 25 минут бүлегеҙ. Был мейе эшмәкәрлегенә яҡшы йоғонто яһай, хистәрҙе контролдә тоторға ярҙам итә, энергияны арттыра, ти Ватерлоо университеты ғалимдары. Һынауҙарҙа ҡатнашыусы 31 кеше өс төркөмгә бүленгән. Беренсе төркөм 25 минут буйына Хатха-йога, икенсе төркөм медитация менән шөғөлләнгән, ә өсөнсө төркөм китап уҡыған. Тәүге ике төркөмдәге кешеләр үҙ маҡсаттарына иғтибар туплай алған, хистәрен дә контролдә тотҡан, көс-ҡеүәттәре лә ташып торған. Әйткәндәй, Һиндостанда үткәрелгән эксперимент күрһәтеүенсә, тәмәке тартырға теләүселәргә лә йога һәм медитация менән шөғөлләнеү файҙалы. Ошо рәүешле һынауҙарҙа ҡатнашыусы 1021 кешенең 80 проценты яман ғәҙәте менән хушлашҡан.

■ Бөтөн донъяла һатылған һыуҙың 80 процентында пластик бар. Пластик өлөшсәләре эске ағзаларға эләгеп, сәләмәтлекте ҡаҡшатыуы ихтимал. Миннесота университеты тикшеренеүҙәренә ярашлы, иң бысраҡ һыу Америкала. Артабан исемлекте Ливан, Һиндостан дауам итә. Ә иң түбән бысраныу кимәле Франция, Германия, Бөйөк Британияла. Ғалимдар бөтөн донъянан алынған һыу өлгөләрен тикшергән. Күп өлгөләрҙә микропластик - диаметры 5 мм булған пластик табылған. Микропластик составындағы ағыулы химик матдәләр эсәктәрҙә тарҡала. Бынан тыш, кеше микропластик менән һулай, сөнки ул һауала ла бар. Эске ағзаларға эләккәс, пластикта булған химик матдәләр үпкәнең аҫҡы өлөшөнә, хатта ҡан әйләнешенә барып етә. Ғалимдар пластик һауытта һатылған һыуҙың зарары барлығы тураһында иҫкәртә.

УЙЛЫҒА - УЙ

**"Йәшлегемә атлап түгел - йүгереп ҡайтыр инем", тип, кем генә алтын йәш сағын һағынып йырламаған икән. Үткән ғүмер, ҡартлыҡ тураһында әңгәмә башлаһаң, күпселек, ысынлап та, йәшлеген иҫкә алып уфтаныусан... Вайымһыҙ бала сағыбыҙҙы, шат мәктәп йылдарын, беренсе мөхәббәтебеҙҙе, унан шаулы студент ваҡытын, ғөмүмән, ғаилә ҡороп, бала-сағалы булып киткән мәлгә тиклемге дәүерҙе һәр кемебеҙ иң яҡшы хәтирәләр итеп һаҡлап киләбеҙ.**

# ИҢ БӘХЕТЛЕ МИҘГЕЛЕМ,

## йәки Етмеште ҡыуып барған тиҫтерҙәремә әйтер һүҙем



Совет осоронда илебеҙҙә "Хеҙмәт - тыуған ил алдындағы төп бурыс", тип йәмғиәттәге эштәр иң беренсе планға ҡуйылған мәлдәрҙә гүзәл йәшлегебеҙҙе бөтөнләйгә тиерлек бәхетле киләсәк - коммунизм төҙөүгә бағышланыҡ, шул хаҡта йырҙар сығарып йырланыҡ, ике-өс быуын кешеләренең йәшлеге бына шулай үтеп китте. Минең алтын ваҡытым да пионер һәм комсомол тарафынан тәрбиәләнеп, коммунистар партияһына алмашҡа әҙерләнеү менән үтте, тиһәм, хаталанмаҫмын. Коммунизммы ул, йәиһә башҡа ниндәй генә дәүер булмаһын, йәш ғүмер хаҡында һүҙ барғанда, илде хәстәрләү, һаҡлау, хеҙмәткә булған һөйөү менән бер рәттән, әлбиттә, һәр тере йән эйәһе өсөн тәбиғи булған ике енес вәкилдәре араһындағы мөхәббәт тураһындағы хәтирәләр ҙә ситтә ҡалмай бит инде. Күпселек бына шул мәлен айырыуса һағыныусан. Кемдер үҙенең һөйгәне менән ҡасандыр ҡауыша алмағанына ғүмер буйы үкенеп бөтә алмай, ә кемдер, киреһенсә, һөйөп-һөйөлөп, ҡауышып та, бергә бәхетле йәшәп китә алмауы өсөн ҡайғыра.

Йәшлегебеҙҙе күпме генә мәңгеләштерергә хыялланһаҡ та, уны нисек кенә "әрләнәк" тә, ғүмер тигән нәмә әкренләп... юҡ, шәпләп үтә бара, хатта уҡ һымаҡ оса, тип әйтер инем. Ғүмеребеҙҙең "бала саҡ", "йәшлек" тип аталған гүзәл мәлдәре, ысынлап та, кисә генә булып үткән һымаҡ. Уҙған ғүмерҙе һағынып, ниндәй генә фәлсәфәләр һатһаҡ та, кемдер әйтмешләй, үткән - үткән инде. Тағы күпме йәшәргә ҡалған икән, тип, Аллаһы Тәғәләгә өмөт бағлап, артабан йәшәргә тырышабыҙ. Кемебеҙҙер балалары өсөн бер нәмәһен дә йәлләмәй, уларҙы аяҡҡа баҫтырып өлгөрөп ҡалайым тип тырыша, уларға белем биреү яғын ҡарай, икенселәр, ҡәҙерлеләренә өйҙәр һалып, мөмкин тиклем мулыраҡ донъя малы ҡалдырырға ынтыла. Ә кемдер, "Ярай, ун һигеҙ йәшегеҙгә тиклем һеҙҙе ҡарап үҫтерҙек, арьяғын үҙегеҙ ҡарағыҙ", тип гәзиздәрен ҡырға эш әҙләргә ебәрә. Кемебеҙҙендер бала-сағаларыбыҙ, ысынлап та, тормош тотҡаһына баштан уҡ ныҡлап тотоноп, үҙенә яҡшы һыңар табып, уның менән бергә-бергә донъя көтөп, ҡәҙимге йәшәп ала ла китә. Ә бер аҙ сибегерәктәре... тормоштоң бейек-бейек, көслө тулҡындарына ҡаршы тора алмай, юғалып та ҡала.

Оло үкенескә, беҙҙең быуынды, унан һуңғыларҙы ла фәҡәт ошо донъя ғына бар икән дә, кеше тик шуның өсөн генә йәшәргә тейеш, тигән рухта тәрбиәләгәндәр. Үлгәндән һуң әҙәм балаһының мотлаҡ мәңгелек ахирәт тормошона аяҡ баҫасағы хаҡында күпселек оло быуын вәкилдәре лә, йәштәр ҙә бер ни белмәй. Бына ошо бөйөк хәҡиҡәтте белмәү ҙә бик күптәрҙең тормош ауырлыҡтарына ҡаршы тора алмай, Аллаһы Тәғәлә ҡуйған һынауҙарҙы үтә алмауҙарының сәбәбсеһе булыуына шикләнмәйем. Минең ныҡлы инаныуымса, уҙған ғүмер хаҡында уйланған хәлдә лә, һәр кешенең башында "Мин был донъяла нимә ҡалдырам һәм ахирәткә үҙем менән нимә алып китә алам?" тигән уйҙар йөрөргә тейеш. Билдәле, беҙ ахирәткә үҙебеҙ менән кәфендән башҡа бер матди нәмә лә алып китә алмайбыҙ, тик донъялыҡта ҡылған яҡшы һәм яман ғәмәлдәребеҙ генә беҙҙең менән буласаҡ. Аллаһы Тәғәлә һәммәбеҙ өсөн мотлаҡ тип ҡушҡан ғибәҙәттәребеҙ, Уға әйткән зекерҙәребеҙ, доғаларыбыҙ, кешеләр өсөн эшләгән яҡшылыҡ һәм яуызлыҡтары-

ПАРСАЛАР, ӘЙТЕМСӘЛӘР



# ҺАУЛЫҠ - ҘУР БАЙЛЫҠ

## Оҙон ғүмерлелек

Оҙон ғүмерлелек нимәләргә бәйле? Күп кенә белгестәр төрлө һәм туҡлыҡлы аҙыҡҡа, кешенең холоҡ-ҡылығына бәйле, тиҙәр. Һәйбәт холоҡ-ҡылыҡ, кешеләргә яҡшы мөғәмәлә, әҙәплелек, шәфҡәтлелек кешенең ғүмерен оҙайтырға хеҙмәт итә икән.

Быға инаныға була. Мәҫәлән, донъяла иң оҙон ғүмерле халыҡ хәҙер япондар һәм улар донъяла иң мөләйем, иң әҙәпле халыҡ.

Гел әҙәпле булып әҙәм ғүмерҙәрен һәм үҙ ғүмеркәйҙәребеҙҙе оҙайтып-оҙайтып йәшәһәксе.

* * *

Гелән һәйбәт һәм туҡлыҡлы яңы аҙыҡ ашап ҡына йәшәүе еңелдән түгел, әлбиттә. Донъяның ниндәй саҡтары, ниндәй көндәре булмай.

Ә бына һәр саҡ яңы бешерелгән аш-һыуҙы ашарға, ҡалған аш-һыуҙы ашамаҫҡа тырышырға мөмкиндер.

Һинд халҡы бешеүенә өс сәғәт үткән ашты ашарға яраҡһыҙ, тип һанай. Ул ашҡаҙанға яраһа ла, тәнгә, рухҡа зыяндан башҡа файҙаһы юҡ, ти.

Аштан да бигерәк, үҙебеҙҙең тәнебеҙҙе һәм йәнебеҙҙе алама ҡылыҡтарыбыҙ менән ашайбыҙ, шулай үҙ ғүмеребеҙҙе үҙебеҙ ҡыҫҡартабыҙ, буғай.

### Йоҡо

Кемделер йоҡо тоҡсайы тип әрепләйҙәр.

Йоҡоһоҙ кешене әрепләмәйҙәр ҙә, йәлләмәйҙәр ҙә.

Белгегеҙ килһә, рәхәтләнеп йоҡлай алыу үҙе бер бәхет.

Тимәк, тәне сәләмәт, йәне сихәт тигән һүҙ.

Кешенән ҡай саҡ көлөп, "йоҡо һимертә", тиҙәр.

Юҡ, йоҡо кешегә көс өҫтәй, йән-тән тынысլығы бирә, рухын байытмаға урын әҙерләй.

Йоҡоноң ҡәҙерен белеп, түмен татып йәшәгәндәргә ни етә.

Кеше аҙна тирәһе ас тора ала. Кеше өс-дүрт көн һыуһыҙ тора ала. Кеше бер-ике тәүлектән ары йоҡоһоҙ тора алмай.

Йоҡо - тән һаулығы, йәшәү дауаһы ул.

Ғалимдар 70 йәшлек кешенең үҙ ғүмерендә уртаса күпме йоҡлағанын, шулар эсендә күпме төш күргәнен, күпме йоҡламауын иҫәпләп ҡараған.

Шул иҫәп буйынса мин, 80 йәшкә яҡынлап килгән кеше, ғүмеремдең 33 йылын йоҡлап, шуның эсендә 7 йылын гел төш күреп йә төшәнеп үткәргәнмен, имеш. Бары 56 йыл буйы ғына, йоҡламай, эш-көш менән булғанмын, ял иткәнмен. Йөрөү, кешеләр менән аралашып уҙғарғанмын. Оҙон кеүек күренгән ғүмер ҙә былай шаҡтай ҡыҫҡарып ҡала икән шул.

Ана ни хәтле бит!

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

**(Дауамы бар).**

быҙ менән генә ҡаласаҡбыҙ. Барлыҡ йыйған мөлкәтебеҙ был донъяла ҡаласаҡ...

"Хәҙер инде үлһәм дә үкенмәйем", тип әйтерлек итеп йәшәр өсөн был донъяла ла ниҙер ҡалдырғы килә бит әле, йәмәғәт. Минең ныҡлы инаныуымса, хатта ошо хаҡта һүҙ йөрөткән хәлдә лә, матди нәмәләр икенсе планға ҡуйылырға тейеш. Ә иң беренсе урында - гәзиз балаларыңа тәрбиә биреү мәсьәләһе булыуы мөһимдер. Аҡмулла олатайыбыҙ "иң әүвәл кәрәк нәмә", тип атаған имандың һәммәбеҙҙең йөрәгендә булырға тейешлеген һәм уның ни икәнен һәр кемебеҙ үҙ балаһына өйрәтергә бурыслы. Унан һуң, ата-әсәгә, туған телгә ихтирамлы булыу, илһөйәрлек, эшһөйәрлек рухы балаларың өсөн үҫтереп ҡалдырылырға тейешле мираҫ ағасының олоно булып торорға тейештер.

"Йәшлегенә ҡабаттан ҡайтыу мөмкинлеге килеп сыҡҡан хәлдә, нишләр инең?" тигән һорау бирһәләр, мин һис икеләнеп тә тормаҫтан: "Ҡайтмаҫ инем!" тип яуап бирәсәкмен. Сөнки ҡасандыр йәшлек менән аңлы, йәиһә аңһыҙ ҡылған хаталарымды, ҡырын эштәремде, гонаһтарымды һис кенә лә ҡабатлағым килмәй. Ә бына хәҙерге мәлемде иң бәхетле сағым, тип һанайым. Оло йәшкә етеп, балаларымдың үҙаллы тормош ҡороп ғүмер итеүҙәрен, үҫеп килгән ейән-ейәнсәрҙәремдең шат йөҙҙәрен күреп, көн дә шуның өсөн Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итеп йәшәү дәүеремде үҙемдең иң ғүзәл "алтын көҙөм" тип тә атар инем. Үҙ балаларыңа, башҡа йәштәргә өгөт-нәсихәттәр, файҙалы кәңәштәр биреп, уларҙы иманға өндәп, ғүмереңдең ҡалған мәлен шундай изге ғәмәлдәргә бағышлау - беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған аманат. Йәш егеттәрҙең аҡһаҡалдар биргән кәңәштәргә ҡолаҡ һалыуы, ҡыҙҙарҙың ағинәйҙәр нәсихәттәрен үтәүе халҡыбыҙҙың быуындан-быуынға күсеп килә торған иң яҡшы йолалары булған. Ил тормошон, ундағы ҡайнап торған ҡатмарлы эштәрҙе, әлбиттә, йәштәр алып бара. Йәш быуындың эшенә артыҡ тығылмай ғына, унда-бында төҙәткеләп тороу, әлеге мәлдәге әҙәп, холҡоң менән уларға үрнәк була алыу, үҙеңде "аҡһаҡал" итеп хис итеү - үҙе бер оло бәхет. "Әлеге мәлдәге", тип юҡҡа ғына әйтмәнем, сөнки хәҙерге йәштәрҙә күпме генә тәнҡитләһәк тә, беҙҙең үҙебеҙгә лә ҡасандыр йәш саҡта шаянлыҡ, дыуамаллыҡ, хатта бер аҙ ғына йүләрлек һымаҡ сифаттар хас ине бит.

Оло кеше булыу бәхетен бик күптәр татый ҙа алмай, үкенескә. Оло йәшкә түгел, ир уртаһына ла етмәгән көйө күптәр был донъяны ташлап китеп барғылай. Ана шуларҙың күбеһенең, дөрөҫөн әйткәндә, иртә китергә үҙҙәре үҙҙәренә сәбәп ҡылыуы үкенесле. Эскелек менән тәүҙәрәк мауығып, унан шул шайтандың ҡолона әүерелеп, ҡырҡ-иллегә лә етмәгән көйө яҡты донъя менән хушлашыусы ир-аттар (хатта бәғзе ҡатын-ҡыҙҙар ҙа!) хаҡында уйланам йыш ҡына. Шул уҡ ваҡытта, тирә-яғыма баҡам да, ейән-ейәнсәрҙәре менән гөж килеп, шул "балдай татлы"ларын етәкләп йөрөүсе тиҫтерҙәремдең бер аҙ һыр баҫҡан, әммә бәхетле йөҙҙәрен күреп, һөйөнөп бөтә алмайым. Һәммәһенең иңендә күп тормош тәжрибәһе булған, барыһы ла был тормошта үҙ урынын тапҡан, нимәләр өлгәшкән ошо оло быуын кешеләренә ҙур ихтирам менән баҡам. Күптәренең иман юлында булыуы айырыуса ҡыуанысլы. Ике ай самаһы элек телефон аша яҡын танышымдың хаж сәфәренә йыйыныуы хаҡында ишеткәс, ысын күңелдән шатландым. Хатта һис таныш булмаған милләттәшеңде Аллаһ йортонда осратып, иң яҡын дуҫыңдай итеп күреп, уның менән һөйләшеп тороуҙы ла ҙур бәхеткә һанайым. Уларҙың да үҙ балаларын телдән төшөрмәй, гәзиздәренең уңыштарын һөйләүен ишетеп, шатлыҡтарын бүлешәм. Бәғзеләре (хатта күптәре) ниндәйҙер булһа берәй сире хаҡында ла эс серҙәре менән бүлешеүсән. Мин, ҡасандыр доктор булып эшләгән кеше булараҡ, уларға белгәнемсә ҡәҙәре кәңәштәр бирергә тырышам. Күп кенә сирҙәрҙең башлыса оло кешеләргә хас, тәбиғи булыуҙары хаҡында ла аңлатыу эше алып барам. Аллаһы Тәғәлә барыбыҙ өсөн яҙған тәҡдирҙән уҙып китеү мөмкин булмағанлығы, уға риза булып, барына шөкөр итеп йәшәү зарурлығы хаҡында ла иҫтәренә төшөрөргә тырышам.

Абдулхаҡ ағай мәрхүм Игебаев әйткәнсә:

*...Ғүмерҙәр ике килмәй шул,*
*Донъя бит - фани ғына.*
*Уның асылдарын фәҡәт*
*Аңламай сабый ғына...*

Аллаһы Тәғәлә һәммәбеҙгә бер генә мәртәбә биргән иң ҡәҙерле нәмә - ғүмер. Бына ошо ғүмеребеҙҙең ҡалған өлөшөн заяға үткәрмәй, уның ҡәҙерен белеп, ошо йәшкә килеп етеүебеҙ өсөн Раббыбыҙға шөкөр итеп, Уның ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып ҡына йәшәргә тырышайыҡ, ҡәҙерле тиҫтерҙәрем!

Әйткәндәй, "заяға" һүҙе гәрәпсәнән "әрәм булыу, юғалыу" (урыҫса - пропадать) тип тәржемә ителә. Ғүмерҙе заяға үткәрмәүҙе боронғо ата-бабаларыбыҙ хәҙергесә "теттереп, донъяның артына тибеп йәшәп ҡалыу", тип аңламаған. Улар аңлауынса, Аллаһы Тәғәләгә тәүбә итеп, баш эйеп, ғибәҙәттәр ҡылып йәшәргә өлгөрөп ҡалыу күҙ уңында тотолған...

**Хәлил НӨЙӨНДӨКОВ.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Талант

Талант - мотлаҡ иҫ киткес шедеврҙар тыуҙырыу ғына түгел. Яҡын кешең тураһында хәстәрлек күреү - талант. Мөғәллимлек - талант. Ҡунаҡсыллыҡ - талант. Проблемаларҙы хәл итә белеү - талант. Коллектив менән идара итә белеү - талант. Ата-әсә һөйөү - талант.

Беҙ йыш ҡына үҙебеҙҙең талантыбыҙҙы баһалап еткермәйбеҙ. "Эх, әгәр музыкант булһам..." - тип уйлай күршекәсе. "Матур әйберҙәр эшләй белһәм икән..." - ти пианист. Үҙеңде башҡалар менән сағыштырыу ярамай. Бары тик нимә эшләй беләһең, шуны эшләргә һәм һәләтеңде күктәр тарафынан бирелгән бүләк тип ҡабул итергә кәрәк. Сөнки был тормошта үҙеңде ғәмәлгә ашырыу өсөн һәләттәреңде үҫтереү зарур, ә башҡаларҙың һәләте тураһында хыялланыу түгел. Әгәр кемдер үҙенең һәләтһеҙлегенә зарлана икән, тимәк, ул был тормошта бик аҙ эште башҡарып ҡараған.

Ошоларҙың барыһын да иҫәпкә алып, талант - файҙалы, әммә тормошта иң мөһиме түгел, тиергә мөмкин. Талант тураһында ялҡауҙар күберәк һөйләй. Улар өсөн талантһыҙлыҡ - бер нәмә лә эшләмәҫ өсөн яҡшы сәбәп. Әгәр барлыҡ рәссамдарҙың, ғалимдарҙың, спортсыларҙың, филантроптарҙың һәм бизнес-магнаттарҙың уртаҡ бер һыҙаты бар икән, был бер нисек тә талант була алмай, ә үҙ маҡсаттарына иғтибар туплай белеү генә. Әгәр нимәләрҙер өлгәшкең килһә, иғтибарыңды шуға йүнәлт. Барыбер бөтөн нәмәне шунда уҡ эшләп булмаҫ. Ишаралап ҡына һирәк киттарҙы ҡотҡарыу, астарҙы туйындырыу, озон ҡатламындағы тишекте бөтәштереү мөмкин түгел. Кешелектең башҡа ағзаларына ла эш ҡалһын.

### Ваҡытығыҙҙы бушҡа үткәрмәгеҙ

Күпселек үҙенең мауығыуын һөнәргә әйләндерә һәм уның килем сығанағына әүерелеүе яйлап тормошҡа аша. Ундай кешеләрҙән нимәгә өйрәнергә мөмкин?

- Яратҡан шөғөлөң менән булашып, аҡса эшләргә була икәнен.
- Тормоштоң ҙур баҙар булыуына инанырға. Профессионал булыуы менән кешеләр үҙҙәре уҡ һинең хеҙмәтеңә түләй башлаясаҡ.

Тағы ла шуныһы: тормош һабын ҡыуығындай операларға бөтөнләй оҡшамаған. Телевизорҙа ғына кемдеңдер башына модель агентлығы асыу идеяһы килеп төшә лә, шунда уҡ ҡуртымға бина ала, идарасы тәғәйенләй һәм Гавай утрауҙарына ял итергә оса. Ысынбарлыҡта проектты финанслау өсөн тиҫтәләгән банкты урап сығырға, ял көндәрендә икенсе эш урынында эшләргә тура килә һәм иң беренсе офисың ванна бүлмәһенән дә бәләкәйерәк була. Ысынбарлыҡ, ысынлап та, асыуға тейә. Ысынбарлыҡта барыһы ла 100 тапҡырға әкренерәк бара. Ысынбарлыҡта яратҡан шөғөлөн профессияға әйләндереүселәр ундай һабын ҡыуыҡтарын ҡарамай. Кеше тормошон күҙәтеү мөмкинлеге үҙ тормошоң менән йәшәүгә етмәй. Ҡыҫҡаһы, яратҡан эшегеҙ менән шөғөлләнеп аҡса эшләй башларға теләйһегеҙ икән, шөғөлөгөҙгә иғтибар итегеҙ, сөнки барыһы ла тап шунан башланыуы ихтимал. Ҡыҙыҡһыныуҙарығыҙ һәм шөғөлдәрегеҙ ни тиклем әҙерәк, мөмкинлектәрегеҙ ҙә шул тиклем генә.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

## ӘЙТҺӘҢ -ҺҮҘ...

# АРАЛАШСЫЛАР ХЕҘМӘТЕМЕ?



**Интернетта бер дин әһеленең балалар йортондағы сарала ҡатнашыуы тураһында мәғлүмәт бирелеп, фотоһүрәттәр ҡуйылғайны. Аҫтына "Ураҙа ваҡытында тапҡан инде эш...", "Ике йөҙләлек", "Ҡыланып йөрөй шунда" кеүек йәмһеҙ генә комментарийҙар яҙылғас, уны яҡлашырға булып киттем. "Ураҙа ваҡытында балаларҙы ҡыуандырған икән, насармы ни? Һеҙ үҙегеҙ ниндәй изге ғәмәлдәр ҡылдығыҙ Рамаҙан айында?" - тип яҙып ҡуйҙым. Бер яҡтан ҡарағанда, халыҡ агрессив инде беҙҙә, икенсе яҡтан... Дин әһелдәренә ризаһыҙлыҡ белдерергә сәбәптәре лә булып тора шул.**

...Балаларымдың имтихандар ваҡыты ине, үҙҙәренән тыш, тағы ла нимәләлер ышанғылары, кемдеңдер ярҙамына өмөтләнгеләре килә. Шул мәлдә, бер аҙ күңелдәрен баҫырға тип, уларҙы Өфөнөң Туҡай урамындағы мәсетенә алып киттем. Өшкөртәм, юлығыҙҙы еңеләйтәм, тиген булдым. Доға уҡыусы кеше берәү генә булғанлыҡтан, уға озаҡ ҡына сират көтөргә тура килде. Ул арала төшкө намаҙ мәле яҡынлашты. Шул ваҡыт төпкө бүлмәнән өс ир кеше килеп сыҡты ла, "Йәһәт булығыҙ, ваҡыт тар", тип, йыйылыусыларҙы таратып алып, доға уҡый башланылар. Ҡалған кешеләргә бик йылдам, ҡыҫҡа ғына итеп башҡарылды доғалар. Беҙгә уҡылған доға минутҡа ла етмәгәндер әле. Мин үҙем белгән ике аятты уҡып өрҙө лә, "Өс йөҙ һум", тине мулла тигәнем. Аҡсамды биреп, балалар менән аптыраша биреп кенә сығып киттек...

Унан тағы, Михайловка ҡасабаһында көслө мулла бар, доғалары, өшкөрөүҙәре бик шифалы, тигәстәр, ике ҡатын менән шунда юлландыҡ. Шулай уҡ оҙаҡ көттөк. Ул арала егермеләп ҡатын-ҡыҙ йыйылып китте. Мәсет бик бәләкәй, баҙ кеүек һалҡын, ултырыр урындар ҙа һанаулы ғына, иҙәнгә терәләрлек түгел - һыуыҡ. Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн шаршау менән бүленгән бер мөйөштә көтөп ултырып, һыуыҡтан тамам ҡаттыҡ. Ахырҙа, мәсеткә "текә генә" бер машинала берәү килеп туктаны, мин уны берәй хәлле генә эшҡыуар хәйер бирергә килгәндер, тип уйланым башта. Тик ул күҙ алдыбыҙҙа етеҙ генә йөрөп кейенеп алды ла, "Бөгөн мулла булмай, уның урынына мин доға уҡыйым", тип хәбәр һалды. Тағы аптырашып ҡалдыҡ. Беҙ бит баяғы халыҡ маҡтаған дин әһеленә, телефондан һөйләшеп-килешеп, махсус тәғәйенләп килгәйнек. Әлеге ир кешегә: "Беҙгә хәҙрәттең тап үҙенә әләгергә ине, ул бөгөн беҙҙе ҡабул итәм, тигәйне..." - тип өндәштек. Ул ҡыҙып китте: "Мулла һайлап торорға эсеңдә енең бармы әллә? Мин һеҙҙе бында тәүге тапҡыр күрәм. Тәүгә килгән кешенән биш йөҙ һум, ҡабатлап килеүселәргә башҡа хаҡ. Төшөрҙөңмө аҡсаңды?" Мин дә яуапһыҙ ҡалманым, ҡаршы һорау бирҙем: "Доға уҡыуҙың таксаһы бармы ни?" Ир кеше, күрәһең, бындай һорауға яуап биреп өйрәнгәндер: "Сталуайҙа һине буш ашаталармы? Магазинда бушлай кейем бирәләрме? Шуның кеүек, бында ла - буштың атаһы үлгән", - тине.

Боролдоҡ та сығып киттек. Ысын дин әһеле түгел, ә Аллаһ менән кешеләр араһында аралашсы (посредник) ролен үтәп маташыусылар икән былар, тип, шул хәтлем екһенеп, хайран булышып ҡайттыҡ. Был мулланың доға уҡыуҙы сталуайҙ ашау, кейем һатыу менән сағыштырыуы бигерәк аптыратты. Хәйерҙе, әлбиттә, һәр кем үҙе белеп бирә. Ә бында беренсе тапҡыр мәсеткә килгән кешенең биш йөҙ һум түләргә тейешлеген талапҡа әйләндергәндәр.

Бик күп абруйлы, белемле, намыҫлы дин әһелдәрен беләм. Шулай уҡ намыҫһыҙҙарын да осратып ҡына торам. Уларҙы мин генә түгел, халыҡ та айыра, таный. Хатта беҙҙе алдай алған осраҡта ла, Аллаһты алдап, йәки янылыштырып була микән? Һаҡал ебәреп, сәллә урап, сапан кейеп, үҙеңде Аллаһ хеҙмәтсеһе итеп танытып та, һәр һүҙең аҡсаға, килем алыуға ҡоролһа - белмәйем... Беҙгә хөкөм итергә түгел, әлбиттә...

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

✓ *Баҡсалағы йәштәр аптырашып ҡалды минең был ҡылыҡҡа. Шул ваҡыт был ғаиләнең өләсәһе, 65 йәшлек Мәрйәм апай, теге йоланы иҫләп алды һәм итәгенә матур-матур бәрәңгеләрен йыйып алып, минең эргәгә ыңғайланы.*



СӘФӘРҘӘРЕБЕҘ

# "КИСКЕ ӨФӨ" АРБАҺЫ...

## Баймаҡта һәм...



Билал мәктәбендә.

**Һәр миҙгелдең үҙ матурлығы. Әле генә йәй хозурлығына һоҡланып бөтә алмаһаҡ, әлеге сәйәхәттә алтын көҙ биҙәктәренә хайран булдыҡ. Архангел, Белорет, Әбйәлил, Баймаҡ райондары биләмәләрендәге тәбиғәт күренештәрен - әле урман-тау, әле һөҙәк битләүҙәр, әле йәм-йәшел ҡарағай-шыршы шырлығы, әле ҡыҙыллы-һарылы ҡайын-уҫаҡ сауҡалыҡтары, әле ялан-ҡыр булып китеп, күҙҙәрҙе һөйөндөрөүен ябай тел менән һөйләп бөтөп кенә лә булмаҫ.**

Тәбиғәткә тамаша ҡылып та, ашығып, ашҡынып та беҙҙе көткән урынға - Баймаҡ районының Билал ауылына килеп еттек. Мәҙәниәт йорто алдында беҙҙе яҡты йөҙ менән ҡаршы алыусы китапханасы Райхана Булатова менән осрашыу булаһы урынға, мәктәпкә йүнәлдек. Шул арала бер автобусҡа тейәлеп, Баймаҡ ҡалаһы ағинәйҙәре лә килеп етте. Ҡалғандар - Һәмән, Өмөтбай, Күгиҙел, Таһир ауылы ағинәйҙәре, Билал ауылы халҡы, ауыл биләмәһе башлығы, китапханасылар, уҡытыусылар, юғары синыф уҡыусылары мәктәп алдында көтә ине. Гармун, ҡурай моңо аҫтында, ике рәткә теҙелгән балаларға сәләм биреп, мәктәп биләмәһенә үтәбеҙ. Болдорҙа мәктәптең ҡатын-ҡыҙ уҡытыусылары ансамбле башҡорт бейеүен башҡара. Сығыш тамамланыуға балаларҙың дәррәү тауышы яңғырай: "Беҙ башҡорт балалары! Беҙ башҡортса һөйләшәбеҙ!" Бөгөн интернет селтәрҙәрендә йәштәрҙең, балаларҙың был оранын йыш ишетәбеҙ. Әммә Билал мәктәбе уҡыусыларының ораны икенсерәк, үҙенсәлеклерәк яңғыраны: ошонда йыйылған ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар уны йәш быуындың оло быуын алдындағы ант һүҙе һымағыраҡ ҡабул итте."Борсолмағыҙ, милләт киләсәге, башҡорт теле ышанысла ҡулдарҙа!" тигәндәй яңғырап, күңелдәрҙе тулҡынландырҙы был оран.

Балаларҙы сәләмләп, уларға бер нисә теләк еткергәндән һуң, ололар мәктәптең ҙур бер бүлмәһенә инеп урынлашты. Түңәрәк ҡорҙо ойоштороусы һәм алып барыусы Райхана Булатова һөйләшәсәк темаға матур итеп ишара яһаны: "Туған телебеҙ, уны киләһе быуындарға тапшырыу, һаҡлау, уның ҡулланыу даирәһен киңәйтеү тураһында һөйләшәбеҙ бөгөн, - тине ул. - Мәрйәм апай Бураҡаева бер сығышында былай тигәйне, бөгөн "Әҫәрҙәремде кем уҡыр?" тигән һәр шағир, яҙыусы; "Йырҙарымды кем тыңлар?" тигән һәр композитор, йырсы; "Тарихыбыҙ кемгә кәрәк булыр?" тигән һәр ғалим; "Республикабыҙ һаҡланмаһа, вазифаһыҙ ҡалмаммы?" тигән һәр етәксе, уҡытыусы, китапханасы, рәссам һәм башҡалар был туған телебеҙҙе һаҡлауға үҙ өлөшөн индерергә тейеш!" Артабан Өмөтбай мәктәбенең тарих уҡытыусыһы Айҙар Мәжитов, Билал ауылының хаҡлы ялдағы рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Илдүсә Әминева, балалар баҡсаһы мөдире Рима Мырҙина, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Люциә Даутова, Һәмән ауылы ағинәйе Ишһылыу Әминева, һәүәҫкәр композитор, уҡытыусы Вилюр Мәүлитов, Күгиҙел ауылы ветерандар советы, "Атайсал" клубы рәйесе Әхәт Урмантаевтар Сәғирә Кәримованың мауыҡтырғыс слайдтары һүрәтләнеше аҫтында бер-бер артлы телмәр тотто һәм уларҙың фекерен бик тос ҡына итеп ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Мәжит Заманов йомғаҡлап ҡуйҙы. Билалдарҙың "Киске Өфө", "Һаҡмар" гәзите журналистарын, район, биләмә ағинәйҙәрен һәм аҡһаҡалдарын халыҡты йыйып, туған тел уҡытыуға, халҡыбыҙҙың йолаларын тергеҙеүгә, тиңдәр араһында тиң булып йәшәүебеҙгә булышлыҡ итеүсе башҡа мәсьәләләргә арнап түңәрәк ҡор ойоштороп ебәреүе был төбәктә рухлы, ҡыйыу һәм аңлы кешеләр йәшәүен һәм уларҙың милләт, туған тел яҙмышына битараф булмауын күрһәтте.



Бөрйән ағинәйҙәре.
Булат Ғәлиев фотолары.

## ...Бөрйәндә

Билалдағы осрашыуҙан рухланып, артабан Бөрйән районына, Иҫке Собханғол ауылы мәҙәниәт йортонда үтәсәк сараға ашыҡтыҡ. Район ағинәйҙәре үҙҙәре эшләгән эшкә йомғаҡ яһарға, алдағы көндәргә бурыстар билдәләргә, үҙҙәрен борсоған мәсьәләләр буйынса һөйләшергә йыйылғайны. Тәүҙә сараға килгән халыҡты "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, бүләккә календарҙар алыу мөмкинлегенән файҙаланырға саҡырҙыҡ. Рәхмәт яуғырҙары, гәзитебеҙгә дәррәү яҙылдылар. Шунан мәҙәниәт йорто фойеһына ҡуйылған ҡул эштәре күргәҙмәһен ҡарап сыҡтыҡ. Нимә-нимә, ҡорама ҡорорға оҫта Бөрйән ағинәйҙәре. Бөрйән районының "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе Рәшиҙә Ғиззәтуллина үҙе күптән шөғөлләнә был ҡул эше менән, ул ойошторған "Кәрәҙ" клубына халыҡ коллективы исеме лә бирелгән. Ағинәйҙәрҙе әүҙемләштереүҙә лә уға ошо шөғөлө ярҙамға килә, ауылдарҙа йөҙәрләгән ҡатын-ҡыҙҙы боронғо һөнәрҙе тергеҙеү эшенә ылыҡтырған. Әлеге көнгә райондың 21 ауылында уның тарафынан ҡорама буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрелгән. Сарала Рәшиҙә Хәй ҡыҙы ошо юҫыҡта башҡарылған эштәрен барланы.

- Ағинәйҙәребеҙ республика кимәлендә ойошторолған "Селтәр", мөнәжәтселәр конкурстарында ла, милли кейем парадтарында ла әүҙем ҡатнашты, - тип һөйләп китте ул. - Был сараларҙа ҡатнашыу өсөн, әлбиттә, һинең әҙерлегең кәрәк. "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһына тупланыу беҙҙең районда ла һәр ағинәйҙең үҙ милли кейемен тектереүҙән башланды бит. Район мәҙәниәт бүлеге ярҙамы менән селтәр һәм ҡашмау эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрелде. Был йүнәлештә эшебеҙҙе дауам итәсәкбеҙ, сөнки 2020 йылда үтәсәк Бөтә донъя фольклориадаһы саралары беҙҙең Бөрйәнгә лә киләсәк бит. Ғөмүмән, милли асылыбыҙ өлгөләрен, онотолған йолаларыбыҙҙы ҡайтарыу буйынса күп эшләйһе бар әле. Һәм был бурыс бөгөн тап беҙҙең ағинәйҙәр иңенә һалынған. Үткән аҙнала бына Ҡолғанала Гөлсәсәк Вәлиева тарафынан "Һеҙҙә кейеҙ баҫалармы? Беҙҙә кейеҙ баҫалар!" исемле байрам ҡарарға насип булды. Мин унда нисәмә йыл район буйлап эҙләгәнемде таптым, тип әйтә алам: кейеҙҙе биҙәүсе серге тыштың һәр төрлөһөн, борондан ҡалғанын да, әле яңы әҙерләнгәнен дә, күрергә яҙҙы был байрамда. Афарин!

Йола, тигәндән, ошо көндәрҙә күршеләремдең бәрәңге ҡаҙғанын күреп ҡалдым да, үҙебеҙ бала саҡта башҡарылған йоланы иҫкә төшөрөп, ҡойма аша: "Кәтмән! Кәтмән бирмәһәң, китмәм!"- тип ҡысҡырҙым. Баҡсалағы йәштәр аптырашып ҡалды минең был ҡылыҡҡа. Шул ваҡыт был ғаиләнең өләсәһе, 65 йәшлек Мәрйәм апай, теге йоланы иҫләп алды һәм итәгенә матур-матур бәрәңгеләрен йыйып алып, минең эргәгә ыңғайланы. Мин үҙ сиратымда уға ошо уңышты донъя именлегендә, йән тыныслығында, сәләмәтлектә, ғаилә бөтөнлөгөндә ашарға яҙһын, тигән теләктәр теләп, уның кәтмәнен ҡабул ҡылдым. Был күренешкә шаһит булған балаларҙың, моғайын, хәтерендә ҡалыр был йола, улар уны үҙ балаларына тапшырыр.

Һәм тағы. Һәр бер хужабикәнең ҡулынан килә торған милли ризыҡтар әҙерләү, онотола төшкәндәренең ысулдарын тергеҙеү ҙә күҙ уңынан ысҡындырылмаһа ине. Ошо теләктән сығып, буҙа әҙерләү серҙәрен интернет аша ла, һәр кемгә күрһәтеп тә, бик күптәр менән бүлешә алдым."Нимә була ул шул буҙа тигәндәре? Эсеп ҡарайым әле!" - тигәндәр үҙҙәре хәҙер буҙа оҫталарына әйләнде...

Бөрйәндәрҙең ағинәйҙәр эшенә заманса бер яңылыҡ индереүе, йәғни Башҡорт википедияһында эшләргә волонтерҙар тәрбиәләүе, Бөрйән порталында район тураһында башҡорт телендә мәҡәләләр туплауы тураһында Байназар ауылынан килгән ағинәй Көнһылыу Ҡотлобаева һөйләне. Ул шулай уҡ, халыҡ дауаһы менән шөғөлләнеүсе булараҡ, райондың гүзәл заттарын халыҡ медицинаһы нигеҙҙәрен өйрәнергә саҡырҙы, был өлкәнең үтә лә ҡыҙыҡлы һәм файҙалы яҡтарын аңлатты.

Сарала район хакимиәтенең кадрҙар һәм мәғлүмәт-аналитик эштәр бүлеге мөдире Марсель Ғүмәров, район имамхатибы Рәсүл Мөхәмәтйәнов, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире, республика "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева, шағирә, райондың "Таң"гәзите журналисы Айһылыу Ғарифуллина сығыш яһаны, Бөрйән ағинәйҙәре башҡарған эштәрҙең тәрбиәүи әһәмиәтен юғары баһаланы.

Шулай итеп, меңәр саҡрым юлдар үтеп, республиканың төпкөл төбәгендәге сараларҙа ҡатнашып, әллә күпме ҡыҙыҡлы кешеләр, ваҡиғалар эсендә ҡайнап йөрөп, ылау башын ҡайтыуға ҡайырҙыҡ. Халыҡ араһына сығып, улар һулышын тойоп, күҙмә-күҙ ҡарап һөйләшеп алыу киләсәккә ышаныс та бирә кеүек. Әгәр ҙә шул халыҡ, баймаҡтар, әбйәлилдәр, бөрйәндәр, йылайырҙар, әлшәйҙәр һ.б. берҙәм булып ойошмаһа, милләт мәнфәғәте, милләт намыҫы, туған тел, йолаларыбыҙ, тип йән атмаһа, был ышаныс та булмаҫ ине. Бәхеткә күрә, ошондай ышанысты уятыусы милләттәштәребеҙ бар һәм булыр ҙа.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Октябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (12) дүшәмбе | 5:52 | 7:22 | 13:30 | 17:18 | 18:48 | 20:18 |
| 3 (13) шишәмбе | 5:54 | 7:24 | 13:30 | 17:15 | 18:45 | 20:15 |
| 4 (14) шаршамбы | 5:56 | 7:26 | 13:30 | 17:12 | 18:42 | 20:12 |
| 5 (15) кесе йома | 5:57 | 7:27 | 13:30 | 17:10 | 18:40 | 20:10 |
| 6 (16) йома | 5:59 | 7:29 | 13:30 | 17:08 | 18:38 | 20:08 |
| 7 (17) шәмбе | 6:01 | 7:31 | 13:30 | 17:05 | 18:35 | 20:05 |
| 8 (18) йәкшәмбе | 6:03 | 7:33 | 13:30 | 17:03 | 18:33 | 20:03 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

**Әйткәндәй, бөгөн, 30 сентябрҙә, мосолман донъяһы Ғәшүрә көнөн байрам итә.**

АФАРИН!

# ХЫЯЛДАР АРТЫНАН...



**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында ижад итеүсе һәләтле йәштәргә гел һоҡланам. Әле "Хыялға ҡаршы" спектакленән алған тәьҫораттарым менән уртаҡлашҡым килә.**

Был спектакль тураһында матбуғатта ла, интернет селтәрҙәрендә лә күп яҙылар. Мин дә, спектаклде былай итеп тә ҡуйып була икән, тип аптырайым. Режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаевтың һәләтенә ҡыуандым. Урыны менән илатты ла спектакль. Актерҙарҙың ижады тураһында ла оҙаҡ һөйләргә булыр ине. Мәскәүҙә Щепкин исемендәге училищены тамамлап ҡайтыуҙарына ла байтаҡ хәҙер, ошо ваҡыт эсендә улар театрҙың умыртҡа бағанаһын тотоп торо-усыларға әйләнде. Илсур Ҡаҙаҡбаевты башҡа театрҙар ҙа спектакль ҡуйырға әүҙем саҡыра, әле генә Бүрәт академия драма театрында ошо уҡ "Хыялға ҡаршы" спектаклен сәхнәләштереп ҡайтты. Артур Кәбировтың Тимерханы ла ("Нәркәс"), Закиры ла ("Ҡара йөҙҙәр") бик тәрән образдар, тетрәндергес яҙмышлы геройҙарын йөрәге менән башҡара, улар менән бергә ихлас көйә, яна. Ул матур автор-башҡарыусы ла. Өфөлә үткән тәүге концертын интернет аша ҡарау бәхетенә ирешкәйнек. Спектаклдә лә уның йырҙары үҙенең башҡарыуында яңғырай - был да спектаклдең уңышы. Урал Әминев бар яҡлап һәләтле егет. "Руди-Never off" спектаклен ҡарағас, миндә ул шундай матур тәьҫир ҡалдырҙы. Рудольф Нуриев образын хатта драма театрында ла балет артистары уйнарға тейеш, тигән фекерҙә инем быға тиклем. Сөнки балет сәнғәте бөтөнләй икенсе төрлө физик сифаттар талап итә артистан. Ә Урал Әминевтың Рудиһын ҡарағандан һуң, шаҡ ҡатаһың. Сәхнәлә драма актеры түгел, ә балет артисы тиерһең! Театрҙа бындай артистың булыуы үҙе бер бәхет бит ул. Фәнис Рәхмәтов тигәндә, тәүҙә күҙ алдына уның "Джут" спектаклендәге Әхмәт образы килеп баҫа. Әле генә тамамланған "Туғанлыҡ" фестивалендә театр тәнҡитселәре лә уның был эшенә юғары баһа бирҙе. Сыңғыҙ Айтматовтың "Аҡ пароход"ындағы Малай образы ла маҡтауға лайыҡ. Ә Ринат Баймырҙинды мин башҡорт халҡының тере Салауат Юлаевы тип атар инем. Мөһабәт кәүҙәле, оҙон буйлы был егет Мәскәүҙең "Крокус Сити Холл" залында Салауат Юлаев образын уңышлы башҡарып, тамашасыларҙың иғтибарын үҙенә йәлеп итте.

"Хыялға ҡаршы" спектакле Екатеринбургта Коляда-plays фестивалендә күрһәтелде, Мәскәүҙә Артмиграция-2017 фестивале тап ошо спектакль менән асылды. Рәсәй театрҙарында эшләүсе 100-ҙән ашыу йәш режиссерҙың эшен ҡарап сыҡҡандан һуң, Артмиграция-2017 фестиваленә һайлап алынған ете театр араһында "Хыялға ҡаршы" спектакленең булыуы был ижади коллективтың дәрәжәле исемдәргә лайыҡ икәнен һөйләй. Ошо йәштәрҙең Башҡортостан Республикаһының Ш. Бабич исемендәге Йәштәр премияһына тәҡдим ителеүе лә яҡшы күренеш. Уларҙың башҡорт халҡының бөйөк улы исемен йөрөткән премияға лайыҡлы булыуҙарында шик тә юҡ.

**Дамир ТАЖЕТДИНОВ.**
**Татарстан, Бөгө ҡалаһы.**

ХОККЕЙ

# ТАҒЫ ЛА ИКЕ МӘРӘЙ

**Был аҙнала Өфө хоккей клубы ситтә ике уйын уҙғарҙы. Алдағы аҙналағы өс осрашыуҙың тик бер матчында ғына юлаевсыларға уңыш йылмайҙы. "Трактор" һәм "Лада" хоккей командалары менән осрашыуҙан "Салауат Юлаев" үҙ янсығына тағы ла ике мәрәй һалды.**

Беренсе уйын Силәбелә уҙҙы. Матч тәүге минуттарҙан уҡ ике команда көйәрмәндәрен дә көсөргәнештә тотто. Тәүге шайбаны юлаевсы Тему Хартикайнен индерең, үҙ командаһын алға сығарҙы. Икенсе осорҙоң тәүге минуттарында Йоонос Кемппайнен хужаларға тағы бер гол "бүләк" итте. Ләкин "Трактор" егеттәре тәүҙә таблолағы һандарҙы тигеҙләне, ә өсөнсө осорҙа иһә ҡунаҡтарҙы уҙып китеү йәйен табып, матчта еңеү яуланы. Уйын иҫәбе, 3:2.

Тольяттилағы осрашыу ситтәге уйындарҙың һуңғы матчы булды. Уындарҙағы командаһы Өфө хоккейсылары тәүге минуттарҙан уҡ ҡыҫымға алды һәм күпләп һөжүм итте. Тик беренсе осорҙо командалар һөҙөмтәһеҙ тамамланы. Икенсе осорҙа юлаевсылар, күпселектә ҡалыуҙарынан файҙаланып, гол индереүгә өлгөштө. Осор тамамланыуға барғанда иһә "Лада" иҫәпте тигеҙләне. Һуғы 20 минутта юлаевсы Игорь Макаров командаһын алға сығарыу яйын тапты, ләкин хужалар ҙа етеҙлектәрен арттырҙы һәм ҡунаҡтарҙы ҡыуып етте. Уйын овертаймға күсте. Өҫтәмә минуттарҙа "Салауат Юлаев" тилберәк булып сыҡты - Артем Федоровтың голы еңеү килтерҙе. Шулай итеп, осрашыу, юлаевсылар файҙаһына, 2:3 менән тамамланды.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Сентябрь айында тыуған көнөн билдәләүселәр - **Белорет районы** Железнодорожный ҡасабаһынан Ирина Әбсәләмова, Рысҡай ауылынан Нурия Бадалова, **Ейәнсура районы** Хоҙайбәндә ауылынан Люцияә Кинйәбулатова, **Әлшәй районы** Иҙрис ауылынан Урал Ғәбдрафиҡов, **Өфө ҡалаһынан** Дания Әбүбәкерова, Сәлиә Ишбулатова, Илгиз Ҡолһарин, **Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Гөлшат Нәзершина, Рәмилә Юлсурина, **Архангел районы** Архангел ауылынан Гөлсинә Иштуғанова, **Баймаҡ районы** Ниғмәт ауылынан Г. Мансурова, **Учалы районы** Ҡолош ауылынан Тәслимә Нуриева, **Салауат районы** Ахун ауылынан Нурия Яруллина, **Әбйәлил районы** Әбйәлил ауылынан Зөһрә Ҡотоева, Әсмә Тайыпова, **Ҡырмыҫҡалы районы** Боҙаяҙ ауылынан Люция Ишкинина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ!

Йәшәүҙән йәм табып, изгелектәрегеҙҙән игелеген күреп, яҡындарығыҙҙың йылыһын тойоп, бәхеттә, шатлыҡта, иҫәнлектә йәшәгеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 сентябрь "Мәҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл 12+
**1 октябрь "Сәмле ярыш - баттл"** театрлаштырылған тамаша 6+
**3 октябрь "Хыялый"** (С. Әбүҙәр), лирик комедия 12+
**4 октябрь "Мулла"** (Т. Миннуллин), драматик хикәйә 12+
**5 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия 12+
**6 октябрь "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**30 сентябрь "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 0+
**1 октябрь "Слоненок"** (Р. Киплинг) 0+
Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕ БУЛМАҒАН КЕШЕНЕҢ...

## кешелә ни эше бар?

Йөҙ күтәреп кешенән теләнгәнсе, башыңды эй ҙә ерҙән һора.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аллаһы Тәғәлә ир-егетте барлыҡҡа килтергән дә, һуңынан, мин ҙурыраҡҡа һәләтле тиеп, ҡатын-ҡыҙҙы булдырған.

**(Адела Сент-Джон).**

Баҫалҡы булыу ауыр. Бигерәк тә минең кеүек бөйөк кешеләргә.

**(Мөхәммәд Али).**

Аллаһы Тәғәләнең көләүен теләһәгеҙ, уға үҙегеҙҙең пландарығыҙ тураһында һөйләгеҙ.

**(Вуди Аллен).**

Ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәре ҡалдырмаған яралар өсөн генә беҙҙе йәлләй.

**(Жан Ануй).**

Тамаша залы бер нисә кеше көлгәс кенә көлә башлай. Эш тап шул бер нисә кешене көлдөрөүҙә тора.

**(Марсель Ашар).**

Был ресторан гел тулы булғанға, унда бер кем йөрөмәй.

**(Йоги Берра).**

Көсһөҙ бер ҡасан да ғәфү итмәй. Ғәфү итеү тик көслөләргә генә хас.

**(Махатма Ганди).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Чхуан-Цзының ҡатыны вафат булған, һәм Аҡһаҡал уны күрергә килгән. Чхуан-Цзы урынында ултырып, шым ғына йыр һуҙа икән. Шул ваҡыт Аҡһаҡал:**

**- Һеҙҙең менән ҡартайған көнгә хәтлем ғүмер иткән, матур балалар үҫтергән мәрхүм ҡатыныгыҙ өсөн иламауығыҙ етмәгән, йырлап ултыраһығыҙ. Был бигерәк насар түгелме? - тигән.**

**- Юҡ, хаталанаһығыҙ, - тип яуаплаған Чхуан-Цзы. - Ҡатынымдың үлеүе мине ҡайғыртмаҫ ине ме? Мин бик ҡайғылы инем, ләкин аҙаҡтан ҡатыным тыумаҫ элекке, тәне лә, йәне лә булмаған осор тураһында уйлай башланым... Башта бит йән үҫешкән, уға, камиллашып, тәне ҡушылғас ҡына ғүмер башланған. Кеше гел ниндәйҙер яңы үҙгәрештәр кисерә. Бына минең ҡатыным да яңы үҫеш баҫҡысында - үлем аша үткән. Былар бөтәһе лә бер-береһен йыл миҙгелдәре кеүек алыштыра бара: яҙ һәм көҙ, йәй һәм ҡыш... Әлеге мәлдә, ҡатыным үлде, тип илау, һыҡтау - ул йәшәйеш баҫҡыстарын аңламау, тигән һығымтаға килдем һәм илауымды туҡтаттым..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
29 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары –
**50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 1979/09